ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

12-18 ғинуар (һыуығай)
2024
№ 1 (1094)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Хеҙмәт кенә кеше итә...



6

Халҡыбыҙҙың аҫыл хазинаһы,
Милләтемдең изге түле ул!



8 - 9

Ҡыш бабай һүҙендә тора



10 - 11

Халҡыбыҙҙа матур йолалар бар



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*һәр кемдә тәбиғәт йә иген, йә сүп үләне рәүешендә урын ала; шуның өсөн тәүгеһенә ваҡытында һыу һибергә, икенсеһен ваҡытында утарға кәрәк.*

*(Фрэнсис Бэкон).*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Быйылғы йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип иғлан ителгән. Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү тигәндә, һеҙ ниҙәрҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?**

***Вячеслав ШАФИҒУЛЛИН, Өфө ҡалаһы Күсемһеҙ милек агентлығының бүлек мөдире:*** Элек-электән ғаиләлә һалынған тәртип, уның традицион йәшәү рәүеше балаға тормоштоң төрлө сағылышын аңларға һәм уның бер өлөшө булырға ярҙам итә. Ҡыҙҙар әсәйҙәренән үҙҙәрен ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ итеп тоторға, өй һәм ҡул эштәре серҙәренә, үҙенән бәләкәй туғандарын тәрбиәләүҙә ҡатнашырға өйрәнә, был уларҙа тәбиғәттән һалынған әсәйлек инстинктын үҫтерә, нығыта. Малайҙар иһә күңелдәренә атаһы миҫалында ғаилә өсөн яуаплылыҡ тойғоһо һеңдереп, улар башҡарған эштәрҙе күреп, өйрәнеп, тормошта ҡулланырлыҡ оҫталыҡҡа эйә була. Аҡыл, көслөлөк, эшһөйәрлек, зирәклек - малайҙар өсөн һәр заманда ла тәүге планда торған мөһим донъяуи сифаттар.

Иң тәүге сиратта тергеҙелергә тейешле ғаилә ҡиммәте - ул атай кешенең ғаиләләге ролен, абруйын күтәреү. Ҡыҙғанысҡа күрә, хәҙер күпселек тулы ғаиләләрҙә лә ғаилә башлығы ролен әсәй кеше башҡара, ә атай иһә тегендә-бында алып йөрөүсе водитель, ватылғанды йүнәтеп-төҙәтеүсе һәм башҡа ошондай ваҡ эштәргә генә ярауҫы ғаилә ағзаһы булараҡ ҡабул ителә.

Шулай уҡ балаларҙың ата-әсәләренә, ололарға, ғөмүмән, йәмғиәткә ҡарата булған ихтирам тойғоһонон тергеҙелеүе лә мөһим ҡиммәттәрҙең береһе. Ҡулланыусы йәмғиәт булыуҙан, кемделер үҙ мәнфәғәтебеҙ өсөн файҙаланыу күренешенән, ихтирамһыҙлыҡтан арына алһаҡ, тормошобоҙ бермә-бер үҙгәрер, тигән фекерҙәмен.

Ғаилә ҡиммәттәре ныҡ булған ғаиләлә үҫкән кешеләр, ғәҙәттә, эмоциональ һәм физик йәһәттән көслөрәк була. Яҡшы ғаилә ҡиммәттәре дөйөм яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килтерә һәм кешегә был донъяла үҙен яңғыҙ тоймаҫҡа, үҙенең проблемалары менән бер үҙе ҡалмаҫҡа ярҙам итә. Ошо хәҡиҡәт һеңдерелергә тейеш балаларға һәр ғаиләлә.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль законға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, башланғыс һәм төп дөйөм белем биреү программалары дәүләт аккредитацияһы булған мәғариф ойошмаларының төп дөйөм белем биреү программаһына "Хеҙмәт" (технология) дәресе индерелә.**

# ХЕҘМӘТ ДӘРЕСЕ ҠАЙТАРЫЛА

Федераль законда уҡыусыларҙың бөтә талаптарҙы мотлаҡ үтәүе, уларҙы яуаплы хеҙмәткәрҙәр контролендә тотоу ҡарала. Уҡыусылар талаптарҙы үтәмәгән осраҡта дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылыуы мөмкин.

Федераль ҡанун шулай уҡ педагогтарға һәм белем биреү ойошмаһының башҡа хеҙмәткәрҙәренә ҡарата физик һәм психик көс ҡулланыуҙы тыя. Бынан тыш, педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең хоҡуғын һәм законлы мәнфәғәтен яҡлау ысулдары билдәләнә, хеҙмәт хоҡуҡтары, социаль гарантиялар, социаль ярҙам саралары аныҡлана.

Уҡыусыларға смартфон һәм башҡа гаджеттарҙы файҙаланыуға сикләүҙәр индерелә, әммә мәктәп ҡорамалдарын файҙаланыу тыйылмаясаҡ. Законға ярашлы, уҡыусы йәки уҡытыусы ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф янаған осраҡта һәм башҡа ғәҙәттән тыш хәлваҡиға булмағанда, дәрес ваҡытында телефон ҡулланырға ярамай.

Ата-әсәләр дәрестә мобиль телефон ҡулланыуҙы тыйыу тураһында күптән һорай ине. Яңы закон дисциплинаны яҡшыртасаҡ, сөнки балалар смартфон менән булышып ултырмаясаҡ, тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. Уның әйтеүенсә, ҡабул ителгән ҡарар белем сифатын һәм уҡытыусының абруйын күтәрәсәк, үҫмерҙәрҙең үҙ-ара йәнле аралашыуына булышлыҡ итәсәк.

## ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

# АЖДАҺА ЙЫЛЫ

**Төн уртаһы көн шикелле балҡып китте**
**Ай тигәнем - күҙ сағылтыр таж даһа:**
**Күктән гәлсәр тәңкәләрен һибә-һибә,**
**Килеп еткән алтын тажлы Аждаһа.**

**Аждаһа, тип, шөлөмтөрәп төшмәйексе,**
**Алда әле килер көндәр бар ҙаһа:**
**Ҡәҙерҙәрен белгәндәргә әкиәти таң,**
**Сихри көстәр алып килгән Аждаһа.**

**Таң менән төн - керпек асып йомған ара,**
**Бер-беренә әҙәм баҙҙар ҡаҙмаһа;**
**Кем өсөндәр ҡот осорғос Ҡәһҡәһәлер,**
**Кемдер өсөн изге йәндер Аждаһа.**

**Был донъяла ҡыл тибрәтер әмәл тапмай,**
**Үҙ тиреңә үҙең һыймай ажлаһаң,**
**Көндәреңде берәм-берәм йота-йота,**
**Утҡа һалып үтеп китер Аждаһа.**

**Көндәр, айҙар тыуып торһа - кинәнесем,**
**Иң ауыры - көткән таңдар яҙмаһа.**
**Әйләнеп тә йылдар еләә, килә торһон,**
**Булғанда ла көтөлмәгән Аждаһа.**

**Сафуан ӘЛИБАЕВ.**

12+

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# КӨЙӨНӨРГӘМЕ, ҺӨЙӨНӨРГӘМЕ?

**Яңы йыл байрамдары ла үтеп китте. Һәүетемсә, тип өҫтәге килә, ләкин тел әйләнмәй: беҙгә - байрам, ә тегендә, ут эсендәге уландарға нисектер? Улар тарафынан был көндәрҙә сәләм-хәбәрҙәр, видео-сәхифәләр ҙә булманы (бәлки, аҙағыраҡ килеп етер, моғайын). Ҡайҙандыр аҙашып, түше тулы орден-миҙал таҡҡан, үҙен "спецназ ветераны Кирилл" тип таныштырған хәрби операция яугирының видео-мөрәжәғәте генә килеп сыҡты Бәйләнешкә.**

Беҙгә, яҡташтарым, тип өндәшеүсе был егет республика халҡын Яңы йыл менән ҡотлап, яуҙағы егеттәрҙе лә ҡайғыртыуыбыҙҙы үтенде: "Окоптарҙа уларға бик һыуыҡ, мин унда булдым, беләм. Яңы йыл өҫтәлнә салат әҙерләгәндән бушаған ҡалай банкаларҙы сүплеккә ташламағыҙ, уларҙы йыйып, МХО-ға ярҙам пункттарына ебәрегеҙ",- тип өндәште байрам итергә йыйыныусыларға. Был ҡалай банкаларҙан МХО-ға ярҙам ойоштороусы ирекмәндәр май шәм эшләп ебәрәсәктәр һәм был ябай ғына һеҙҙең ярҙам егеттәребеҙгә әҙ генә булһа ла йылыныуға йә хатта аҙыҡ йылытып ашарға мөмкинлек бирәсәк, тине Кирилл.

Әлбиттә, 21-се быуатта ялан шарттарында хәрбиҙәр өсөн заманса "көнкүреш" сараларының булмауы эсте бошора һәм уларҙың ҡалай банкаларға ҡалған көнө ҡыҙғаныс, сөнки һуғышта ваҡ-төйәк тигән нәмә юҡ. Тимәк, был беҙгә, халыҡ иңенә яткан бурыс хаҡында бер генә минутҡа ла, хатта байрам сәғәттәрендә лә, онотоърға ярамай, тигән һүҙ; тимәк, яугирҙарыбыҙға ярҙам ылауы туктарға тейеш түгел. Быныһы Яңы йыл айҡанлы оҙайлы ялдарҙың бер яғы булһа, икенсе яғында - бөгөнгөбеҙҙең һәүетемсә "тыныс" күренеш-ваҡиғалары: Яңы йылдың тәүге өс көнөндә республикала 120 иҫерек водитель тотола; Илештән элек хөкөм ителгән 20 (!) йәшлек иҫерек туғанының машинаһын Краснокамаға һорауһыҙ ҡыуып алып китә һәм барып етә алмайынса, соҡорға ултыра, ә водитель руль артында тәмле йоҡоға тала; Яңы йылға бер сәғәт ҡалғанда Шаран районында 13 йәшлек ҡыҙ баланы 40 йәшлек иҫерек үгәй атаһы көсләй; Туймазы районы Илсембәт ауылындағы янғында 60 йәшлек ир менән ҡатын өйҙәрендә янып һәләк була; Нефтекама ҡалаһында өс егет бер ҡыҙға бәйләнеп, уның башын йәрәхәтләй; Өфөләге торлаҡ йорттарҙың берәһендә лифт пассажирҙары менән бергә шахта соҡорона ҡолап төшә... Бәлки, етеп торор? Ә Яңы йыл каникулының тәүге 3-4 көнө бындай хәүефле факт һәм ваҡиғалар менән туп-тулы, тик уларҙы һанап сығыу ғибрәт өсөн булһа ла, икенсе яҡтан, бөгөнгө тормош-йәшәйешебеҙ проблемаларына туранан-тура ишара: эскелек, енәйәт, яуапһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек, вайымһыҙлыҡ...




Бәлки, ысынлап та, етеп торор? Ә бик күп төрлө улар, бәлә-ҡаза килтереүсе сәбәп һәм дә боҙоҡлоҡтар. Бындай хәлдәр әлеге "һәүетемсә" йәшәргә күнеккән әҙәм балаларының аңына, тормош асылына шул тиклем тәрән инеп ояланған, уларҙы хәҙер бер ниндәй ҙә МХО- ла, яу яланынан ҡайтарылған йәп-йәш егеттәрҙең табуттары ла айныта алмай. Әйтерһең дә, барыһы ла элеккесә, һәүетемсә улар өсөн. Бына шуныһы фажиғә бөгөнгө көнөбөҙҙә.

Ғәмәленә күрә - әмәле, тигәндәй, ундайҙарҙы, бәлки, ҡылыҡтарына яраш-лы яза саралары айныта алыр ине? Югиһә, күп осраҡтарҙа уларға яза сараларын йомшартыу яйы ғына ҡарала: йәнәһе, тәүге тапҡыр факторы, ҡаза булыу-булмауҙы иҫәпкә алыу, тағы ниндәйҙер ғәфү итеүҙәр эҙләү-юллауҙар ахыр сиктә потенциаль енәйәтсегә һыуҙан ҡоро сығырға йә енелсә ҡаушау менән 30 мең түләп, язанан ҡотолорға булышлыҡ итә. Эскән килеш рулдә тәүге тапҡыр әләгеү язанан ҡотолорға хоҡуҡ бирәме? Бәлки, был әҙәм ошоға тиклем дә иҫерек көйө йөрөһә лә, бер тапҡыр ҙа эләкмәгәндер? Юл-хәрәкәт патруле хеҙмәте лә бит, өҫтәүенә, онотҡанда бер генә рейдҡа сыға. Сыҡҡан хәлдә лә был хаҡта алдан иҫкәртеү яһай. Эш күп булмаһын, тиҙерме әллә югиһә? Тимәк, аулаҡлап тамаҡ сылата ала намыҫһыҙ водитель һәм әйләнә-тирәләгеләргә хәүеф сығанағына әүерелә.

Ә бына ҡасандыр артта ҡалып та, бөгөн цивилизацияны илгә әүерелгән Сингапурҙа иҫерек водителдәргә ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ һабаҡ бирелә: штраф, төрмә һәм иң һөҙөмтәлеһе - таяҡ менән һуктырыу. Күршебеҙ Беларустан дә өлгө алырға булыр ине: тәүге тапҡыр эләгеүенә ҡарамаҫтан, иҫерек водителгә бер ҙә 30 мең түгел, ә 12 500 доллар штраф һәм 3 йылға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеү ҡарала, ә ҡайһы осраҡтарҙа машинаһы тартып алына.

Республикала байрам көндәрендә тотолған әлеге иҫерек водителдәр арҡаһында фажиғә-фәлән булғанмылыр-юҡмылыр, ул хаҡта ЮХХДИ мәғлүмәттәре юҡ , уның ҡарауы, декабрҙә, тап Яңы йыл алдынан, эш урындарында һәләк булыусылар ноябрҙәгегә ҡарағанда 3 кешегә арткан. Был хаҡта Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы мәғлүмәттәренә һылтанып, mkset.ru сайтында хәбәр ителә. Декабрҙә бөтәһе эш урындарында 13 кеше һәләкәткә осрап, шуларҙың алтауһы айҙың һуңғы аҙнаһына тура килә. Ҡыҙғаныс...

Әммә йәшәйеш ниндәй генә хәлдәрҙә лә туктап ҡалмай, тормош дауам итә. Әйткәндәй, Яңы йылдың тәүге көнө - 2024 йылдың 1 ғинуарында республикабыҙҙа 10 сабый - 4 малай, 6 ҡыҙ бала донъяға килә. Ә халҡыбыҙҙа шундай изге йорау бар, фәрештәләрҙең "Амин" тигән мәленә тап килһен: ҡыҙ балалар күберәк тыуһа, илгә именлек килер. Сөбханаллаһ, шулай булһын!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Быйылғы йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип нарыкланасаҡ. Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү тигәндә, һеҙ ниҙәрҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?

***Арсен ХӘСНУЛЛИН, "Тәмле" кулинария селтәре директоры:*** Илдә ғаилә һәм ғаилә ҡиммәттәренә ҙур иғтибар бирелеүе яҡшы. Ныҡлы ғаиләләрҙең күберәк булыуы - көслө илдең нигеҙе. Ә ныҡлы ғаилә нигеҙе - мөхәббәт, ихтирам, бер-береңә булған иғтибар, хөрмәт.

Ғаилә - бала өсөн йәмғиәттә йәшәү өлгөһө биргән тәүге сығанаҡ. Нәҡ ғаиләлә илдең бәләкәй граждандары социаль йәһәттән формалаша: кешеләр менән аралашырға өйрәнә, үҙен йәмғиәттә нисек тоторға ярай һәм ярамағанлығын аңлай башлай, тәртип тигән төшөнсәне күңеленә һеңдерә һәм башҡалар. Социаль-әхлаҡи яҡтан һаусәләмәт быуын үҫтереүҙә, әлбиттә, балалар баҡсаһының, мәктәптен, тотош йәмғиәттең роле ҙур, ләкин төп нигеҙ - ғаиләнән.

Айырым бер ғаилә менән дөйөм йәмғиәт бер-береһенә ҙур йоғонто яһай. Үҙ ғаиләһендә күреп-белеп үҫкән ҡиммәттәрҙе кеше йәмғиәткә сығара һәм уларҙың ыңғай булыуын бәләкәстән хәстәрләү мөһим. Тимәк, беҙ йәшәгән йәмғиәттең яҡшы һәм яман күренештәре - барыһы ла үҙебеҙҙән тора.

Бөгөн мин ғаиләнең рухи ҡиммәттәре тураһында фекер йөрөткөм килә. Ғаилә ҡиммәттәре, минеңсә, бер ғаилә ағзаларын бер урынға туплаусы, уларҙы бер йоҙроҡҡа йыйыусы дөйөм бер идея, төшөнсә. Был ниндәйҙер һорауға ҡарата бер фекер йөрөтөү генә түгел, ә ошо ҡараштқ, кәрәк булһа, яҡлау, һаҡлау.

Рухи ҡиммәттәрҙең мөһим һәм әһәмиәтле төшөнсәһе - ғаилә йолалары (традициялары). Улар тарихи нигеҙҙә барлыҡҡа килеп, быуындан-быуынға тапшырылған эшмәкәрлек һәм ҡылыҡ формалары, төрлө йола, ғөрәф-ғәҙәт, рухи байлыҡ булып тора. Шулай булғас, һәр ғаиләнең, йәмғиәттәге дөйөм ҡиммәттәр менән бер рәттән, үҙенә генә хас ғаилә ҡиммәттәре лә бар. Ғаилә бары тик баланы ҡурсалау йәки башҡа төрлө матди ҡиммәттәр менән генә тәьмин итеүҙән тыш, быуындан-быуынға рухи, милли, дини һәм ватансылыҡ йолаларын тапшыра килергә тейеш.

Бында тағы ла бер мөһим аспект - әгәр ҙә ата-әсәләрҙең үҙ ҡиммәттәре, принциптары, ныҡлы ҡусәрҙәре булмаһа, балала бер ниндәй ҙә ыңғай шәхси һәм ғаилә ҡиммәттәре тәрбиәләнә алмай. Шулай уҡ беҙ динле милләт икәнлебеҙҙе һәм дини йолаларҙы ла һанларға тейешбеҙ икәнде онотмаҫҡа бурыслыбыҙ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы 2024 йылды Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек йылы тип иғлан итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Республика Хөкүмәтенә 2024 йылдың 31 ғинуарына тиклем ойоштороу комитеты составын һәм саралар планын раҫлау, сығымдарҙы финанслау сығанаҡтарын билдәләү бурысы йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров үткәргән оператив ултырышта Педагог һәм остаз йылының йомғаҡтары барланды. Былтыр республика педагогтары төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашҡан, спорт саралары үткән, Башҡортостан Башлығының 690 меңлек грантына 150 ауыл уҡытыусыһы лайыҡ булған. Хәҙер Хөкүмәт Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек йылының сараларын ҡабул итергә әҙерләнә.

✓Оператив кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, 2023 йылдың аҙағында республикала мәктәптәр, балалар баҡсалары, дауаханалар, спорт объекттары төҙәләп бөтөп, сафҡа индерелгән. "Был 20-гә яҡын объект төҙөлөшөнә өлөшләтә федераль финанслау ҙа инде, шуға ла уларҙы юғалтмау өсөн төҙөлөштө ваҡытында тамамларға кәрәк ине. Шулай уҡ донъя кимәлендәге вуз-ара кампус төҙөлөшө - беҙҙең төҙөүселәрҙең ысын мәғәнәһендәге хеҙмәт ҡаһарманлығы", - тине Республика Башлығы.

✓Быйыл февраль-март айҙарында Башҡортостанда "Юғарыға ос!" мәктәп мәғарифы форумы ойошторола. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә республиканың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, форум мәктәп уҡыусыларына әхлаҡи тәрбиә биреү эшенә, ошо өлкәләге проблемаларҙы тикшереүгә арнала.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай законға үҙгәрештәр индереп, өйҙә бушлай социаль хеҙмәттәр алыусылар исемлеген киңәйтте. Бындай хеҙмәттәргә өйҙә йыйыштырыу, кер йыуыу, гигиена процедураларын үткәреү, ашарға әҙерләү, хаттар ебәреү инә. Хәҙер хәрби хәрәкәттәр инвалидтары ла бындай хоҡуҡҡа эйә. "Йәрәхәт алыу, ауырыу арҡаһында үҙен-үҙе ҡарай алмаусылар, атламаусылар өсөн бындай ярҙам бик мөһим", - тип билдәләне Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# БАЙДЕН ТРАМПТЫ ҠЫҪЫРЫҠЛАЙ

**Яңы йылдың тәүге аҙнаһында донъя хәлдәре ниндәй һүрәтләнеш алды? Ғәҙәттәгесә, тәүге һүҙ һәм ваҡиғалар өйөрө, әлбиттә, МХО тирәләй бара. Был осор ике яҡ та бер-бер береһенең тыл объекттарын туҡтауһыҙ тип әйтерлек утҡа тотто. Рәсәй ғәскәрҙәре ҡаршы яҡ көстәрҙе төрлө йүнәлештәрҙә ҡыҫырыҡлауын дауам итә һәм боевиктар өҫтөнә ут яуҙыра, ә был иһә беҙҙең көстәрҙең Очеретино, Новокалиново, Бердычи һәм Петровское йүнәлештәрендә әүҙем хәрәкәтенә булышлыҡ итә. Ҡаршы яҡтың ҡорал ресурсы, атап әйткәндә, снаряд ҡытлығы килеп тыуҙы.**

Шул уҡ ваҡытта Рәсәй һуғышсылары етерлек күләмдә ҡорал менән тәьмин ителә, сөнки, тип хәбәр итә сығанаҡ, Рәсәй снаряд һәм пилотһыҙ осоусы аппараттар етештереүҙе юлға һалды. Айыруса дошмандың осоусы аппараттары операторҙарына "һунар" уңышлы бара: беҙҙең артиллерия һәм разведка һауала тимер "ҡошсоҡ" (БПЛА) күренеү менән операторҙың координаттарын асыҡлай һәм артиллерия шул йүнәлешкә ут аса. Украина Ҡораллы көстәренең 56-сы бригадаһы ошондай "һунар" һөҙөмтәһендә үҙенең яртылаш тиерлек составын юғалтты, тип хәбәр ителә. Өҫтәүенә, Украинаның Һауа оборонаһы көстәре Рәсәйҙең Х-22 ҡанатлы ракеталарына ҡаршы көсһөҙ булып сыҡты, тоннаға яҡын массалы был ракеталарҙың береһе лә юҡ ителгәне юҡ әле, тип белдерә хәрби күҙәтеүсе, Германияның отставкалағы генералы Эрхард Бюлер.

Шул уҡ ваҡытта Германияла украин һәм немец хәрбиҙәре күнекмә үткәргән полигон өҫтөнән даими осоп йөрөүсе пилотһыҙ күҙәтеү аппараттарының ҡайҙан ебәрелеүен йылдан ашыу инде асыҡлай ҙа, уны юҡ итә лә алмайҙар. Был, күрәһең, Германияның төрлө даирәләрендә истерика тыуҙыра: Бавария премьер-министры Маркус Зедер менән Бундестагтың оборона комитеты башлығы Циммерман Украинаға Taurus ракетаһы ебәреүҙе талап итә башланы. Ләкин Германия канцлеры Олаф Шольц бындай аҙымға барыуҙан ситтә тороу кәрәклеге һәм Киевҡа ракета ебәреү мәсьәләһе ҡаралмауы хаҡында белдерҙе. Шул хәлдә лә Шольцҡа Бөйөк Британия менән ФРГ баҫым яһай. Британия менән Франция Киевҡа Storm Shadow һәм Scalp ҡанатлы ракеталары ебәргән дә инде.

Тағы бер ярҙам ҡулы һис көтөлмәгән тарафтан - Япониянан һуҙылмаҡсы: был илдең Сит ил эштәре министры Еко Камикава исемле ханым дрондарға ҡаршы система өсөн НАТО фондына 37 млн доллар бүленәсәге хаҡында белдерҙе һәм ыңғайы бер Киевҡа иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ үҙе килеп, "гәзеллек" тураһында аҡыл һатты. Дөрөҫөн әйткәндә, Японияның үҙ проблемалары ла баштан ашҡан: әле генә булып үткән ер тетрәү байтаҡ емереклек һәм ҡорбандар килтерҙе. Етмәһә, авария булған "Фукусима-1" атом станцияһын һыуытыуҙа ҡулланылған миллиондан ашыу тонна радиоактивлы һыуҙы Тымыҡ океанға ағыҙыуын дауам итә... Күрәләтә ер йөҙөндә тотош экосистеманы ағыулау ниҫек атала икән, шулай уҡ гәзеллекме, тип һорағы килә был ханымдан.

● Шул уҡ ваҡытта Америкала президент һайлауҙары алды көрәше ҡыҙа бара, ҡайһы бер күҙәтеүселәр бындай ҡапма-ҡаршылыҡтар илде граждандар һуғышы сигенә килтереп терәүе ихтимал, тип белдерә. 6 ғинуар Джо Байден Дональд Трамп яҡлыларҙың Капитолийҙы штурмлауына өс йыл тулыу уңайынан Америка демократияһын Трамптан яҡлау кәрәклеге хаҡында телмәр тотто. Тик ул шуны иҫенән сығарып ебәрҙе, буғай: Байден "демократияһы" менән ҡәнәғәт граждандар илдә ни бары 28 процент ҡына тәшкил итә. Был тарихта булмаған антирекорд.

● Палестина мәсьәләһе - ҡайтанан көн тәртибендә. Израиль менән "ХАМАС" һуғышы үткән йылдың тетрәндерерлек фажиғәһе булды. Ике яҡтан да, айырыуса Газа секторында бик күп ҡорбандар, емереклектәргә килтерҙе был бәрелеш. Өс ай эсендә 23 меңгә яҡын палестинлы, күбеһенсә балалар һәм ҡатын-ҡыҙ ҡырылды. Бөгөнгө көн Газа проблемаһын хәл итеү буйынса төрлө варианттар ҡарала. Күпселек көстәр шулай ҙа Газа секторы менән Палестинаның үҙаллы дәүләт булып айырылыуы нигеҙендә конфликтты ахырынаса хәл итеү яғында. Берләшкән милләттәр ойошмаһы ла ошондай ҡараашта.

● Америка буйынса белгес Дмитрий Дробницкий, АҠШ-тағы киләһе һайлауҙарҙа ваҡытында Обамаға власҡа килергә ярҙамлашҡан ҡара тәнле ҡатын Сьюзан Райс президентлыҡҡа дәғүә итә алыр ине, тип фаразлай.

● РИА Новости хәбәр итеүенсә, был араларҙа Рәсәй менән Төркиә президенттары В.Путин һәм Тайип Эрдогандың осрашыуы көтөлә һәм ике яҡта ла уға әҙерлек эштәре бара, ләкин был сараның аныҡ ҡына көнө әле билдәләнмәгән. Бынан алдараҡ Эрдогандың белдереүенсә, Владимир Путин менән ул "иген коридоры" мәсьәләһе буйынса һөйләшеп килешеүгә өмөт итә.

● Ҡытай Халыҡ Республикаһының Сит ил эштәре министры Ван И ҠХР рәйесе Си Цзиньпин менән Владимир Путиндың былтырғы осрашыуын Ҡытайҙың тышҡы сәйәсәте уңыштарының береһе тип атаны һәм ике ил араһында бөтөн яҡлап та стратегик хеҙмәттәшлектең дә артабан да тәрәнтен дауам ителәсәгенә ышаныс белдерҙе.

● Был хәбәрҙе һөйөнсөләргә лә булыр ине, ләкин бөгөн сәйәси калейдоскоп минут һайын үҙгәреп тора, шунлыҡтан соҡор аша һикермәй тороп, "һоп!" тиергә ярамағанын яҡшы беләбеҙ. Венгрияның премьер-министры Виктор Орбан Евросоветты етәкләй башлауы ихтимал, сөнки Евросоветтың әлеге башлығы Шарль Мишель Европарламентҡа депутатлыҡҡа дәғүә итеү сәбәпле, был вазифаһын ҡалдырмаҡсы. Венгрия премьеры Орбандың Украина мәсьәләһе һәм башҡа ҡайһы бер позицияларҙа Евросоюз менән ҡараштары тап килмәүен беләбеҙ. Шул арҡала Европа илдәре етәкселәре Мишель урынына кандидатураны үҙҙәренсә хәл итеүҙәре лә ихтимал.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Быйылғы йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип нарыҡланасаҡ. Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү тигәндә, һеҙ ниҙәрҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?***

***Гөлнур МИҢЛЕҒОЛОВА, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы:*** Һорауҙы ишеткәс үк, тергеҙелергә тейешле ғаилә ҡиммәттәренең иң беренсеһе - туған телде белеү, яратыу, үҙең генә түгел, ә балаларыңдың да үҙ телдәрен белеүен тәьмин итеү, тип әйткем килде. Хәҙер ҡалала ғына түгел, ауылдарҙа ла атай-әсәйҙәр балалары менән урыҫ телендә һөйләшә, аралаша. Был мәсьәләне тиҙ арала хәл итмәһәк, бөгөнгө 30-40 йәшлек атай-әсәйҙәр башҡорт телен яҡшы белгән һуңғы быуын булыуы ла мөмкин. Мин Өфөгә беренсе тапҡыр 1997 йылда килдем. Трамвайҙа башҡортса һөйләшеп китеп бара инек, ике туған ағайым: "Өфөлә башҡортса һөйләшмәйҙәр", - тип аптырауға һалды. Һәм, ысынлап та, минә аптырап ҡараған пассажирҙар быны дәлилләне. Ләкин 2001 йылда баш ҡалаға уҡырға килгәс, хәлдең бөтөнләй икенсе йүнәлеш алыуына шаһит булып, ифрат ҡыуандым. Береһе лә башҡортса һөйләшеүҙән оялмай, ауыҙ тултырып аралаша инеләр. Бөгөн дә башҡорт телен йыш ишетәм. Ләкин балалар араһында түгел. Улар хатта ниндәйҙер сарала башҡортса йырлап сығалар ҙа, сәхнә артында урыҫса һөйләшәләр. Шуға күрә ғаиләлә туған телгә ҡарата булған иғтибарҙы арттырыу - тергеҙелергә тейешле ғаилә ҡиммәттәренең иң мөһиме, иң беренсе урында торғаны булырға тейеш.

Күп бала тәрбиәләү - милләтебеҙҙең элек-электән килгән ғаилә ҡиммәттәренең береһе. Ошо йүнәлешкә лә иғтибар бирелһә ине, тиген теләктәмен, сөнки бөгөнгө көндә бер, иң күбе ике балалы ғаиләләр күп. Беҙҙең ғаиләлә дүрт бала буй еткереп килә, улар бер-береһенә әле үк терәк. Үҙҙәре лә ғаиләле булғас, шулай уҡ туғанлыҡ ептәре ныҡ булыр, тип өмөт итәм.

Тағы ла бер ғаилә ҡиммәтенең тергеҙелеүе бөтә йәмғиәт өсөн тик ыңғай роль уйнар ине. Ул да булһа, йәштәрҙең ғаилә ҡороп алдынан ата-әсәләренең фатиһаһын алыуы, буласаҡ кәләштең йәки кейәүҙең ете быуыны барланыуы. Яңыраҡ аятта булырға тура килде, ике туғандарҙың бер-береһен белмәүенә иҫ-аҡылым китте. Үҙ туғандарын белмәйенсә, аралашмайынса ғаилә ҡорғандар әллә күпме. Был хәлгә юл ҡуйырға ярамай.

Яйы сыҡҡанда тағы ла бер мәсьәләне күтәргем килә. Хәҙерге ғаиләләрҙә ҡатын-ҡыҙ әсәй, донъя усағы йылыһын һаҡлаусы булып ҡына ултырыуҙан күптән ситләште. Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙҙары ир-егеттәр менән бер рәттән карьера төҙөй, емертеп аҡса эшләй, һөнәри баҫҡыс буйлап күтәрелергә тырыша. Был, әлбиттә, насар түгел, ләкин улар иненә барлыҡ донъя мәшәҡәтен һалған робот хәленә ҡалмаһа ине. Ҡатын-ҡыҙ - әсәй, ә ир-ат - атай ролендә булған ғаилә ҡиммәттәренең юҡҡа сығыуына юл ҡуйырға ярамай.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Декабрь аҙағында Мәскәүҙә Дәүләт советы ултырышы уҙҙы. Уны Рәсәй Президенты Владимир Путин үткәрҙе. Кәңәшмә Уҡытыусы һәм остаз йылын йомғаҡлауға арналды. Дәүләт башлығы "Йыл остазы" тигән йыллыҡ премия булдырырға тәҡдим итте. "Биш йыл элек "Остазлыҡ өсөн" махсус билдәһен булдырҙыҡ. Мин "Йыл остазы" премияһын да булдырырға тәҡдим итәм. Илдең барлыҡ төбәктәре остаздарҙың абруйын һәм статусын күтәреү өсөн аныҡ аҙымдар яһарға тейеш", - тине Владимир Путин.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Ватан көсө" форумын уҙғарыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указдан күренеүенсә, сара Башҡортостанда һәм ситтә йәшәгән яҡташтарыбыҙҙы берләштереү, республиканың артабанғы үҫешен тәьмин итеү, быуындар араһында рухи бәйләнеште нығытыу маҡсатында ойоштоarola. Форум 2024 йылдың 27-28 апрелендә була.

✓Башҡортостан парламентының яңы сессияһы асылды - Константин Толкачев һөнәри нигеҙҙә эшләүсе депутаттар менән ултырыш уҙғарҙы. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, унда көҙгө сессияға һығымталар яһалып, яңы миҙгелгә бурыстар билдәләнгән. Яҙғы сессия осоронда депутаттар 70 республика закон проектын ҡараясаҡ, улар араһында Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы БР Кодексы, Һайлауҙар тураһындағы БР Кодексын камиллаштырыу ҙа бар. Пленар ултырыш 25 ғинуарға билдәләнгән.

✓Рәсәй Президенты В. Путин пенсионерҙар һәм социаль ярҙамға мохтаж граждандарҙан коммуналь түләүгә банк комиссияһын алмау тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Унда социаль ярҙамға мохтаж граждандарҙан коммуналь түләүҙе түләгәндә комиссия алмаҫҡа һәм ваҡытында түләмәгән өсөн пеня алмаҫҡа тиелә. Бындай категорияға ҡарағандарҙың исемлеген РФ Хөкүмәте билдәләйәсәк. "Тура линия" барышында Президент был үҙгәреш пенсионерҙарға ҡағылыуын әйтте. Закон 2024 йылдың 10 июленән үҙ көсөнә инәсәк.

✓"Башнефть" тә дизель ягыулығына хаҡтарҙы арттырҙы. 27 декабрҙән ҡышҡы дизель ягыулығының (ДТ-3 К5) бер литры 61,25 һум тора, хәҙер ул 20 тингә ҡыйбат. Производствола ҡышҡы дизель ягыулығы йәйгеһенә ҡарағанда ҡиммәтерәк. Сөнки ул 30 градусҡа тиклем һыуыҡта тунмай, ә йәйгеһе -10-да туңа. Башҡа ягыулыҡ төрҙәренә хаҡтар үҙгәрмәгән.

ҠЫҪҠАСА

# ҠАЛАҒА ЛА - ТРЕНЕРҘАР

**Башҡортостанда 2024 йылда "Ҡала тренеры" проектын ғәмәлгә ашырыу башлана.** "Абруйлы чемпионаттарҙа енеү яулаған спортсыларҙы һәм тренерҙарҙы дәртләндереү өсөн махсус дәүләт стипендияларын булдырҙыҡ (30 мең һум), - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышына йыллыҡ мөрәжәғәтнамәһендә. - Хәҙер уны 73 спортсы һәм тренер ала. "Ауыл тренеры" проекты сиктәрендә түләүҙең күләмен 600 меңдән миллионға тиклем арттырҙыҡ", - тине Радий Хәбиров. Киләһе этапта яңы быуын чемпиондар әҙерләү өсөн олимпия резервы училищеһын асабыҙ, тип тә билдәләне республика етәксеһе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ҡала тренеры" программаһын ғәмәлгә ашырыу мәсьәләһе былтыр июль айында Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында ҡаралды. Унда 100 меңдән ашыу кеше йәшәгән ҡалаларҙа (Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Нефтекама, Октябрьский) "Ауыл тренеры" проекты кеүек программа талап ителеүе билдәләнде. Был проект ҡалаларҙа эшләмәй, ә тренерҙарға ихтыяж бар.

✓ **Рәсәйҙә 2024 йылдың октябрь-декабрендә граждандар хәрби хеҙмәткә дәүләт мәғлүмәт системаһы аша саҡырыла башлай.** Рәсәй Президенты Владимир Путин илдең Оборона министрлығына тейешле йөкләмә бирҙе. Илдә дәүләт мәғлүмәт системаһы һәм повесткалар реестры индерелә, шулай уҡ оборона министрлығы бүлексәһе ойоштороласаҡ, тиелә граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу мәсьәләләре буйынса йөкләмәләр исемлегендә. Кремль сайтында хәбәр ителеүенсә, шуға бәйле дәүләт башлығы граждандарҙы хәрби иҫәпкә ҡуйырға (иҫәптән төшөрөргә), электрон повесткалар билдәләргә, повесткалар реестрындағы шәхси кабинетка автоматик рәүештә инеү мөмкинлеге бирергә ҡушты.

✓ **2024 йылда Рәсәй пенсионерҙары түләүҙәренең артыуы көтөлә.** Дәүләт индексацияны граждандарҙың аҡсаһын инфляциянан һаҡлау өсөн файҙалана. 2024 йылдың 1 ғинуарынан ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса страховка пенсияһы 7,5 процентҡа арта. 1 апрелдән социаль пенсиялар 7,5 процентҡа, йәғни уртаса 13,5 мең һумға тиклем күтәрелә. Шулай уҡ хәрбиҙәргә, космонавтарға, федераль дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм башҡа ташлама менән файҙаланыусыларға ла пенсия күләме арттырыла. 1 августан эшләп йөрөгән пенсионерҙар өсөн пенсия коэффициенты 123,8 һумдан 133,05 һумға еткерелә. Был уларҙың пенсияһына максималь өҫтәмә түләү күләмен 399,15 һумғаса арттыра.

✓ **Рәсәйҙә ваҡытынан алда хаҡлы ялға сығыу йәшен кәметеүҙәре ихтимал.** Тейешле закон проектын Дәүләт Думаһына индереү планлаштырыла. Документҡа аңлатма яҙыуында билдәләнеүенсә, хәҙер ирҙәрҙең пенсия йәше - 65, ә ҡатындарҙың 60 йәштән башлана. Ирҙәрҙең - 42, ә ҡатындарҙың 37 йылдан күберәк страховка стажы булһа, улар пенсия йәшенә тиклем 24 ай алдан хаҡлы ялға сығырға хоҡуҡлы. Әммә, башланғыс авторҙары фекеренсә, юғары уҡыу йорттарын һәм техникумдарҙы тамамлаусыларҙың күбеһе 23-24 йәштә генә эшкә урынлаша, шул сәбәпле ваҡытынан алда пенсияға сығыу мөмкинлеген юғалта. Быны хәл итеү өсөн депутаттар страховка стажын ҡатын-ҡыҙҙарға - 32, ә ир-егеттәргә 37 йыл тип билдәләргә тәҡдим итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МӨҺИМ УН ЙЫЛЛЫҠ




**Президент Владимир Путин 2022-2031 йылдарҙы Фән һәм технологиялар ун йыллығы тип иғлан итте. Был иһә йәмғиәт һәм ил үҫешенең мөһим мәсьәләләрен хәл итеүҙә фәндең һәм технологияларҙың ролен көсәйтеүгә йүнәлтелгән инициативалар, проекттар, саралар комплексы.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһендә билдәләүенсә, мәғарифка һәм фәнгә әүҙем өлөш индергән илдәр һәм төбәктәр үҫешендә алға китеш күҙәтелә. Башҡортостан тап ошондай юлды һайланы. Республикала өсөнсө йыл инде донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге уңышлы эшләп килә. 2023 йылда ул илдең ошондай үҙәктәре араһында лидер тип танылды. Башҡортостанда Президент ҡушыуы буйынса һәм "Фән һәм университеттар" милли проектын ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә вуз-ара кампус төҙөлә.

"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы республика ғалимдарының ҡаҙаныштарын әүҙем яҡтыртыу, уларҙың эштәрен популярлаштырыу маҡсатында "Фән осоро" тигән яңы проект башланыуы тураһында хәбәр итә. Билдәләнеүенсә, "Башинформ" сайтының махсус бүлегендә ғалимдарыбыҙҙың ҡаҙаныштары, уларҙың асыштарын һәм эштәрен популярлаштырыу хаҡында мәҡәләләр баҫыласаҡ. Проект сиктәрендә мәктәптә уҡ фәнгә ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн шарттар булдырыуҙары хаҡында һөйләйәсәктәр.

# ХАЛЫҠ МОХТАЖ БИТ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңыраҡ республиканың төньяҡ-көнсығышында асылған өс дауахана алдан килешелгән ваҡытта эшләй башламаһа, баш табиптарҙы эштән бушатырға вәғәҙәләне. Бында һүҙ Баймаҡ, Мәсәғүт һәм Оло Ыҡтамаҡ дауаханалары хаҡында бара.**

"Был дауаханаларҙы халыҡ ныҡ көтә.Ҡасан тулыһынса эшләй башлаясаҡтарын, ниндәй режимда эшләйәсәктәрен миңә хәбәр итегеҙ", - тине Радий Хәбиров Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Роберт Иштуковҡа һәм билдәләнгән ваҡытҡа өлгөрмәгән осраҡта ошо дауаханаларҙың баш табиптарын эштән сығарырға вәғәҙә бирҙе. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Роберт Иштуков хәбәр итеүенсә, Баймаҡтағы балалар поликлиникаһының бөтә кабинеттары ла 2024 йылдың 15 февраленә эшләй башлай. Рентген кабинеты 2024 йылдың 1 апрелендә асыла. Оло Ыҡтамаҡ үҙәк район дауаханаһы 2024 йылдың 2 февраленә 100 процентҡа эшләй башларға тейеш. "Мәсәғүт үҙәк район дауаханаһына килгәндә, 15 ғинуарҙан ашығыс ярҙам кабинеты, күсмә рентген асыла, иртәнге сәғәт 8-ҙән 11-гә тиклем анализдар ҡабул итеү ойоштороласаҡ. Барлыҡ педиатр кабинеттары, процедура һәм прививка яһау бүлмәләре, регистратура, поликлиника иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй. 1 марттан, рентген бүлмәһенән тыш, тулыһынса эш башлар тип планлаштырабыҙ. Ул да 1 апрелдән асылырға тейеш", - тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Роберт Иштуков. "Ошо мәсьәләләрҙе хәл итегеҙ. Был даталар баш табиптар менән килешелгән. Йәғни һәр баш табип ошо датаның үҙе өсөн дә, халыҡ өсөн дә оло әһәмиәткә эйә булыуын аңлай. Һөйләштек", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров, Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусының докладын тыңлағандан һуң.

# БӘЙЛӘНЕШ БУЛАСАҠ!

**Башҡортостан Республикаһы дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министрлығы Өфө-Белорет трассаһын бәйләнеш менән тәьмин итеү проектын тәҡдим итте.**

Әлеге мәлдә был юлдың 95 процентында - Архангел ауылынан Белорет ҡалаһына тиклем телефон бәйләнеше йә өлөшләтә генә, йә бөтөнләй юҡ. "Проектҡа ярашлы, 14 яңы кәрәҙле бәйләнеш станцияны, антенна-мачта ҡоролмалары ҡуйыласаҡ, улар электр менән тәьмин ителәсәк. 24 ай эсендә быны бәйләнеш операторы иҫәбенә эшләү ҡаралған. Иҫәпләүҙәр буйынса, проекттың хаҡы - 218,5 млн һум", - тине ведомство етәксеһе Геннадий Разумикин. Был эштәр тормошҡа ашһа, трасса буйында ултырған ауылдар - Тирәкле, Уҫаҡлы, Ҡолмас, Кәртәле, Олойылға, Ҡарағай йорт та бәйләнешле буласаҡ.

Проект 1 меңгә тиклем халҡы булған ауылдарҙы, юлдарҙы, социаль йәһәттән мөһим булған объекттарҙы телефон бәйләнеше менән тәьмин итеү программаһына ярашлы тормошҡа ашырыласаҡ. Был эштәрҙе башҡарған бәйләнеш операторҙары өлөшләтә һалымдан азат ителә. 2024-2027 йылдарҙа бындай һалым льготаларының максималь күләме 90 процентҡа тиклем етә. Тура бюджет сараларын тотонмай, инвесторҙар ярҙамында планлаштырылған тағы ла бер проект ауылдарҙы интернет менән тәьмин итеүгә бәйле. Уның буйынса 22 ауыл интернетлы буласаҡ. Таштүбә-Һатҡы юлында ла инвесторҙар ярҙамында телефон бәйләнеше булдырыу ҡарала. Былтыр Сибай-Өфө юлы ныҡлы бәйләнеш менән тәьмин ителде.

# ЯРҘАМҒА КИЛӘЛӘР

**Сәләмәтлеге сикләнгәндәргә ярҙам күрһәтеү иғтибар үҙәгендә, тип белдерҙе Радий Хәбиров. Республикала 250,6 мең сәләмәтлеге сикләнгән кеше йәшәй һәм уларға уңайлы мөхит булдырыу - республиканың төп хәстәрҙәренең береһе.**

- Республикала 5 үҙәк һәм уларҙың 18 филиалы реабилитация менән шөғөлләнә, 15 психоневрологик интернат, 5 йорт-интернат, Өфөләге геронтология үҙәге даими ярҙамға килергә әҙер. Сәләмәтлеге сикләнгәндәрҙең хәлен яҡшыртыуға йүнәлтергән эштәрҙең был бер өлөшө генә. Киләһе йылда ҡунаҡханаһы булған республика "Салют" реабилитация һәм белем биреү үҙәге, инвалид балаларға дистанцион белем биреү үҙәге булған һәм психологик-педагогик, медицина һәм социаль ярҙам алырға мөмкинлек биргән 192 урынлыҡ коррекцион мәктәпте реконструкциялау тамамланасаҡ. Улар илдә иң яҡшы майҙансыҡтар булмаҡсы, - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы билдәләүенсә, төбәктә инвалид балаларҙы реабилитациялауға сертификаттар тапшырыу уңышлы эшләй, уның буйынса улар махсуслашҡан учреждениеларҙа дауалана. 2019 йылдан был маҡсатта бюджеттан 436,2 млн һум бүленгән. Был ярҙамды 11 бала алған. Ошо уҡ ваҡыт эсендә ошондай хеҙмәттәр күрһәтеүсе 73 яңы ойошма барлыҡҡа килгән. "2024 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәт йәшендәге инвалидтарға һәм МХО-ла ҡатнашыусыларға ла сертификаттар тапшырыла башлаясаҡ. Уларға биләүле иҫәбенә йылына бер тапҡыр реабилитация үтергә мөмкинлек биреләсәк. Бер кешегә 52,2 мең бүленгән", - тине Радий Хәбиров.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Хөкүмәттәге оператив ултырыш барышында Радий Хәбиров Өфө халҡының автобустар етешмәүенә зарланыуын белдерҙе. Бигерәк тә Затон, Инорс, Док йүнәлеше буйынса мөрәжәғәттәр күп. Транспорт министрлығы билдәләүенсә, ғинуар аҙағына тиклем махсус ҡазна кредиттары сиктәрендә 250 автобус һатып алынасаҡ, уларҙың 91-е бөгөн уҡ пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә башлай ала. Республика Башлығы уларҙы тиҙерәк ҡулланылышҡа сығарырға ҡушты.

✓Киләһе аҙнала православие сиркәүе төп байрамдарының береһен билдәләйәсәк. Йола буйынса, Өфөнөң бар райондарында ла һыуға сумып сығыу өсөн махсус урындар булдырыла. Дим районының "Сағыу" биҫтәһендәге күлдә, Калинин районында Кенәз кисеүе эргәһендә Ҡариҙелдә, Киров районында "Йәшлек" комплексы янында, Ленин, Орджоникидзе райондарында Ағиҙел йылғаһында, Октябрь районында "Кояшлы яр" пляжында, Совет районында Якутов паркында һыуға сумырға мөмкин буласаҡ.

✓2024 йылдың 18 ғинуарынан Өфөлә Зәки Вәлиди менән Цюрупа урамдары киҫелешендә хәрәкәт итеү схемаһы үҙгәрә. Цюрупа урамының 8-се һәм 12-се йорттары араһындағы түбәнге "зебра" бөтөрөлә һәм йәйәүлеләр өсөн П-образлы хәрәкәт индерелә. БР Транспорт министрлығынан билдәләүҙәренсә, үҙгәрештәр ошо юл участкаһында йәйәүлеләрҙең хәүефһеҙлеге, аварияларҙы кәметеү, транспорт ағымының үткәреү һәләтен арттырыу өсөн башҡарыла.

✓Күп фатирлы йорттарҙың ихатаһынан суп-сар сығарыуға ҡамасаулаған автомобиль хужаларына штраф һалыу осраҡтары йышая. Махсус билдә ороуға ҡарамаҫтан, халыҡ шәхси транспортын контейнерҙар янында уҡ ҡалдыра, үткән тәүлектә генә ошонлай 40 осраҡ теркәлгән. Законға ярашлы, граждандарға 1-2 мең, вазифалы шәхестәр өсөн 5-10 мең, юридик шәхестәр өсөн 20-30 мең штраф һалыу ҡаралған. Ҡабаттан ошо уҡ хәлгә ҡалыусылар штрафты икеләтә арттырып түләй.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Федоровка, Карпово, Самохваловка, Йылҡыбай халҡы менән осрашты һәм ҡаланың йыраҡ урынлашҡан территорияларын үҫтереүгә йүнәлтелгән муниципаль программа тураһында һөйләне. Был программаға мәғариф һәм мәҙәниәт учреждениеларын ремонтлау, юлдарға ҡырсынташ түшәү, тукталыш павильондары ҡуйыу ҙа ингән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ "Өфө муйыйнсағы" - минең иң яратҡан проектым. Ошо проектты башлаусыларға рәхмәт. Беҙ тәүҙән үк уны ихлас ҡабул иттек һәм бойомға ашыра ла башланыҡ.



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МАҠТАНЫРЛЫҠ ТА ШУЛ!

**Уҙған йылдың декабрь аҙағында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев матбуғат конференцияһы уҙғарҙы, унда республикабыҙҙың һәм баш ҡалабыҙҙың 20 киң мәғлүмәт саралары журналистары һәм 6 блогосфера вәкилдәре ҡатнашты. Осрашыу, һәр ваҡыттағыса, хакимиәттең Ҙур залы фойеһында түңәрәк өҫтәл форматында ойошторолдо. Әйткәндәй, Ратмир Мәүлиев, тиҙҙән ошо фойеға реконструкция эшләнеп, ҡала менән заманса идара итеү үҙәге булдырыласағы хаҡында белдерҙе. "Беҙҙең Өфө иң "аҡыллы" 3 ҡала иҫәбенә инә, шуға күрә беҙ ҙә заман менән бер ҡатар атларға тейешбеҙ", - тине ҡала етәксеһе. Артабан ул журналистарҙы 2023 йылдың ҡыҫҡаса йомғаҡтары менән таныштырҙы.**

2024 йыл - Өфөнөң ил кимәлендә билдәләнәсәк 450 йыллыҡ юбилейы менән бәйле тарихҡа инәсәк. Ошо ҙур күләмле сараға әҙерлек эштәре байтаҡтан бара баш ҡалала. Ратмир Мәүлиев журналистар иғтибарын ошо юбилейға арналған күргәҙмә стендтарына йүнәлтте. Стендтарҙың береһендә Өфө ҡалаһының туристик кодын формалаштырыу буйынса мәғлүмәттәр сағылдырылған: Ростуризмдың сираттағы конкурсында еңеп сыҡҡас, ошо проекты ғәмәлгә ашырыу өсөн федераль үҙәктән 210 миллион һум аҡса күсерелгән. "Баш ҡалабыҙҙың тарихи үҙәгендә 100 гектар майҙанда эштәр бара. Ошо проект буйынса 40 контракт төҙөлдө: улар иҫәбендә туристик навигация, төрлө фотозоналар, урам кинотеатры, йәрминкә йыһаз-ҡорамалдарын урынлаштырыу ҡаралған", - тине ҡала башлығы.

Журналистар ҡала башлығына берәм-берәм Өфө халҡын борсоған һорауҙарҙы еткерҙе. Ә Ратмир Мәүлиев ҡуйылған һорау-мәсьәләләрҙе нисек хәл итеү хаҡында ихлас һәм төплө аңлатмалар бирҙе. Мәҫәлән...Бөгөнгө ҡарлы ҡыштың эҙемтәләре кемде генә борсомай, тиһен. Һорауҙарҙың тәүгеһе, әлбиттә, урамдарҙы ҡарҙан таҙалау тураһында булды.

- Урам-ихаталарҙа йыйылған ҡарҙы иретеү осһоҙораҡҡа төшәр ине, әлбиттә, - тип башланы хакимиәт башлығы. - Быны әле коммуналь хужалыҡ эштәрен башҡарыу өсөн 660 берәмек техника алдыҡ. Әммә ҡаланан ҡар сығарыу бик ҡиммәткә төшә, унан һуң, ҡала юлдарында автотранспорт һәр саҡ күп булғас, эш оҙаҡҡа һуҙыла. Өфөлә әлегә тиклем Трамвай урамында бер генә ҡар иретеү пункты эшләй, киләһе йылда икенсеһен монтажлауҙы хәстәрләйбеҙ, унын ҡеүәте тәүлегенә 2700 куб метрға етәсәк.

Ҡалабыҙҙы йәшелләндереү буйынса эштәр күп ул - быны ваҡытында һәм дөрөҫ итеп башҡарыу фарыз. Был үҙе бер сәнғәт эше. Ҡартайған, ҡалай етте, шулай үҫкән ағастар күп урамдарҙа. Элек быға иғтибар ителмәне. Ағастарҙың ботаҡтарын биотехнологияға ярашлы киҫеп алыу мотлаҡ, ул уларҙы оҙағыраҡ "йәшәтә", урамдарҙы матурлай. Сатырлаштырыу (кронлаштырыу) ҙа талап ителә, беҙ меңләгән ағасты ошолай эшкәрттек тә инде. Өфөләр быны аңлап ҡабул итһендәр ине, шул уҡ ваҡытта беҙ бер сәбәпһеҙ һәйбәт ағастарҙы киҫеп алыуҙы тыябыҙ.

Мәҙәни мираҫ объекттары төҙөкләндерелә. Ошо йәһәттән Өфөнөң 450 йыллығына иң боронғо урамдарҙың береһе - Октябрь революцияһы урамына һәм ундағы күсемһеҙ мәҙәни мираҫ исемлегенә ингән йорттарға киң күләмле реконструкция эшләйбеҙ. Башҡарыла торған эштәр өс өлөштән тора: тәүҙә юл һәм тротуарҙар яңыртыла, шунан йорттар реконструкциялана, аҙаҡтан ихата территориялары төҙөкләндерелә. Ошо урамда 35 объект реконструкцияға мохтаж, 21 йорттан унда йәшәүселәр ҡаланың башҡа йорттарына күсерелде.

Әлбиттә, байрамдар үтә лә китә, әммә ҡала юбилейы уңайы менән башҡарылған эштәр артабанғы үҫешкә нигеҙ буласаҡ. Шул уҡ яңы физкультура-һауыҡтырыу комплекстары, Көрәш үҙәге киләсәктә теләһә ниндәй кимәлдәге спорт ярыштарын уҙғарыу мөмкинлеген бирәсәк. Студенттар кампусы фән-ғилем үҫешенә терәк булыр. Технологик үҫешкә өлгәшә алыу, цифрлаштырыуҙы әүҙемләштереү өсөн дә тейешле шарттар кәрәк. Байрам уңайы менән инвестициялар йәлеп ителә, улар 100 млрд һумдан ашып китте. Парктарҙы, скверҙарҙы, аллеяларҙы төҙөкләндереү, йәйәү һәм велосипедта йөрөү һуҡмаҡтарын булдырыу - былар барыһы ла ҡалабыҙҙың комфортлы йәшәү мөхитен хасил итә, ә кешеләр өсөн ошондай һәйбәт шарттар тыуҙырыуҙы беҙҙең өҫтөнлөклө стратегик бурысыбыҙ ул, тип аныҡлар инем.

"Өфө муйынсағы" - минең иң яратҡан проектым. Ошо проектты башлаусыларға рәхмәт. Беҙ тәүҙән үк уны ихлас ҡабул иттек һәм бойомға ашыра ла башланыҡ. Проектҡа исем биргәндә төрлө тәҡдимдәр булды, ә "Өфө муйынсағы" - килешле лә, матур ҙа. Был проект баш ҡалабыҙҙың барса райондарына ла ҡағылышлы. Байтаҡ ҡына эштәр башҡарылды, проект дауам итә. Ул тулыһынса әҙер булған хәлдә Өфөлә йәшәүселәрҙең яртыһынан күберәге 15-20 минут эсендә йәйәү йә велосипедта йөрөп була торған һуҡмаҡтарға барып етә ала, бында тәбиғәт ҡосағында ял итеү өсөн барыһы ла буласаҡ.

Йәмәғәт транспортын камиллаштырыу - мөһим бурыс. Ҡала транспорты үҫешә, яңыра бара. Быйыл 200-ҙән ашыу транспорт саралары һатып алдыҡ, тағы ла 50-не алыу күҙаллана. Электр транспорты буйынса ла яңылыҡтар, үҙгәрештәр буласаҡ. Йәмәғәт транспортының эш графигына килгәндә, теләһән, уны көнө-төнө буйына ла йөрөтөп була. Ә төнөн уларҙа кем йөрөр икән? Мәҫәлән, Дим биҫтәһен генә алып ҡараһаҡ та, унда һәр предприятиеның үҙ графигына ярашлы эшләүе билдәле. Ошо йәһәттән, бер генә шартты үтәү фаразы: транспорт эшкә барыусы-ҡайтыусыларға уңайлы булһын. Йәмәғәт транспортын камиллаштырыу өсөн эшҡыуарҙарҙың шәхси транспорт сараларын иҫәпкә алыу зарур, инвесторҙарҙы йәлеп итеү ҙә мөһим. Концессион килешеүҙәргә иҫәп тотабыҙ. Шул уҡ электр транспорты килемһеҙ бөгөн. Дотациялар бирергә тура килә. Яңы, заманса электр транспорты сараларын һатып алыу, яңы маршруттар һәм туҡталыштар булдырыу күҙаллана.

Өфөбөҙҙөң минең өсөн иң ҡәҙерле урындары. Бала сағымдан бирле иң иҫтәлекле урын - Салауат Юлаев һәйкәле. Икенсеһе - Дәүләт циркы, унда атай-әсәйебеҙ менән барған инек, төрлө йәнлектәр менән сығыш яһалған программа бик тә оҡшағайны. Әлбиттә, бөгөн "Өфө муйынсағы" тип аталған экоһуҡмаҡ ныҡ оҡшай, бында муниципалитет командаһы Өфөнөң иң әүҙем ирекмәндәре менән бергәләшеп эшләй. Йәнә, Ленин урамын бала сағымдан бирле иң матур урам, тип иҫәпләйем.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ЗӘҒӘФУРАНОВ ФӘЙЗРАХМАН ЗӘҒӘФУРАН УЛЫ

Фәйзрахман Зәғәфуранов - күренекле дәүләт эшмәкәре, 1950 - 1967 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе.

1913 йылдың 10 октябрендә Өфө губернаһының Златоуст өйәҙе Һөләймән ауылында (хәҙерге Мәсетле районы) тыуған. Ата-бабалары Әйле ҡәбиләһенең Ҡошсо ырыуынан. Бала сағынан үкһеҙ етем ҡалып, олатаһы тәрбиәһендә үҫә. Һөләймән ауылы мәктәбендә уҡый, һуңынан Өфөлә хисапсылар курсын тамамлап, Мәсетле районында иҫәпсе булып эшләй. Өфөләге юғары Коммунистик ауыл хужалығы мәктәбендә уҡый, 1935 йылда Мәскәүҙә белем камиллаштырыу курстарын тамамлай. 1935 - 1937 йылдарҙа Өфө юғары Коммунистик ауыл хужалығы мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. 1939 йылда совет-фин һуғышында ҡатнаша. КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Юғары партия мәктәбен (Мәскәү, 1962) тамамлай.

Бөйөк Ватан һуғышында Көньяҡ-көнбайыш, Сталинград, Дон фронттарында рота командиры ярҙамсыһы була. 1943 йылда ҡаты яралана. Магнитогорск ҡалаһы госпиталендә дауаланғас, уны Темәстәге педагогия училищеһына директор итеп тәғәйенләйҙәр. 1945 - 1947 йылдарҙа Баймаҡ райкомында пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире, 1947 - 1950 йылдарҙа ошо уҡ райкомдың икенсе, һуңынан беренсе секретары вазифаһына тәғәйенләнә. 1950 йылдан 1967 йылға тиклем БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе вазифаһында эшләй. Башҡорт АССР-ы Юғары Советы депутаты (1950 - 1967), СССР Юғары Советы депутаты (1950 - 1966), РСФСР Юғары Советы депутаты (1955 - 1959, 1963 - 1967).

Дәүләт наградалары: Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (1940),"Почёт Билдәһе" ордены (1949), ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1957, 1963). Мәсетле районының Һөләймән ауылы мәктәбе уның исемен йөрөтә.

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Диабет

❖5 грамм киптерелгән болон туҡранбашына (клевер луговой) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һәр 3-4 аҙна дауаланған һайын 5-10 көнгә туҡталып торорға кәрәк.

❖1 стакан һыуға 15 мл дегәнәк (лопух) тамыры һәм япраҡтары һутын ҡушып, 3-кә бүлеп, 1 көндә эсеп бөтөргә. Һәр 3-4 аҙна дауаланған һайын 5-10 көнгә туҡталып торорға кәрәк.

### Ҡиҙеү

❖1-әр өлөш йүкә сәскәһе һәм баланды ҡушырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәнең 200 грамын эҫе көйөнсә төнгөләккә эсергә.

❖1-әр өлөш йүкә сәскәһе һәм мәрүәрҙе (бузина) ҡушырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Һалҡын тейҙереп ауырығанда эҫе көйөнсә бөтөргәнсе эсергә.

### Теш һыҙлаһа

❖ 1 стакан һыуға 1 йомортҡа ағы, 1 балғалаҡ аш тоҙо, 3 ампула 10 процентлы новокаин ҡушырға. Теш һыҙлағанда ауыҙҙы 5-10 минут сайҡатырға.

### Имән ҡайыры

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған имән ҡайырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Эс китеүҙә дауалағанда төнәтмәне 3-кә бүлеп, ашағандан һуң эсергә. Иҫкәрмә: имән ҡайыры 12 йәше тулмаған балаларға, йөклө ҡатындарға һәм эс ҡатыуҙан яфаланған кешеләргә ярамай. Уның төнәтмәһен сиктән күп эсеү ҡоҫтороуы бар.

### Гипертония

❖ Был осраҡта көн дауамында ҡара миләш һутын эсергә кәрәк. Дауаланыуҙы 0,25 балғалаҡтан башларға, шунан яйлап арттыра барырға. Һут иҫкермәһен өсөн, уға аҙ генә бал ҡушып, һыуыткыста һаҡларға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Егеттәргә ағас-таш, тимер-томор эштәре, техника менән танышыу тормош көтөү өсөн ғүмерлек кәрәк нәмә. Шуға күрә уларға башлыса тыштағы хужалыҡҡа бәйләнешле эштәрҙе үҙләштеү зарур.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һыҙғыраҡ сөрәгәй**

**(Чирок-свистунок)**



Башҡа өйрәктәрҙән бәләкәй булыуы менән айырылып тора. Ата ҡоштоң башы һоро, күҙҙәре аша ҡара йәшел төҫтәге һыҙат үтә, түше алһыу, ҡара таптары бар, "көҙгө"һө сағыу йәшел. Инә ҡош ерәнерәк, суҡышы ҡараһыу, тәпәйҙәре йәшкелт-һоро. Шулай ҙа һыҙғыраҡ сөрәгәйҙе айырып тороусы төп сифат - ҡанат ҡауырыйҙарының төбө ҡара төҫтә. Ҙур тиҙлектә оса, һыуҙан да, ерҙән дә шунда уҡ һауаға күтәрелеп осоп китә. Ата ҡош ҡыҫҡа итеп һыҙғыра, ә инә ҡоштоң тауышы сағыу.

Рәсәйҙең урман һәм урман-дала өлөшөндә осрай. Башҡортостанда һыҙғыраҡ сөрәгәй бар, әммә һуңғы йылдарҙа уның һаны ҡырҡа кәмене. Учалы, Әбйәлил районы күлдәре, йылғалары, һаҙлыҡтарында күпләп йәшәй. Ырымбур өлкәһендә лә оя ҡора тигән мәғлүмәт бар.

Яҙын апрелдә осоп килә, унар ҡош бергә тупланып осалар. 15-20 майға ҡайтып бөтәләр.

Оя ҡороу өсөн йылға, шишмә, күл буйҙарын, шулай уҡ урмандағы бәләкәй генә күләүектәрҙе лә һайлай. Ояһын ергә, түңгәктәргә ҡора, кесерткән, атҡолаҡ, таллыҡ төбөн үҙ итә. Апрель аҙағы - май башында ояһын ҡороп бөтөп, 8-12 йомортҡа һала. 20-23 көн эсендә бәпкәләр сыға, уларҙың һаны күбеһенсә 7-10 була. Уларҙың күп өлөшө 7-15 көнлөк ваҡытында һәләк була. Уртаса иҫәпләгәндә, һыҙғыраҡ сөрәгәй нәҫеленең 30-45 проценты шул мәлдә юҡҡа сыға.

Һыу бөжәктәре, энәғараҡ ҡарышлауыҡтары, ваҡ моллюскылар менән туҡлана. Көҙгә рациондарына үҫемлектәрҙең һуғанбаштары өҫтәлә. Август аҙаҡтарына йылы яҡтарға осоп китеү өсөн бергә туплана башлайҙар. 15-40 өйрәктән торған туптар сентябрь аҙағында юлға сыға. Көнбайыш Европала ҡышлайҙар. Был ҡоштарҙың күп һанлы булыуы сәбәпле, һунарсылар уларҙы күпләп атып ала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*ХӘТЕРКИТАП*

# ХЕҘМӘТ КЕНӘ КЕШЕ ИТӘ...

**Пионер галстуктары таҡҡан тиңдәштәрем менән тигеҙ сафта тороп, дәртләнеп йырлай инек беҙ шундай йырҙарҙы: "Эх, хеҙмәт йыры, шаула, яңғыра бөтә ерҙәрҙә. Ҡала-ауылды осоп һин иңлә барлыҡ телдәрҙә!.." Һуңғы осорҙа мәктәп уҡыусылары өсөн хеҙмәт дәрестәрен ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыу хаҡында хәбәрҙәр ишетелә башлағас, ярты быуаттан ашыу элек күңелемә ныҡ инеп оялаған ана шул йыр йышыраҡ иҫемә төшә. Ысынлап та, ҡәҙерле туғандар, ҡасандыр һәр кемебеҙгә яҡын булған "хеҙмәт" һүҙен инде байтаҡ йылдар лөғәтебеҙҙә (йырҙарыбыҙ хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ) һирәгерәк ҡулланабыҙ һымаҡ. Илебеҙ халҡы эшһеҙлектән йонсомай, әлбиттә, ә шулай ҙа ошо төшөнсә тураһында бер аҙ фекерләп алмаҡсымын.**



Ифрат файҙалы булған ана шул хеҙмәт дәресенең мәктәптәрҙә туҡталып ҡалыуы хаҡында белмәй ҙә инем, дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, башыма ла килмәгәйне. Был предметтың балаларыбыҙ өсөн тик яҡшыға ғына булыуын берәү ҙә инҡар итмәйҙер, моғайын. Мәктәп йылдарында хеҙмәт дәрестәрендә алған ғилемем бөгөнгәсә үҙемә кәрәге тейә тип һанайым. Минең иң яратҡан дәрестәремдең береһе ине ул. Беҙ - парта артында ултырып бер аҙ ялҡҡан балалар, аҙнаһына бер мәртәбә була торған "труд"ҡа ашҡынып бара инек. Хеҙмәт уҡытыусыһы биргән һабаҡтарҙы оло ҡәнәғәтлек менән үҙләштерергә тырышыуым хәтеремдә. Уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында Баймаҡ интернат мәктәбендә малайҙарҙы мәктәп оҫтахаһаһында ағас эшкәртеү эшенә өйрәттеләр. Хеҙмәт уҡытыусыһы Сәлих Фәйзулла улы Ҡарабандиндың иң беренсе дәрестән үк хәүефһеҙлек техникаһы ҡағиҙәләре менән таныштырыуы, ҡулды йәрәхәтләмәҫ өсөн йышҡыны нисек дөрөҫ тоторға, хатта умыртҡа бағанаһында сколиоз-фәлән булмаһын өсөн эш өҫтәле янында аяҡтарҙы ҡайһылайыраҡ итеп баҫып тороу хаҡында һөйләгәне хәтеремдә. Дәрес һайын ағас эшенең бихисап нескәлектәрен аңлатып, беҙгә үҙаллы эштәр бирә торғайны. Өҫтәл, парта, ултырғыстар ремонтлау, туҡмас таяғы йә һалма ҡырҡа торған таҡта, кейем элгес һымаҡ әйберҙәр яһау беҙҙең өсөн ғәйәт ҡыҙыҡлы ине. Хатта дәрестән тыш та шунда барып, ниҙер эшләп, мыштырҙап йөрөгәнем хәтеремдә.

Туғыҙынсы-унынсы синыфтарҙа уҡығанда Рафаил Әхмәт улы Сырлыбаев беҙҙә "Производственное обучение" программаһына ярашлы "Электротехника" дәресен дә алып барҙы. Уның: "Не знаешь закон Ома - сиди дома!" - тип, шаян һүҙҙәр менән беҙгә электр көсөргәнеше, "сила тока", "сопротивление" һымаҡ төшөнсәләрҙе, электромонтаж ысулдарын ябай ғына итеп аңлатыуы әле булһа күҙ алдымда. Урта мәктәпте тамамлағас, ҡулыбыҙға аттестат менән бергә "III разрядлы электромонтер" тип аталған һөнәрҙе раҫлаусы документ тапшырҙылар.

Ә ҡыҙҙарға Альмира апай теген эшен өйрәтте. Мәктәпте тамамлауға уларға "тегенсе" тигән һөнәр хаҡында таныҡлыҡ биреп сығара торғайнылар. Үҙҙәренә нимә теккәндәрен белмәйем, әммә беҙгә, малайҙарға, эске кейемдәр етештерә инеләр (ул саҡта беҙҙе интернат кейендерҙе). Минең менән бергә шул уҡ интернатта уҡыған, бөгөнгө көндәге хәләл ефетемә әле булһа "Һеҙ теккән трусиктарҙы кейеп уҡыныҡ инде", тип көлөп алам. Мәктәп территорияһында ҙур ғына алма баҡсаһы ла булды. Алмағастарҙы ла, әлбиттә, беҙ - уҡыусылар тәрбиәләнек. Көҙөн йыйып алған алмаларҙан мәктәп ашнаҡсылары компот ҡайнатып, беҙҙе витаминландырҙылар.

Һаҡмар йылғаһы буйында интернаттың хеҙмәт лагеры ла бар ине. Ярайһы киң ер билмәһенә картуф, кәбеҫтә сәсеп, йыл әйләнәһенә бөтәбеҙгә (өҫ йөҙҙән ашыу балаға) етерлек йәшелсә әҙерләп ала торғайныҡ. Мәктәп автобусына тейәлеп, утыҙлап саҡрым арала ятҡан Һаҡмар буйына йырлаша-йырлаша барабыҙ, унан теҙелешеп алып, әллә күпме майҙанға картуф сәсәбеҙ. Малайҙар көрәк менән ҡаҙа, улар артынан ҡыҙҙар сәсеп килә. Йәй буйы, икеөсәр аҙналап, бишенсе - һигеҙенсене тамамлаған балалар ана шул лагерҙа йәшәй, картуф утай, күмә, кәбеҫтәләргә көн дә һыу ҡоя. Лагерҙа тәрбиәсе, физрук, пионервожатый итеп юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән студент апай һәм ағайҙар йәлеп ителәә ине. Улар менән күңелле. Элек ошо мәктәптә үҙҙәре уҡыған саҡтағы ҡыҙыҡ хәлдәрҙе һөйләп беҙҙе көлдөрәләр. Йүгереү, һикереү һымаҡ спорт уйындары, хатта балыҡ тотоу буйынса бәйгеләр ойоштороу саралары ла булды. Ҡыҙҙар таҡтанан яһалған барак йорттарҙа, ә малайҙар палаткаларҙа йоҡлап йөрөнөк. Барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе бәхетле итеп тойҙоҡ, шатланып, дәртләнеп эшләнек, ял да иттек.

Көҙ, инде мәктәпкә уҡырға килгәс, аяҙ көндәрҙе һайлап, күмәкләшеп картуф алырға барыу - үҙе бер күңелле ял ине! Картуф тубырсығы менән сәпләшә-сәпләшә, сырсыу килеп, уңышыбыҙҙы йыябыҙ. Беҙҙең менән барған уҡытыусы-тәрбиәселәр ҙә яҡшы кәйефтә, беҙҙең шаярғанды күрмәмешкә һалышалар. Эш тамамланыуға ҡарай,ҡыҙҙарыбыҙ телеңде йоторлоҡ итеп "мундирлы" картуф бешерә. Йыйған уңышты йөк машинаһына тейәп, үҙебеҙ автобусыбыҙға ултырып, йырлаша-йырлаша йәнә ҡайтып китәбеҙ. Ҡайтҡас та эш етерлек. Йәшелсә һаҡлай торған ҙур баҙҙа кәбеҫтәләрҙе үткер көрәк менән турап, тоҙлап, ҙур мискәләргә тултырып, таҙа резина итектәр кейеп, шаяра-шаяра тығыҙлап тапап йөрөгәндәребеҙ ҙә әле булһа онотолмаған.

Бынан тыш, мәктәбебеҙҙең ярҙамсы хужалығында йорт хайуандары ла булды. Иткә тәғәйенләнгән эре мөгөҙлө малдарҙы оло ағайҙар ҡарай ине, әлбиттә. Ә өлкән синыф малайҙары (туғыҙынсыны тамамлағандар) йәйге практика ваҡытында Әбдрәшитов Фәйрүз ағай етәкселегендә Ирәндек итәгендә йәйләүҙә ятып, ҡышҡылыҡҡа етерлек бесән әҙерләне.

Мәктәп ашханаһына сиратлап дежурға йөрөнөк. Аҡ алъяпҡыстар бәйләп алып, ашнаҡсыларға картуф әрсеүгә, өҫтәлдәргә аш ташырға, унан ҡабаттан һауыт-һабаны йыйып алырға, өҫтәл һөртөргә ярҙамлашабыҙ. Иҙән йыуырға ла булышабыҙ. Ҡыш көндәре мәктәп тирәһендәге ҡарҙы көрәү ҙә беҙҙең өҫтә булды.

Бының менән нимә әйтмәксемен? Ошо эштәрҙе эшләп үҫһәк тә беребеҙ ҙә зарланманыҡ, уҡыу ҙа барҙы. Атай-әсәйҙәребеҙ ҙә "Баламды эшкә ҡушалар" тип һөйләнмәне, киреһенсә, беҙҙе мәктәптә эшкә өйрәткәндәре өсөн был яҡындарыбыҙ шатланып туя алмай ине. Бына шундай күңелле тормош менән тәьмин итте беҙҙе элекке мәктәп.

Әгәр ҙә ана шул хеҙмәт дәрестәре индерелеүгә бөгөнгө ата-әсәләрҙең бәғзеләре "Һәр төрлө сит эштәр менән балаларыбыҙға уҡырға ҡамасаулайҙар", тип ҡараһа, бик ныҡ хаталанасаҡ, әлбиттә. Был дәрестәр, киреһенсә, уҡыусыларҙың дөйөм белем алыуына, киләсәк тормошо өсөн тик файҙаға ғына тиер инем. Балаларҙы эшһөйәрлек рухында тәрбиәләү мөһим. Егеттәргә ағас-таш, тимер-томор эштәре, техника менән танышыу тормош көтөү өсөн ғүмерлек кәрәк нәмә. Шуға күрә уларға - буласаҡ ғаилә башлыҡтарына, башлыса тыштағы хужалыҡҡа бәйләнешле эштәрҙе үҙләштеү зарур. Ә ҡыҙҙарыбыҙға, минеңсә, өй эштәрен күберәк өйрәтеү хәйерлерәктер. Киләсәктә балалар тәрбиәләү, аш-һыу тирәһендә булышыу, тәмле аштар бешереп, ирҙәрен эштән һағынып, йылмайып ҡаршы алыу өсөн... Әйткәндәй, әлеге хеҙмәт дәрестәрендә ҡыҙҙарыбыҙға тегеү-маҙарҙан тыш, бешереү серҙәрен өйрәтеүҙе лә программалағандарҙыр, моғайын, тип ышанам. Баҡса эшенең нескәлектәрен дә өйрәтһәләр, бигерәк тә яҡшы булыр. Бәғзе мәктәптәрҙә шофер, икенселәрендә тракторист һөнәрҙәрен үҙләштереү ҙә ҡаралғандыр. Балаларыбыҙға Аллаһ Тәғәлә эшһөйәр, илһөйәр, ғөмүмән, һәр яҡлап камил булып үҫергә насип итһен. Амин!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, хәрби хеҙмәт ветераны.**

✓ *Мәҙәниәттең яңы элементы сифатында тимер өҙәңгеле, ағастан яһалған ҡаты нигеҙле эйәрҙе билдәләп китергә кәрәк - уның Көньяҡ Уралда иң иртә яһалғандарҙан булыуы билдәле. Сулпылы бил ҡайыштары ла ҡыҙыҡлы.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



#### Бахмут мәҙәниәте ҡәбиләләре

Үрҙә бәйән ителгән ваҡиғалар б.э. V-VIII быуаттарында ултыраҡ тормошта йәшәгән иртә бахмут мәҙәниәте варисҭарының йәшәү рәүешендә һәм мәҙәниәтендә етди үҙгәрештәргә килтерә. Уҙған быуаттарҙағы кеүек үк, Ағиҙелдең барса һул яры буйындағы ерҙәр, уның тауҙар араһынан ағып сыҡҡан урынынан тамағына тиклем, турбаҫлы һәм кушнаренко мәҙәниәттәренә ҡараған ҡәбиләләрҙең биләмәләре булған. Әммә сит тарафтарҙан килгән ҡәбиләләр IV-V быуаттарҙа уҡ Ағиҙел йылғаһының урта ағымының уң яҡ яры буйҙарынан бахмутсыларҙы ҡыҫырыҡлап сығара башлаған, ошоға дәлил итеп IV-V быуаттарҙа Еҙем һәм Инйәр йылғалары буйындағы Көнбайыш Урал буйы өсөн яңы материалдары булған ҡаласыҡтарҙы атарға була. VI - VIII быуаттарҙа килмешәк турбаҫлы ҡәбиләләре Өфө (Кариҙел) йылғаһы тамағы районын, шул иҫәптән хәҙерге Өфө ҡалаһының бик ҙур территорияһын үҙләштерә. Ошо микрорайон турбаҫлы ҡәбиләләре йәшәгән ерҙәрҙең ҙур үҙәген тәшкил иткән, был ҡәберлектәр, бай мәҙәни ҡатламлы 20-нән ашыу тораҡ һәм ҡаласыҡтар менән раҫлана.

Килеп тыуған яңы шарттарҙа бахмут ҡәбиләләренең йәшәү урындарында билдәле бер үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Әгәр, мәҫәлән, иртә тимер быуатының урындағы ултыраҡ тормош рәүешен алып барған ҡәбиләләре (ананьинсылар, пьяноборсылар, иртә бахмут ҡәбиләләре), башлыса, ҙур йылға ярҙары буйында йәшәһә, V - VIII быуаттарҙа бахмутлылар Төньяҡ Башҡортостандың, Урта Каманың (Пермь крайының һәм Удмуртияның көньяғы) ҙур һәм бәләкәй йылғаларының һыу айырғыс арауыҡтарын барса киңлегендә һәм тулыһынса үҙләштерә. Тау һәм ҡалҡыулыҡтар түбәләрендә, бәләкәй йылғаларҙың тар ғына ярҙарында V - VIII быуаттарға ҡараған бахмут мәҙәниәтенең 100-гә яҡын ҡаласыҡтары хасил булыуы ошо хаҡта һөйләй. Майҙандары бәләкәй 5-10 кесе ҡаласыҡҡа ҡеүәтле һаҡланыу ҡоролмалары булған бер ҙур ҡаласыҡ тура килеүен билдәләп үтеү мөһим; һаҡланып ҡалған эҙҙәренә ҡарап, ошо ҡәлғә-ҡаласыҡтарҙың итәктәре эскарпланған, йәғни вертикаль йүнәлештә 5-10 метрға киҫеп алынған була. Айырыуса ҙур күләмле ошондай ҡаласыҡтар Сарвиха,Ҡамышлы (Бөрө районы), Мәсәғүт (Яңауыл районы), Сөн йылғаһы тамағындағы Петртау тауында (Илеш районы), Торатауҙа (Краснокама районы) һәм башҡа урындарҙа табылды. Ҡаласыҡтарҙың һәм улар эргәһендәге асыҡ тораҡтарҙың яңы, әлегә тиклем кеше йәшәмәгән урындарҙа хасил булыуы Көнбайыш Башҡортостанда халыҡ һанының күп тапҡырҙарға артыуы һөҙөмтәһендә ер мәсьәләһенең ҡырҡыулашыуы менән бәйле, һәм бахмут ҡәбиләләре уны төньяҡтағы урманлы райондарҙа күмәкләп күсеп китеү юлы менән хәл итә.

Бахмут ҡәбиләләренең ҡаласыҡтары һәм тораҡтары ярым ер тибындағы тура мөйөшлө өйҙәрҙән ғибәрәт. Күрәһең, улар менән бер рәттән, ер өҫтөнә һалынған бүрәнә өйҙәре лә булған. V-VI быуаттар менән сағыштырғанда, көнкүреш предметтары составы шаҡтай яңыртылған, беҙ бында турбаҫлылар һәм бында күсеп килгән башҡа халыҡтар йоғонтоһон күрәбеҙ. Ҡәберлектәр материалдары VII - VIII быуаттарҙа тимерләштерелгән (бронялы) кейемдәрҙең - һайман (тимер күлдәк) һәм тимер пластиналарҙан яһалған панцирҙар, ҡылыстар, уҡ башаҡтарының төрлө типтары, шул иҫәптән һайманлы яугирға ата торған тар башаҡтар киң таралып китә. Мәҙәниәттең яңы элементы сифатында тимер өҙәңгеле, ағастан яһалған ҡаты нигеҙле эйәрҙе билдәләп китергә кәрәк - уның Көньяҡ Уралда иң иртә яһалғандарҙан булыуы билдәле. Алғы яҡтан бот буйына тиклем төшөп торған сулпылы бил ҡайыштары ҡыҙыҡлы. Ҡайыш бронза, көмөш һәм алтын ҡаптырмалы, буйынан буйына беркетеп ҡуйылған төрлө формалы тәнкәләр менән биҙәлгән. Һырғалар, муйын һәм күкрәк биҙәүестәре (муйынсаҡтар, сулпылар, мәрйен теҙелгән мунсаҡтар, беләҙектәр, йөҙөктәр), көҙгөләр һәм керамик һауыт-һабалар составында яңы формалы күп предметтар табылды.

Тулыһынса көмөш тәгәрмәс рәүешле уҡалар менән биҙәлгән өс кейеменең (кафтан йәки сәкмән) аҫҡы ҡырыйы һәм аяҡ кейеме ҡуныс ҡалдыҡтары эҙмә-эҙлекле өйрәнелгән. Табылдыҡтар араһында ситтән килтерелгән әйберҙәр күп, шул иҫәптән быяла кубок, VIII быуат уртаһына ҡараған көмөш Хорезм тәнкәләре бар. Ҡойоп яһалған бронза һыбайлы һыны оригиналь. Унда сәсе артҡы яҡҡа төшөрөп үрелгән оҙон толомло, мыйыҡлы ир һынландырылған, уның уң ҡулы уҡ һаҙағында ята. Оҙон сәкмәненң аҫҡы итәге күренә. Евразия халыҡтарының иртә урта быуаттар иконографияһында тик төрки халҡына ҡараған ирҙәрҙе генә сәс толомо менән һынландырғандар, шулай булғас, бында төрки сыбышлы ир кеше һүрәтләнгәненә шик юҡ. Ошо һыбайлы һынына яҡын аналогиялар Урта Азияның һәм Көньяҡ Себерҙең боронғо ҡомартҡыларында ла бар, улар б.э. VIII быуатына ҡарай. Бөрө төрки һыбайлыһы шул уҡ ваҡыт менән билдәләнә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**



*VI - VII быуаттарҙағы ҡатын-ҡыҙ ҡәбере инвентары. Бахмут мәҙәниәте: 1 - алҡа; 2-4,7 - сулпылар; 5,6 - ҡаптырма-фибулалар; 8 - бронза көҙгө ярсығы; 9 - сикә сулпыһы (бахмут тибындағы); 10 - бахмут ҡәбиләләренең бил ҡайыштары реконструкцияһы. V-VIII бб.; 11 - балта; 12 - балдаҡ; 13,14 - тимер һәм бронза беләҙектәр.*

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Люблин-Брест һөжүм итеү операцияһында

Корпустан беренселәрҙән булып 14-се гв. атлы дивизияһының 52-се гв. атлы полкы һәм 15-се гв. атлы дивизияһының 53-сө гв. атлы полкы, Көнбайыш Буг йылғаһы аша сығып, дәүләт сиге аша Польша еренә үтеп инә.

2-се эшелонда барған 16-сы Черниговгвардия атлы дивизияһына 14-се гв. атлы дивизияһы артынса Көнбайыш Буг йылғаһы аша сығыу, корпустың беренсе эшелонында, башҡа частар менән берлектә, сигенеүсе дошманды эҙәрлекләү һәм Хелм ҡалаһын алыу бурысы ҡуйыла.

Беҙҙең дивизиянан Көнбайыш Буг йылғаһы аша беренсе булып гв. подполковнигы Б.И. Кобяков командалығында 58-се гв. атлы полкы сыға (Т.Т. Кусимов Мәскәүгә саҡыртылып алынғас, 20 майҙан бирле ошо данлы полкты яңы командир етәкләй). Полктың бер эскадроны яугирҙары дивизияның 32-се танк полкы танктарында десант булып бара. Хелм ҡалаһына көнсығыштан ошо полк һәм 69-сы армияның айырым танк бригадаһы һөжүм итә. Улар артынса 312-се уҡсы дивизия частары ла ҡуҙғала.

52-се һәм 55-се гвардия атлы полктары, десантлы өс танк полкы, айырым танк бригадаһы, 312-се уҡсы дивизия частарының ҡеүәтле атакаһы һөҙөмтәһендә 22 июлдә Хелм ҡалаһы фашист ғәскәрҙәренән таҙартыла. 16-сы гв. атлы дивизияһы, командование бойороғона ярашлы, ҡаланы төньяҡтан урап үтә һәм немецтарҙың тылына сыға - беҙҙең атлылар армия һәм фронт операцияһының төп маҡсатына өлгәшеүгә ынтыла - черниговсы гвардиясылар Люблин ҡалаһы йүнәлешендә йылдам хәрәкәт итә.

22 июлдә 7-се гв. атлы корпусына Юғары Баш командующийының рәхмәте белдерелә. Ошо көндә Поляк милли азатлыҡ комитеты туған халҡына манифест менән мөрәжәғәт итеп, поляктарҙы илдәрен немец-фашист илбаҫарҙарынан тиҙерәк азат итеү өсөн бар көстәрен берергә саҡыра. 1-се Белорус фронты составында Поляк Ғәскәренең (Войско Польское) генерал-лейтенант З. Берлинг командалығындағы 1-се армияһы нығыш хәрәкәттәренә ҡушыла. (1-се Поляк армияһы беҙҙең 7-се гвардия атлы корпусы менән, иңгә иң терәшеп тигәндәй, Берлинга тиклем барып етә).

Хелм ҡалаһын азат иткәс тә һөжүм операцияһы дауам итә. Танк ғәскәрҙәре генерал-лейтенанты С. И. Богдановтың 2-се танк армияһы бик йылдам алға бара. 22 июлдә фронт командующийы, Советтар Союзы Маршалы К. К. Рокоссовский үҙенең бойороғо менән 7-се гвардия атлы корпусын 2-се танк армияһына оператив бойһоноулыҡҡа индерә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН

## Боронғо төрки теле… тәү телгә илтә



**Әл Ҡашғари: "Іг - был һүҙ "оят" тигәндә аңлата. Әйтәләр: "Эр ир болди" - ир оялды".**

Хәҙерге башҡорт телендә әлеге фонетик әйтелештәге оят мәғәнәһен белдергән "ир" һүҙе юҡ. Әммә ошо һүҙҙең бер ни тиклем фонетик һәм семантик яҡтан үҙгәреш кисергән варианты - "әр" һүҙе әлегә тиклем ҡулланыла. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә "әр" һүҙенең мәғәнәһе ошолай аңлатыла: "Асыуланып, әрләп әйкән һүҙ". Шулай уҡ ошо һүҙҙең икенсе бер мәғәнәһен белдергән "ғәр" һүҙенә лә һылтанма бар. Ә быныһы - ғәрәп һүҙе, намыҫ хисе тип билдәләнә. Ғәрлек иһә намыҫланыу, хурланыу тойғоһо, намыҫ, оят, хурлыҡ төшөнсәләре аша аңлатыла. Тимәк, ғәрле кеше - намыҫсан, хурлана, ояла белгән зат. Оялып, тартынып тормағандарға ҡарата "әрһеҙ", тип әйтәләр. Шулай булғас, бынан мең йыл әүәл боронғо төрки ҡәрҙәштәребеҙ ҡулланған "ир" һүҙе менән башҡорттың "әр"е тап-таман килә.

**Әл Ҡашғари: "Үз" - май. "Үзлүк мүн" - майлы һурпа".**

Тәү ҡараштан, хәҙерге башҡорт телендә ошо уҡ мәғәнәләге оҡшаш һүҙ юҡ кеүек. Шулай ҙа башҡорт теленең бер үҙенсәлеген иҫәпкә алырға була ошо осраҡта. Телебеҙҙә ғәрәп һәм башҡа бер төрки телдәрендәге һүҙҙәрҙәге һүҙынҡы өн алдынан (һүҙ башында һәм уртаһында) "ғ" йә иһә "һ" өндәрен ҡушып әйтеү киң ҡулланыла: Кааба - Ҡәғбә, Али - Ғәли, Саади - Сәғәҙи, Үмәр - Ғүмәр, әүәҫ - һәүәҫ, әйбәт - һәйбәт һ.б. Тимәк, боронғо төрки телендәге "үз" һүҙенең башҡортса варианты - "һөҙ" булғандыр, тип фараз итергә була: телебеҙҙәге "һөҙлөк" һүҙе ит һурпаһының майлы өҫкө өлөшөн аңлата.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

*✔ Рәсәй халыҡтары телдәрендәге бүлектәрҙә лә ирекмәндәр, мөхәррирҙәр һәм эксперттар эшләйәсәк. Рус бүлегенән айырмалы, беҙҙең бүлектәрҙә эште проекттың интерфейсын туған телдәргә өйрәтеүҙән башларға тура килде.*

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ АҪЫЛ

## Милләтемдең

**Уҙған 2023 йыл бик күп яңылыҡтары менән тарихҡа инде. Матди һәм матди булмаған ҡаҙаныштар араһында башҡорт халҡы өсөн, шағир әйтмешләй, аҫыл хазина булып торған башҡорт теле лә яңы үрҙәр яулауға өлгәште. 2022 йылда ул, рус теле менән бер рәттән, донъяның 200 теле исемлегенә инһә, 2023 йылда ошо нигеҙҙә "Һомай" аҡыллы колонкаһы эшләнде. Бында башҡорт телен үҫтереү буйынса ҙур эштәр башҡарған ирекмәндәрҙең эшмәкәрлеген билдәләп китмәй булмай. Бөгөн шуларҙың береһе - РУВИКИ яңы интернет-энциклопедияһының Рәсәй халыҡтары телдәре бүлеге етәксеһе Рөстәм ҒАТАУЛЛИН менән түңәрәк ҡорҙа гәпләшәбеҙ.**

**Һеҙҙә туған тел һағында тороусы, уны глобаль селтәргә индереү өсөн күп көс һалыусы һәм ошо йүнәлештә Башҡорт Википедияһын нигеҙләүсе һәм үҫтереүсе Рөстәм Нуриев тип беләбеҙ. Донъяла танылыу алған интернет-энциклопедия менән бәйле ваҡиғаларға, һуңғы йылдарҙа уға "ҡара мөһөр" менән бергә административ штрафтар һалыныуына аңлатма биреп китегеҙ әле.**

- Ирекмәнлек тәғлимәте менән һуғарылған, һәр милләт теле һәм мәҙәниәте бер тиң кимәлдә, һәр нәмәгә уртаҡ ҡараш булырға тейеш тигән оран һалған проект менән 18 йыл элек шөғөлләнә башлауым башҡорт телен үҙ мөхитебеҙ ситлегенән сығарып, донъя майҙанына күтәреү теләгенән тыуҙы. Эйе, ҡуйған маҡсаттарға өлгәштек, тип әйтергә лә, ғорурланырға ла мөмкин. Проектта 3 меңдән ашыу ирекмән ҡатнашты, әҙмә-күпме үҙ өлөшөн индерҙе. Нобель премияһы тапшырылған Стокгольм ҡала Ратушаһының Алтын залында башҡорт вики-өләсәйҙәрен алҡышланылар. Утыҙ иң әүҙем башҡорт ирекмәне Башҡортостан Республикаһының дәүләт, ведомство һәм йәмәғәт наградаларына, федераль премияларға лайыҡ булды. Проекттың үҙендә 27 миллион һүҙҙән торған 63 мең мәҡәлә тәҙәлде. Шул мәғлүмәт нигеҙендә башҡорт теле ике халыҡ-ара компьютер лингвистикаһы проектына инде. Әммә, камиллыҡтың сиге юҡ, үҫеш өсөн бер урында тапанырға ярамай. Эш артабан да дауам итә.

Үрҙә телгә алынған эш менән шөғөлләнә башлағанда уҡ сит илдә нигеҙләнгән проектка шик белдереүселәр, "тиңдәр" араһында "тинерәктәр" буласағы тураһында иҫкәртеүселәр булды, әлбиттә. Проекттың төрлә тел бүлектәре ирекмәндәренең тәүге тәғлимәттәрҙән тайпыла барыуы 2000 йылдар һуңында уҡ һиҙелә башланы. Тәү башта "халыҡ-ара йәмғиәт милке" итеп иғлан ителгән проект бер илдә генә урынлашҡан фонд милке булып китте. Бер яҡлы ҡарашлылар өҫтөнлөк алып, башҡа ҡарашлыларҙы проекттан "этәреп сығарыу" көсәйҙе. Үҙ ҡараштарын алға һөрөүсе "тинерәктәр" ғилми энциклопедияны сәйәси публицистикаға әйләндерергә тырыша. Шул аркала проектка дәғүәләр күбәйҙе. Проекттың рус һәм инглиз телендәге айырым мәҡәләләренә Рәсәй дәүләте тарафынан штраф һалыныуы ла шул дәғүәләр шауҡымы ул.

Һиҙемләүемә таянып, ун йыл элек үк алдынғы ҡарашлы, тәү тәғлимәттәргә тоғро булыусы егеттәргә үҙебеҙҙең илдәге серверҙарҙа, үҙебеҙҙең интернет-энциклопедия проектын булдырыу тураһында әйтә килдем. Иншаллаһ, үткән йыл теләктәр тормошҡа аша башланы, РУВИКИ - яңы интернет-энциклопедияһына нигеҙ һалынды.

**Яңы проект тураһында ентекләберәк һөйләп китегеҙ әле. Ул Википедиянан нимәһе менән айырыла?**

- РУВИКИ яңы интернет-энциклопедияһы 2023 йылдың июнендә бета- режимда эшләй башланы. Уға нигеҙ һалыусы Владимир Медейко быға тиклем Википедияның рус һәм башҡа Рәсәй халыҡтары телендәге бүлектәргә ярҙам итеүсе "Викимедиа РУ" ойошмаһы етәксеһе булараҡ билдәле инде. Хәҙер ул - "РУВИКИ интернет-энциклопедияһы" исемле коммерцияға ҡарамаған автономиялы ойошманың генераль директоры. Эшмәкәрлекте финанслау өсөн битараф булмаған шәхси инвесторҙар тапты, проекты дәүләт бюджетынан тыш тормошҡа ашырыуға өлгәште. Был проект Рәсәй серверҙарында урынлашҡан, иң үрҙә телгә алынған ирекле энциклопедия тәғлимәттәренә һәм Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә нигеҙләнә.

Элекке проекттағы кеүек, яңы интернет-энциклопедияла төп ижади эш ирекмәндәр көсө менән атҡарыла, кешеләргә туған телдәрен ҡулланыу мөхитен киңәйтеү алға ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта мөхәррир-белгестәр командаһы даими эшләй. Уларға мәғлүмәттең сифатын, ғилми дөрөҫлөгөн тәьмин итеү бурысы ҡуйылған. Мәҡәләләр иһә "тикшерелгән мәҡәлә" (выверенная статья) һәм "рецензияланған мәҡәлә" (рецензированная статья) тамғалары менән билдәләнә. Рецензиялауҙы ирекле эксперттар, ғилми ойошмалар йәки абруйлы ғалимдар башҡарыуы көтөлә. Үткән йылда проекттың рецензенттары булырға Рәсәй Фәндәр академияһы, Мәскәү планетарийы, Космонавтика музейҙары ассоциацияһы (АМКОС), профессор Н.Е. Жуковский исемендәге Фәнни-мемориаль музей, Калугалағы Космонавтика тарихы дәүләт музейы, Авиация һәм космонавтика үҙәк йорто (ЦДАИК), Рәсәй фелинология йәмғиәте (РФО), А.А. Цимбал (Рәсәйҙең планер спорты федерацияһы), И.М. Гельфанд (онколог, медицина фәндәре кандидаты) ризалыҡтарын бирҙе лә инде.

**Әле һөйләгәндәрегеҙ барыһы ла рус телле проектҡа ҡағыла. Ә бына Рәсәй халыҡтары телдәре өсөн яңы энциклопедияның ниндәй өҫтөнлөгө бар?**

- Эште ойоштороу йәһәтенән тел бүлектәренә талаптар бер. Рәсәй халыҡтары телдәрендәге бүлектәрҙә лә шулай уҡ ирекмәндәр, мөхәррирҙәр һәм эксперттар эшләйәсәк. Рус бүлегенән айырмалы, беҙҙең бүлектәрҙә эште проекттың интерфейсын туған телдәргә өйрәтеүҙән башларға тура килде. Дөрөҫөн әйткәндә, Википедияла был эш үҙ ағышына ҡуйылып, хатта иң ҙур һәм әүҙем башҡорт, татар, чечен бүлектәрендә лә ул тулыһынса эшләнеп бөтмәгәйне.

Ярты йыл эсендә командабыҙ алтай, башҡорт, бүрәт, вепс, ингуш, ҡалмыҡ, коми, коми-пермяк, ливвиков, марый, мокша, рус, саха, сыуаш, татар, тыва, удмурт, хакасс, чечен, эрзә телдәренә интерфейсты тулыһынса тәржемә итте. Бынан тыш, әлеге ваҡытта алтай, башҡорт, марый, мокша, саха, сыуаш, татар, тыва, удмурт, чечен һәм эрзә телдәрендә 11 бүлек ирекле ҡулланыуға сығарылды, уларҙы көйләү эштәре башҡарыла. Тиҙҙән тағы 8 тел бүлегә асыласаҡ. Унан башҡа телдә яҡшы белгән мөхәррирҙәр табылыу менән яңы 8 тел бүлегендә эш башларға торабыҙ.

Төп ҡатмарлыҡ элекке проектта Рәсәй халыҡтары телендәге проекттар үҫеше төрлө булыуында. Ҡайһы берҙәре 2010 йылдарҙа уҡ "йоҡоға талғыны". Уларҙы бөгөнгө кимәлгә тиҙ арала күтәреү өсөн күп көс һалырға кәрәк әле. Әҡайһы бер бүлек ирекмәндәре "яңы тел" уйлап сығарыу менән саманан тыш мауыҡҡандар икән, шуға күрә кешеләр ул проекттарҙың йөкмәткеһен аңламаған, ҡушылырға теләмәгән. Шул уҡ ваҡытта яңы технологиялар, заман терминдарының етешмәүе лә эште ныҡ тотҡарлай. Ғалимдар, тел белгестәре, әүҙем тел ирекмәндәре менән кәңәшләшергә, уртаҡ фекергә килеп ҡулланылышҡа яңы һүҙҙәр индерергә тура килә.

**Ғәҙәттә, яңылыҡты халыҡ шунда уҡ күтәреп алмай, кемгәләр өйрәнгән һәм бер ҡалыпҡа һалынған юлдан тайпылыуы ауыр, кемдер яңыны өйрәнгеһе һәм үҙләштергеһе килмәй. РУВИКИ проектына Википедияның элекке ирекмәндәре нисек ҡарай? Ирекмәндәрҙе нисек йәлеп итәһегеҙ, был юҫыҡта нимәләр эшләргә уйлайһығыҙ?**

- Әлбиттә, проект үҙгәрҙе лә, барыһы ла шатланып яңы энциклопедияла эшләй башланы тигел инде. Берҙән, Рәсәй халыҡтары телендәге бүлектәр йыл һуңында ғына асылды. Ирекмәндәр йәлеп итеү эше алдараҡ, киләсәктә әле. Икенсенән, РУВИКИ проектына ыңғай ҡараште булған Башҡорт Википедияһы ирекмәндәренән айырмалы, төрлө тел бүлектәрендәге ирекмәндәрҙең күбеһе яңы проектҡа ҡарата кире ҡараште ҡалды. Сөнки уларға ҡайһы бер абруйлы Рәсәй вики-ирекмәндәренең сәйәси фекерҙәрен рәсми иғлан итеүҙәре йоғонто яһаны. Ирекле энциклопедияның сәйәсәттән азат булырға тейешлеген, РУВИКИ проектының туған телдәр үҫешенә йоғонтоһо һөҙөмтәләрҙе булыуын эшмәкәрлегебеҙ аша иҫбатлауыбыҙ ҙа алда әле. Өсөнсөнән, һүлпән үҫешкән тел бүлектәрендә ирекмәндәр бөтөнләй юҡ ине. Булған бер-ике кешеләре беҙҙең командаға ҡушылды ла инде.

Артабан РУВИКИ ирекмәндәре йәмғиәтен үҫтереү - төп бурыстарҙың береһе. Һәр халыҡта туған теле өсөн янып-көйгән кешеләр бихисап. Тик уларҙы алға әйҙәүсе, йүнәлеш күрһәтеүсе, һөҙөмтәле эш нигеҙендә берләштереүсе көс етешмәй ине. Интернет энциклопедияның башҡорт бүлеге ирекмәндәре тәжрибәһен башҡаларға таратасаҡбыҙ, яраҡлаштырасаҡбыҙ. Ирекмәндәрҙе йәлеп




***Ярты йыл эсендә командабыҙ алтай, башҡорт, бүрәт, вепс, ингуш, ҡалмыҡ, коми, коми-пермяк, ливвиков, марый, мокша, рус, саха, сыуаш, татар, тыва, удмурт, хакасс, чечен, эрзә телдәренә интерфейсты тулыһынса тәржемә итте. Бынан тыш, әлеге ваҡытта алтай, башҡорт, марый, мокша, саха, сыуаш, татар, тыва, удмурт, чечен һәм эрзә телдәрендә 11 бүлек ирекле ҡулланыуға сығарылды, уларҙы көйләү эштәре башҡарыла. Тиҙҙән тағы 8 тел бүлегә асыласаҡ. Унан башҡа телдә яҡшы белгән мөхәррирҙәр табылыу менән яңы 8 тел бүлегендә эш башларға торабыҙ.***

✔ **Бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ шул, унан бер ҡайҙа ла ҡасып йәшенеп булмай, тип уйларға ла мөмкин. Тик башҡорт халҡының "Туҙға яҙмағанды ысын булһа ла һөйләмә", тигән әйтеме бар бит әле.**



итеү, дәртләндәреү саралары билдәле һәм күптән һынап ҡаралған.

**Могайын, гәзит уҡыусы өсөн "Ни өсөн тап башҡорттарҙың тәжрибәһен", тигән һорауға яуап алыу ҡыҙыҡлы булыр. Асыҡлап китһәгеҙ яҡшы булыр ине...**

- Сөнки беҙ Википедияның башҡорт бүлегендә бик әүҙем эшләнек, вики-өләсәйҙәрҙең даны сит илдәрҙә лә яңғыраны һәм ул үҙенә күрә бер феномен булып торҙо. Ҡайһы бер бүлектәр һан артынан ҡыуғанда, беҙ сифатҡа иғтибар бүлдек һәм мәҡәләләр һаны аҙ булһа ла, уларҙың тәрәнлеге буйынса алда барҙыҡ. Мәҡәләләрҙе тәржемә итеү аша бер ыңғай параллель текстар базаһы йәки компьютер лингвистикаһы өсөн нигеҙ булдырҙыҡ. Был турала әңгәмә башында әйтеп киткәйнем инде.

нештәр булдырҙыҡ. Форум эшендә ЮНЕСКО, БДБ-ның Башҡарма комитеты, Рәсәйҙең IT-технологиялары араһында лидерҙар рәтендә торған "Яндекс" һәм "Сбер" компаниялары вәкилдәре ҡатнашты. Форум барышында ошо атап кителгән ун йыллыкты үткәреү буйынса Милли ойоштороу комитетының асыҡ ултырышы үтте һәм унда федераль план үтәлеше тикшерелеү менән бер рәттән, планға яңы өҫтәмәләр буйынса фекер алышыу булды. Нимә тип әйтергә була: РУВИКИ проекты хатта фекер алышыуһыҙ, бер тауыштан федераль планға индереүгә тәҡдим ителде.

**Яңы 2024 йылға ниндәй пландар менән аяҡ баҫаһығыҙ?**

- Проект үҙе һәм уның бүлектәре асылды тиһәк тә, әле улар бета-тестлау рәүешендә эшләй. Киләсәк пландар төп маҡсатҡа өлгәшеүгә, проекттың сифатын яҡшыртыуға, ғилми нигеҙле итеүгә, абруйын күтәреүгә, халыҡ ышаныһын яҡлауға йүнәлтелгән. Быйыл, Алла бойорһа, бета-тестлауҙы тамамлап, технологик яңыртылған режимда эшләй башларбыҙ тип өмөтләнәбеҙ. Быға эстәлекте шәхсиләштереү, тематик туплланмалар булдырыу, мәҡәләнең йөкмәткеһен тулыһынса йәки ҡыҫҡаса аудиояҙма аша һөйләтеү, видео һәм подкастар эшләү, ҡатнашыусының шәхси кабинетын яңыртыу, шулай уҡ яһалма интеллект ҡулланыу керә.

# ХАЗИНАҺЫ,

## изге түле ул!

Бында, әлбиттә, ирекмәнлек булһа ла, эште ойоштороу һәм команда туплау, сифат һәм техник йәһәттән эшләй белеү ҙә ҙур роль уйнай. Башҡорт бүлегендә тап шундай команда булдырылған, йәғни вәкәләттәр бүленгән, шул уҡ ваҡытта улар бер-береһен алмаштыра ала.

РУВИКИ проектын булдырыу тураһында һүҙ сыҡҡас та минә Рәсәй халыҡтары телдәре бүлеген етәкләргә һәм ойошторорға тәҡдим иттеләр. Бүлекте өр-яңынан ойоштороу, ярты йыл эсендә өлгәшелгән эш һөҙөмтәһе - ысынлап та ҙур ҡаҙаныш.

Яңы йыл алдынан РУВИКИ ойошмаһы йәшерен тауыш биреү аша төрлө номинацияларҙа "Йыл кешеһе"н билдәләне. Һигеҙ номинацияның ике призын Башҡортостанға алып ҡайттыҡ. Мин - "Һөйләшеп килешә белеү өсөн" номинацияһы еңеүсеһе булһам, Зәйтүнә Ниғмәтйәнова - "Командала эшләй белеүе өсөн" номинацияһында еңеү яуланы. Ошо күрһәткес үҙе үк һорауығыҙға яуап булып торалыр, моғайын.

**Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә туған телдәр ун йыллығы бара. Ул 2022 йылда БМО-ның Генераль Ассамблеяһы иғлан иткән "Донъяның ерле халыҡтары телдәренең халыҡ-ара ун йыллығы" проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла. РУВИКИ - туған телдәрҙе интернет селтәрендә һаҡлап ҡалыуҙың һәм үҫтереүҙең бер өлгөһө. Әммә уның дәүләт программалары йәки проекттарына инеү йәки ҡушылыу мөмкинлеге бармы, ни тиһәң дә асылыуына ярты ғына йыл, ә ҙур программалар бер нисә йыл алдан әҙерләнә һәм раҫлана...**

- Быйыл РУВИКИ - яңы интернет-энциклопедияһы генераль директоры Владимир Медейко менән минә Рәсәйҙең Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлығының "Рәсәй Федерацияһында телдәр сәйәсәте" VII халыҡ-ара форумында ҡатнашып, сығыш яһау насип булды. Унда беҙ яңы проекты һәм уның тел бүлектәрен презентацияланыҡ, төбәктәрҙән килгән вәкилдәр менән танышып, бәйлә-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тел - ул рухи байлыҡ, барлыҡ байлыҡтарҙан ҡиммәтерәк. Матди байлыҡтан айырмалы, уны банк сейфтарында йәки музей кәштәләрендә биклә һаҡламайҙар. Телде фәнни картотекаларҙа теркәү генә етмәй. Ул көндәлек тормошта киң ҡулланылырға тейеш. Бары шул саҡта ғына ул үҫәсәк һәм йәшәйәсәк. РУВИКИ яңы интернет-энциклопедияһы беҙгә шундай мөмкинлектәрҙең береһен бирә: һәр кем үҙ телендә үҙ белеме менән уның майҙансығында бүлешә ала", - тигәйне Рөстәм Ғатауллин "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына башҡорт бүлеге асылыу тураһында хәбәр иткәндә. "Тел бөтә, телде һаҡларға кәрәк", тип яр һалыусыларҙы ишеткәндә, ирекһеҙҙән, байырға теләгән бер бәндә тураһындағы көләмәс иҫкә төшә. "Эх, былна лотереяла миллион һум аҡса отһам...", - тип хыяллаңған бер кешене йәлләп, күршеһе Аллаһы Тәғәләгә, "Бир инде шуға миллион һумлыҡ отош", - тип мөрәжәғәт иткән, ти. Яуап итеп Аллаһы Тәғәлә: "Бирер инем дә, исмаһам, берәй тапҡыр лотерея билеты һатып алһын", - тиғән, имеш. Телде һаҡларға кәрәк, тип яр һалғансы, телде бөтөрмәҫ өсөн нимәләр эшләргә кәрәк. Һис юғында, бына ошо РУВИКИ проектының башҡорт бүлегендә бер генә булһа ла мәҡәлә яҙырға мөмкин. Шул ваҡытта ғына беҙ, шағир һүҙҙәренсә әйтһәк, ата-бабаларҙың аманатына, уларҙың тере рухына хыянат итмәбеҙ, лайыҡлы булырбыҙ.**

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РУХИЛЫҠ КӨҪӘЙБЕҘ...

***Гөлшат ӘХМӘТОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернаты директоры:*** Мине һуңғы ваҡытта ике нәмә борсой. Беренсеһе - башҡорт милли баҫмаларының электрон варианттағы йөҙә, уларҙа көндәлек халыҡ иғтибарына тәҡдим ителгән хәбәрҙәр. Милли баҫмаларҙың социаль селтәрҙәге рәсми төркөмдәрендә күп осраҡта бер үк һәм ҡайғылы хәбәрҙәр уҡыйһың: ҡайҙалыр ниндәй ғауғалы хәл булған, кемделер һәләк иткәндәр. Был күренеште ошо төркөмдәрҙе күҙәтеп барыусыларҙы нәҡ шундай хәбәрҙәр нығыраҡ ҡыҙыҡһындырыуына бәйле аңлатырға мөмкиндер ҙә, әммә был милли баҫмаларҙы һис биҙәмәй. Шуға мин аңлы рәүештә күп кенә милли баҫмаларҙың төркөмдәренән сығырға мәжбүр булдым.

Икенсе борсоған күренеш тә ошо социаль селтәрҙәрҙәге контентҡа бәйле. Халыҡтың художестволы әҫәрҙәрҙе бик ныҡ уҡығыһы килә. Ошо ихтыяжды ҡәнәғәтләндерергә теләп, төрлө кимәлдәге әҫәрҙәрҙе бер урынға туплап барыусы махсус төркөмдәр ҙә бар. Улар араһында профессиональ яҙыусыларҙың да, һәүәҫкәрҙәрҙең дә, хатта яңы ҡәләм тирбәлтә генә башлағандарҙың да ижадын тап итергә була. Халыҡ бик яратып уҡый, уҡығандан һуң фекере менән бүлешеүселәр ҙә һирәк түгел. Әммә был әҫәрҙәр араһында ҡайғылы, ҡыҙғаныс ваҡиғалар, кешеләрҙең ауыр яҙмышы тураһында булғаны өҫтөнлөк итә һәм ҡайһы бер осраҡта автор уҡыусыһына шундай хәлдән сығыу юлдарын дөрөҫ күрһәтмәй.

Әйтеүемсә, халыҡты шундай хикәйәләр нығыраҡ йәлеп итәлер шул, тик рәсми сығанаҡ булмаһа ла былдай төркөмдәрҙе алып барған кешеләр әҫәрҙәрҙең халыҡ өсөн файҙаһын, фәһемен күҙ уңында тотоп, ете ҡат иләктән үткәрергә тейеш түгелме икән? Мәҫәлән, бер әҫәрҙә наркоман ейәндең иптәштәре менән өләсәһен көсләп, булған ғына аҡсаһын тартып алып китеүҙәре тураһында бәйән ителә. Икенсе хикәйәлә әсәһе үҙ-үҙенә ҡул һалған һәм дүртенсе генә класта уҡып йөрөгән ҡыҙы ла шул уҡ яҙмышты ҡабатлай. Йәки ир-ҡатын, килен-ҡәйнә һәм башҡа туған-ара мөнәсәбәттәр тураһында үтә лә фажиғәле, йәлләткес итеп яҙыла.

Бына шундай йөкмәткеле әҫәрҙәр күп булыуы борсоуға һала мине. Әлбиттә, бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ шул, унан бер ҡайҙа ла ҡасып йәшенеп булмай, тип уйларға ла мөмкин. Тик башҡорт халҡының "Туҙға яҙмағанды ысын булһа ла һөйләмә", тигән әйтеме бар бит әле. Үрҙә телгә алынған әҫәрҙәге ваҡиғалар үҫешен кемдер берәү үҙенә күрһәтмә һымаҡ та ҡабул итеүе ихтимал бит. Ауыр тормош хәлендә ҡалған үҫмерҙәр ҡотолоу юлын үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙа тип аңлаһа? Улай уҡ туранан-тура йоғонто яһамаһа ла, беҙҙең уҡыған, күргән, ишеткән һәр нәмә мейебеҙҙә айырым бер "файлдарға" һалынып, һаҡланып тороуын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ниндәйҙер бер киҫкен осраҡта кешегә кәрәкмәгән юлды "өйрәтеп" ебәреүе лә бар төпкөл аң.

**Замандаш авторҙарҙың халыҡ иғтибарына тәҡдим иткән әҫәрҙәрендәге былдай ҡыҙғаныс, йәлләткес яҙмыштар күп булыуын нимәгә бәйләп аңлата ла алмайым. Моғайын, халыҡ күберәк уҡыйҙыр, был инде халҡыбыҙҙың ихтилалдар кисереүенәме, әллә үткән быуаттан популяр булған һинд фильмдарының йоғонтоһомо - кем белһен. Шулай ҙа был кешенең йәшәү рәүешенә, донъяға ҡарашына йоғонто яһарға мөмкин һәм кешеләр үҙен һәр ваҡыт ҡыйырһытылған итеп тойоп, йәлләтеп йәшәүе ихтимал. Шуға заман психологтарының һәм нейропсихологтарының һөйләгәндәренән сығып, китап уҡыусыларға тәҡдим ителгән әҫәрҙәр кешенең намыҫ иләге аша үтеп сыҡҡын һәм уға файҙалымы-юҡмы тигән ябай һорауға яуап бирһен ине.** Быны мин бына нимә менән сағыштырып инем: бишбармаҡ, былау кеүек файҙалы ризыҡтар һәм фаст-фуд бар. Тәүгеләрен әҙерләп тәғәмләнер өсөн ваҡыт, көс сарыф итергә кәрәк һәм ул файҙалы, туҡлыҡлы, ә икенсеһен тиҙ арала ҡул аҫтында булғандан әтмәләп, йотоп та ебәрәһең йәки һатып алаһың һәм ул сифаты яғынан, сәләмәтлеккә йоғонтоһо йәһәтенән яҡшыларҙан түгел. Тормошобоҙ ҙа шулай бүленәләр ул: кемдер нәмәнең, шул уҡ художестволы әҫәрҙәрҙең, ысын төмен белгеһе килеп ауырыраҡ йөкмәткелеһенә тотона, ә кемгәләр әҙәби "фаст-фуд" та ярап ҡала. Быны яҙыусылар ҙа аңламай түгел. Ләкин һаҡ булырға кәрәктер, тим. Сөнки уй матдиләшә, быға ҡайһы бер яҙыусы-фантастарҙың әҫәрҙәре лә дәлил: ысынбарлыҡҡа әүерелгән күренештәр һирәкме ни? Шуға әхлаҡ күҙлегенән сығып, ҡайһы бер күренештәрҙе асыҡтан-асыҡ тасуирламау яҡшылыр.

Был осраҡта яҙыусыларға башҡорт халҡының милли фәлсәфәһен белеү ярҙам итер ине. Әйткәндәй, ул ниндәй һәм кем уны өйрәнгән? Атайым иҫән саҡта шундай һорау биргәйнем: "Ни өсөн башҡорттарҙы ялҡау, тиҙәр?" Уның шундай яуабы хәтерҙә ҡалған: "Беҙ ауылда йәшәйбеҙ, бесән әҙерләү өсөн ялан ерҙәр әҙ, бөтә ер колхоздыҡы. Әсәйең менән төңгө сәғәт өстә тороп, 18 километр алыҫлыҡтағы тауға йәйәүләп барып, төшкә тиклем бесән сабып, тиҙ кипкән тау үләнен әүенгә һалып ҡайтып китәбеҙ. Нишләп мин ялҡау булайым ти?" - тине атайым. Быны ошонан сығып та, башҡорт халҡының йәшәү философияһын өйрәнгән кешеләр булһа, бәлки, үҙебеҙҙең халыҡты аңлап, уға дөрөҫөрәк йәшәү, бәхеткә еңелерәк юл табыу әмәлдәрен өйрәтә алыр инек, тип уйланыла. Мине борсоған һорауҙар нәҡ ошоға барып тоташа ла инде: рухи аҙыҡ эҙләп килгән халыҡтың күңелен нимә менән һуғарабыҙ?

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

✓ *“Гел бүләк һорағанһы, аҡыл һорарға кәрәк. Егет кешегә ул бик кәрәк. Шуны ғына әйтәм,” - тип аҡланды Буранғол. Малай телһеҙ ҡалды. Уның бер ҡасан да Ҡыш бабайҙан аҡыл һорағандарын ишеткәне юҡ.*



# ҠЫШ БАБАЙ ҺҮҘЕНДӘ ТОРА

Фәрзәнә АКБУЛАТОВА

Яңы йыл хикәйәһе



Бөгөн Яңы йыл алдынан Миңъямал апаһы менән Хисам еҙнәһе ял йортонан ҡайтып етергә тейештәр. Зарифа уларҙың өйҙәренә күҙ-колаҡ. Урбаш ауылына килеп төшөүенә аҙна-ун көн үтеп китте. Хужалыкта бер нисә дебет кәзәһе бар. Бына шуларҙы ҡарай Зарифа. Улы Динарға ылаҡтар менән уйнау оҡшай. Улар менән ҡуша ырғый-һикерә, һөҙөшә. Зарифа ла ҡәнәғәт, әүрәһен балаҡайы, хәрәкәттә - бәрәкәт. Яңы йыл... Зарифа өсөн ул хәҙер иҫ китерлек шатлыҡлы көн түгел. Бары улына ниндәйҙер байрам яһарға кәрәк. Ҡатын яһалма шыршыны тағы ла бер тапҡыр уратып ҡарап сыҡты. Матур! Төбөнә бүләкте һалаһы ғына ҡалды шикелле. Ҡыш бабай бүләгән. Тып итеп эргәһенә улы килеп баҫты.

- Әсәй, беләһеңме?..

- Нимәне, улым? - әсә Динарға табан боролдо.

- Рәфилгә Ҡыш бабай машина бүләк итте.

- Әйткәйнең инде. Тик Ҡыш бабай бик иртәләгән түгелме?

- Тимур ағайҙар йылы яҡҡа китәләр. Ҡыш бабай унда барып тормам, алдан бирәм, тигән. Ҙуу-ур машина! - Динар ҡулдарын ян-яҡҡа йәйҙе. - Ултырып йөрөп була.

Эйе, Динар һөйләгән ғаилә йыл да байрамды сит илдә ҡаршылай. Тимәк, был юлы Рәфилгә атаһы Тимур бүләкте алдан биргән. Ҙур бүләкте йылы яҡҡа тейәп китмәҫтәр шул. Ярай, зирәк Ҡыш бабай бар! Зарифа үҙалдына ғына йылмайып ҡуйҙы.

- Һиңә лә Ҡыш бабай елле бүләк алып килә. Сабыр ит!

- Лего! - тип шатланып ҡысҡырҙы Динар. - Мин уға хат яҙҙым бит.

Ҡатын аптырап китте:

- Ҡасан? Нишләп мин белмәйем?

- Һин кәрәкмәйһең! "Лего" тип үҙем яҙа беләм!

Зарифаның тауышы һүрелде:

- Маладис, улым, яҙа беләһең. Тик Ҡыш бабай Легоны икенсе йыл бирер.

- Юҡ, ул мине тыңлай!

- Һиңә уйынсыҡ алып килә, тик...

Динар әсәһе бүлдерҙе:

- Былтыр ҙа Лего әпкилмәне. Һин үҙең хат яҙғайның. Әсәйҙе тыңламаны. Шуға хәҙер мин яҙҙым...

- Эйе, яҙа беләһең, өйрәнгән, улым, - тигән булды әсә.

- Күп итеп яҙҙым. Битте тултырҙым. Лего, лего, лего... Ҡыш бабай хатты алғандыр.

Зарифа ишетмәгәнгә һалышты.

- Улым, анау тәтәйҙе бир әле. Шыршыға эләйек.

- Атай булмағас, Ҡыш бабай тыңламаймы? Атай булғанда, нимә һорайым, Ҡыш бабай шуны әпкилә торғайны.

- Динар, бар. Тышта һине ылаҡтар көтә, - тине әсә инде ҡорораҡ тауыш менән. - Мин бәлеш бешерәм. Ваҡыт юҡ.

Бүтән һүҙ ишетмәгәс, Динар кейенеп тышҡа сығып китте. Тын алышынан уҡ кәйефе төшкәне һиҙелә баланың...

Рияз улына һәр саҡ уйынсыҡтар тейәп ҡайта торғайны. Бер йыл үтте, караптары ҡазаға осрап, бик күп моряктар һәләк булды. Диңгеҙҙә аҡса эшләйем тип, айҙар буйы ҡайтмай торғайны. Диңгеҙ йотто... Рияздың кәүҙәһе табылманы. Ул "хәбәрһеҙ юғалды"лар исәбендә. Үле лә, тере лә түгел. Һәләк булғаны асыҡ, тик кәүҙәһе табылмағас... Динар атаһын онотмай, исҡә төшөрә. Ир бала бит, уға атай кәрәк... Былтыр Яңы йылды Рияҙһыҙ ҡаршыланылар. Ниндәй байрам, ти инде!

"Рәфилгә Ҡыш бабай машина бирҙе", тигәс, Динар ҙа шул тимер-томорҙо хыял итәлер тип, ыҡсым ғына үҙйөрөшлө машина һатып алғайны Зарифа. Ана, Лего һорай... Ах, уныһы бөтөнләй иҫтән сыҡҡан шул. Ярар, баланы артыҡ осондорорға ярамай. Булғанына риза булһын. Зарифа тәҙрә эргәһенә килеп баҫты.

Динар ун ике йәшлек Флүргә ҡулын болғай-болғай ниҙер һөйләй. Күрше малай менән тиҙ дуҫлашты ул. Йәтеш булды. Ун ике йәшлек Флүр балаһына күҙ-колаҡ. Ҡалдырмай, эйәртә. Берғәләшеп сығып йөрөп киләләр. Эйе, һәйбәт булды.

Зарифа тәм-том бешерергә ҡамырын йәйҙе. Яңы йылға бөтәһе лә әҙер, тиергә була. Еҙнәһенең машинаһы боҙолған, бөгөн ҡайталар, тик һуңлаңҡырап. Ярар, ун икегә тиклем ваҡыт күп.

- Ҡыш бабай әпкилә, имеш, - тине Флүр туҡтауһыҙ ләпелдәгән Динарҙың башлығын аҫҡа тортып.

- Һиңә лә әпкилә ул, хат яҙ!

- Алдай бит ул, һүҙендә тормай!.. - тип һаһылданы Флүр. Динарҙың Ҡыш бабайға ышаныуы ҡыҙыҡ. Ышана бирһен, зыяны юҡ. Ҡасан да булһа, сер асылаҫаҡ. Әле ул бәләкәс, әкиәт донъяһында йәшәргә тейеш.

- Нимә, һораған бүләгеңде бирмәһә, Ҡыш бабай өҫтөнән ялыу яҙаһыңмы?

Динар аңламаны.

- Нимә яҙам?

- Әрләгең килмәйме, тием, Ҡыш бабайҙы?

Динар ауыҙы асылып китте.

- Юу-у-уҡ! Ул шыршы аҫтына гел бүләк ҡалдыра.

- Бүләктәрҙе бутаһа, яңылышһа? Уға асыуланмайһыңмы? - тип төпсөндө Флүр.

- Үҙе күренмәй бит... Күренмәй генә бүләк ҡалдыра, - тип Динар танауын тартты.

- Ул бит балалар баҡсаһына килә!

- Унда бер ағай кейенә. Артист ул. Мин беләм. Юрый Ҡыш бабай була.

- Юрый булғаны өсөн дә ул һүҙендә тормай. Вәт.

- Флүр ағай, һинең Ҡыш бабайҙы күргәнең бармы?

- Ба-а-ар, - тип һүҙҙы Флүр танауын шылтып алғас, күҙҙәре хәйләкәр осҡонланды.

- Ә ысыны ҡайҙа? - тип һораны малай төшөнкө тауыш менән.

- Ысыны бит ошонда йәшәй, - тип аптыраған булды Флүр. - Әсәң әйтмәнеме ни?

- Ҡайҙа? Ошонда? - Динар баш сайҡаны, үҙенең күҙҙәре янып китте.

- Ну-у-у-у... Ней инде. Ана, күрәһеңме, ҡарағайҙар. Унда урман шәп, шунда өйө лә бар.

- Ә хат! - Ҡыш бабай тамаҡ ҡырҙы. - Хаттар күп килә. Исемендә оноттом да ҡуйҙым...

- Мин бит Динар!- тип һөрән һалды малай.

- Буран, был бәләкәстең хаты һиндәме?

- Һинең бураның бармы, Ҡыш бабай?

- Бар, бураным да, дауылым да бар. Тик байрамда дауыл сыҡмаһын тип, уны бикләп киттем.

Күршеһендәге ағай буран әпкилгәндәр. Кемгә кәрәк ул буран? Вәт, әкәмәт!

- Һин минең хатты уҡый алдыңмы? "Лего" тип үҙем яҙҙым, - тип ләпелдәне малай.

- Динар, һин нитмә... Ашыҡма. Мә, тот, ҡармаҡты. Бәлки, һиңә сиртер.

Ҡыш бабай хәҙер иптәшенә боролдо:

Минә улай ҡарама! Иртәгә апарырмын. Бөгөн эш күп.

Динар маңлайын ышҡыны.

- Ә ул сығып китһә? Алыҫҡа...

- Китһә китә инде. Ул бит Ҡыш бабай. Йөрөргә тейеш. Әйҙә, мал һарайына. Таҙартыш.

- Юҡ, мин өйгә-ә-ә...

- Өшөмтәл. Бар, улайһа!

Флүр ағай һарайға инеп китеү менән, Динар йылға яғына тартылды.

***

Динар йылғаға ағаслыҡтар үҫкән ярҙан шыуып килеп төштө. Күрткә бата-сума хәле бөтөп саҡ килеп еткәйне, аҫҡа эйеп төшөүе уғата күңелле булды. Ана ултыра бит! Ҡыҙыл бушлат. Моҡсайы бар. Эргәһендә тағы кемдер ултыра. Ул ағай, моғайын, ярҙамсыһылыр. Ҡыш бабай иңкәйгән, хәле бөттөмө икән? Динар ҙа бит бында киләкилә арыны.

- Ҡыш бабай! - тип ҡыуаныстан ярһып өндәште ул.

Ҡыш бабай ҡапыл башын ҡалҡытты. Башта аптырағандай итте, унан ирәбе йылмайҙы.

- Әйҙүк, улым, әйҙүк! Һин дә балыҡ тоторға килдеңме?

Ҡара-ҡара, Ҡыш бабайҙан балыҡ һораусы балалар бар икән!

Динар баш сайҡаны.

- Юу-у-уҡ, - тип һүҙҙы. - Ә нишләп һинән балыҡ һорайҙар?

- Кем?

- Балалар, - тине ғәжәпләнгән тауыш менән Динар. - Әтеү кемгә ҡармаҡлайһың? Һин минең хатты алдыңмы?

- Таныйһыңмы?

Буранғол баш сайҡаны.

- Исәүән түгел былай... Бәләһенән баш-аяҡ, апарып ҡуйыр кәрәк, Сабир.

- Мин исәүән түгел! - Динарҙың асыуы килде хатта.

- Гел бүләк һорағанһы, аҡыл һорарға кәрәк. Егет кешегә ул бик кәрәк. Шуны ғына әйтәм, - тип аҡланды Буранғол.

Малай телһеҙ ҡалды. Уның бер ҡасан да Ҡыш бабайҙан аҡыл һорағандарын ишеткәне юҡ.

- Бына минең Ҡыш бабайҙан аҡыл һорарға баш етмәгән дә, шуға гел әсә уҡыным, -тип дауам итте күҙҙәрен мут ҡыҫҡан Буранғол.

Ҡыш бабайҙан Динар мотлаҡ аҡыл һорар. Тик икенсе йыл - мәктәпкә уҡырға барғас һорар.

- Эй, Ҡыш бабай, - тине Буранғол иптәш. - Алып бар, баланы юғалтҡандарҙыр.

Ҡыш бабай ҡармаҡтарын йыя башланы.

- Ур-ра, Ҡыш бабай беҙгә килә! Өйгә! Үҙе килә! - Динар сәпәкәй итте.

- Ҡыш бабай бында ла эшен башланы, - тине Ҡыш бабай. - Тынғылыҡ юҡ уға.

Малай өлкәндәрҙе аптыратып, тағы ла һорай ҡуйҙы:

- Арғымаҡта апараһыңмы?

Ҡыш бабай өлкәнһен ҡашыны.

-Арғыма-а-аҡ! Яңы йыл төнөндә генә бит ул. Әле Арғымағыбыҙ көс йыя.

- Ал машинаны. Мин йәйләп ҡайтырмын, - тине Буранғол.

- Ризаһыңмы? - Ҡыш бабай Динарҙан шулай тип һораны.

Динарҙың ҡыуаныстан тыны ҡыҫылды. Ләззәтләнеп, күҙҙәрен йомоп, баш ҡаҡты. Ҡыш бабай уны машинала алып бара. Был турала ул бит хыял да итмәгәйне!

***

- Әсәй, мин Ҡыш бабайҙы таптым! - тип ҡысҡырып ебәрҙе өйгә атылып килеп ингән Динар.

Ҡыш бабай менән әсә текләштеләр. Әсәнең күҙҙәре ҙур асылды.

- Һеҙ кем булаһығыҙ? - тине ул ғәжәпләнеп.

- Әсәй, Ҡыш бабай! Һин бит Ҡыш бабайҙы беләһең! Ул һиңә генә күренә... Бүләк әпкилгәндә һиңә күренә бит!

Әсәһе, нишләптер, өндәшмәй...

Бына Ҡыш бабай бүреген систе.

- Зарифа!

- Ҡыш бабай әсәйемде белә! Таныны! - тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе Динар.

Зарифаның тауышы ҡалтыранды.

- Балам, бар сисен.

- Мин хәҙер уйынсыҡтарымды алып киләм. Ҡыш бабай, китмә! - малай төпкө бүлмәгә йүгерҙе.

- Сабир... Һинме был?

- Мин, Зарифа.

- Һаҡалтай...

Сабир һаҡал-мыйығын һыпырҙы,

- Ә һаҡал үҙемдеке.

- Үҙенеке, әсәй, үҙенеке!- тип һөрәнләне уйынсыҡтарын ҡосаҡлап килеп сыҡҡан Динар. - Әртис түгел. Мин таныным уны!

- Һине ҡапылғара танырлыҡ түгел. Ҡыҙыл бушлат кейеп алғанһың.

- Бушлат һәр саҡ үҙем менән. Кәрәге тейә.

- Үҙгәргәнһең, - тине Зарифа.

- Ә һин шул көйө, - шулай тине лә Сабир енелсә генә йүтәлләне.

Ололарға иғтибар менән ҡарап торған Динарҙың йәнә ауаҙы яңғыраны.

- Һин тамаҡ ҡыраһыңмы, йүткерәһеңме?

Яуап урынына йәнә тамаҡ ҡырылды.

- Ҡыш бабайға һыуыҡ тейгән. Әсәй, сәй эсер!

- Үт, Ҡыш бабай, - тине Зарифа шелтәле ҡараш менән.

- Ә беҙ уйнай торабыҙ, - тине шат тауышлы Динар.

Сәй әҙерләгән арала Зарифа уларҙың уйнын күҙәтте, Сабирҙың шул тиклем күп уйынмәҙәк белгәненә аптыраны. "Рәхәтләнеп уйната. Ҡайҙан белә? Ә нишләп Урбашҡа килеп сыҡҡан?" Әлегә һорашыр мөмкинлеге юҡ. Динарҙың бөтөн диҡҡәте Ҡыш бабайҙа. Күптән бындай шатлыҡ-дәрт менән уйнағанын күргәне юҡ ине әсәнең. Улыҡайы рәхәтләнеп көлә. "Сабир килештерә... Һы, Ҡыш бабай, имеш..."

Бына әсе бәлеш өҫтәлгә килеп ултырҙы.

- Сәй эсергә!

Ҡара-ҡара, Динар хәҙер Ҡыш бабайҙың елкәһенә менеп ҡунаҡлаған. Тегенеһе әкиәт һөйләй. Бала тыңлай ҙа көлә, хатта сәсәй. Унан һораузар яуҙыра. Шунан бөтәһе лә яңынан башлана...

Диванға барып ултырған Динар бер аҙҙан әүен баҙарына китте.

- Бала-сағаны үҙеңә ҡарата беләһең, Сабир, - тип баш сайҡаны Зарифа.

- Мин бит йыл һайын Ҡыш бабаймын. Башлыса Өфөлә эшләйем. Күптән инде.

- Урбашҡа нимәгә килеп сыҡтың?

- Буранғол исемле дуҫ егетем ошонан. Әле шыршы байрамдарында ныҡ ҡына эшләп алдыҡ. Шунан Яңы йылды ҡаршыларға үҙҙәренә алып ҡайтты. Иртәгә кире ҡуҙғалабыҙ. Балаларҙың каникулында беҙгә эш етерлек. Заказдар күп. Мин һине бында осратырмын тип уйламағайным да, Зарифа...

- Ярай, класташ, рәхмәт, байрам яһаның улыма. Бер уйлаһаң, бала-саға өсөн ҡыш үҙе бер мөғжизә. Шул мәл етте, - тип Зарифа моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы.

- Мөғжизә-ә-ә, - тип һуҙҙы Сабир. - Хәтерләйһеңме, ҡыш көндәре урманға саңғы шыуырға йөрөй торғайныҡ. Баҫ өҫкә ҡойолһа, бөтөнләй икенсе донъяға барып ингән кеүек ине. Аҡлыы-ыҡ. Ем-ем иткән ҡар бөртөктәре... Шул мәлдәр йыш иҫкә төшә.

Зарифаның йөҙө ҡараңғыланды.

- Мин хәҙер Динарҙың атаһын ғына иҫкә төшөрәм. Башҡалары онотолдо.

- Хәлдәреңде ишеттем, Зарифа. Ҡайғыңды уртаҡлашам.

Зарифа яуап бирмәне.

- Һынауҙарға бирешмә, - тине Сабир.

- Йә, ярар, Сабир. Хушлашайыҡ. Динарҙың күңеле булды. Байрам күп булмай.

- Аңланым. Ҡыш бабайға китергә ваҡыт, тиһең инде.

- Эйе, һин беҙҙең өсөн Ҡыш бабай. Бурысың үтәлде.

- Мине ғәфү ит, Зарифа, - тине шул саҡ Сабир. Ихтыярһыҙҙан йәнә йүтәлләне. - Беҙ ҡапыл айырылыштыҡ.

- Һин һүҙеңдә торманың! - Зарифа был һүҙҙәрҙе ҡайҙалыр билдәһеҙлеккә, сикһеҙлеккә ҡарап өндәште. Ярһыу һәм бер үк ваҡытта һалҡын тауыш менән.

- Икенсе ҡыҙҙы бер тапҡыр оҙата барыу хыянат буламы ни инде?

- Алдашма. Дуҫлашып йөрөнөгөҙ. Сибәр инең. Шуға башың әйләнде. Әйләндерҙеләр.

Бер аҙға тынлыҡ урынлашты.

- Һин ҡыуғас, мин...

- Нишләптер, ҡауышманыҡ, - тине Зарифа уны ишетмәгәндәй.

- Мин тик бер генә ҡыҙҙы...

Зарифа йәнә әйтеп бөтөргә ирек бирмәне.

- Һин тоғро була алманың!

Сабирҙың тауышы үҙгәрҙе:

- Тоғро була алманым?

Зарифа сәғәткә күҙ һалды:

- Бына СМС килде. Апайым менән еҙнәм ауылға килеп инделәр. Һинә лә бит әллә нисә тапҡыр шылтыраттылар. Юғалттылар. Ваҡыт...

- Әгәр ҙә Яңы йылды ҡаршы алырға бында ҡалһам? Апайың да, еҙнәң дә миңә ят кешеләр түгел, - тине шул саҡ Сабир, эске тулҡынланыуын бар көсөнә йәшереп. - Буранғолға шылтыратып әйтәм. Ул аңлай торған кеше.

- Ә беҙ ҡунаҡ көтмәйбеҙ, - Зарифа башын ғорур күтәрҙе. - Буранғол һине хөрмәт итеп алып ҡайтҡан. Ана бит, йәнә шылтырата. Әйткән һүҙеңә тоғро була бел. Һәм хуш!

- Аңланым. Шулай ҙа хушлашыр алдынан әйт әле, мин Ҡыш бабай була алдыммы, Зарифа?

- Һин ысын Ҡыш бабай булдың, улым һине онотмаясаҡ.

Сабир урынынан ҡалҡынды.

- Шул һүҙең өсөн булһа ла рәхмәт... - тине ул, ишеккә еткәс, тағы бороолдо. - Легоһын алғас, ҡыуаныр. Тик минең бүләк тип уйлар инде.

- Лего юҡ. Машина көтә уны, - Зарифа көләмһерәне. - Сабир, ниңә күҙең ағайҙы?

- Бәй, Динар бит... Лего тип юл буйы тәтелдәне.

- Борсолма. Ҡыш бабай ҙа һәр саҡ һүҙендә тора алмай, Динар ҡасан да булһа, аңлай башларға тейеш.

***

Иртәгәһен Динар йоҡонан уяныу менән шыршы янына йүгереп килде. Ана, төптә мамыҡҡа күмелгән ҡумта ултыра! Ҡыш бабай бүләге! Малай йәһәтләп төргәкте ҡутарырға керешәте. Бер аҙҙан үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай ҡатып ҡалды. Лего! Ул теләгән, ул хыялланған Лего!

- Әсәй! - тип һөрәнләне малай. - Бына, күрҙеңме? Ҡыш бабай минең хатты уҡыған!

Зарифа улының эргәһенә килеп баҫты.

- Эйе, уҡыған... - тине.

***

Зарифа менән һөйләшкәндән һуң Сабир район үҙәгенә шылтыратты һәм ай-вайына ҡуймай, Буранғолдо ултыртып, шунда елдерҙе. Таныштары Лего тапҡандар ине инде. Нисек инде балаларға шатлыҡ өләшеүсе Ҡыш бабайға ярҙам итмәһендәр! Кире ҡайтҡанда Сабир тур-тура Зарифа торған өйгә йүнәлде. Аптырап киткән ҡатынға ҡумтаны тотторҙо:

- Динарға әйтерһең, Ҡыш бабай әйткән һүҙендә тора, - шулай тине лә, ҡырт боролоп, ҡапҡанан сығып та китте. Зарифа Сабирға рәхмәт әйтергә лә өлгөрмәй ҡалды. Бөгөн дә шуның өсөн унайһыҙлыҡ кисерә ул. Тап ошо мәлдә уйҙарын Динар бүлдерҙе.

- Их, Ҡыш бабайҙың бүләк килтергәнен күргем килгәйне. Төнөн йоҡламаҫмын, тигәйнем. Әллә нишләп йоҡлаған да киткәнмен, - тип малай үкенес белдереп баш сайҡаны.

- Тылсымлы төндә бөтән балаларға ла бүләк биреп өлгөрөргә кәрәк бит. Ул ашыҡты.

Быны ғына аңламаймы ни инде Динар? Малай ризалашты, әсәһенә ҡарап йылмайҙы.

- Мин уны көндөҙ күрҙем, ивет! Әсәй?..

- Әү, улым.

- Ысын Ҡыш бабай һинә оҡшанымы?

Зарифа улының сәсенән һыйпаны.

- Оҡшаны. Ныҡ оҡшай торғайны. Ныҡ.

- Бәләкәй саҡтамы?

- Бәләкәй саҡта ла, ҙурайғас та... - Зарифа улына табан әйелде. - Балаҡайым, һин миңә әйтмәнең бит әле. Сабирҙы... - Зарифа ирекһеҙҙән таматҡ ҡырҙы. - Ҡыш бабайҙы әйтәм, уны ҡайҙан табып алдың?

- Флүр белә! Ҡайҙа торғанын ул белә. Әйтер ул һинә, - тип сере менән уртаҡлашты шат тауышлы Динар. Унан тәҙрәгә һонолдо. - Унда Флүр ағай! Уға Легоны күрһәтәм, Легоны! Ҡыш бабай һүҙендә торҙо!

Динар йәһәт кенә курткаһын эләктерҙе лә һөрәнләй-һөрәнләй ишеккә табан атылды...

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

# МИҘАЛ

Ауылда саҡта, башҡарма комитет рәйесе булып эшләп йөрөгәндә һәм шул уҡ ваҡытта йәмәғәт башланғысында партия ойошмаһы секретары вазифаһын башҡарғанда совхоздың Үҙәк бүлексәһе управляющийы инеп, күренеп сыҡ әле, кисектермәй хәл итә торған йомош бар, тип шылтыратты. Барып ингәндә управляющийҙың шыпа ла ғына кәйефе юҡ ине, әсе ҡапҡандай йөҙө сырылған, ҡаштары төйөлгән. Ултырыуым булды, ул оҙаҡҡа һуҙмай, хәбәрен башланы:

- Беҙҙә бер малсы эшләй бит әле. - Тегенең исем-шәрифен атаны. - Ул, билдәле булыуынса ауыл хужалығы идараһы начальнигының яҡын ҡоҙаһы! Әле бына райкомдан разнарядка килеп төштө, шул малсыға быйылғы йыл һөмғәктары нигеҙендә ынғай ҡылыҡһырлама яҙып, "Наградной лист" тултырып, районға ебәреп, түшенә "Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" миҙалын тағырға тейешбеҙ.

- Нисек инде, тейешбеҙ?

- Тейеш кенә түгел, бурыслыбыҙ!

Көтөлмәгән, ысынбарлыҡҡа тап килмәгән тәҡдимдән аптырап, юғалыңҡырап ҡалғандан һуң, тураһын ярҙым:

- Ниндәй күрһәткестәр нигеҙендә тағы, уның бит эштәре ал да гөл түгел. Һимерткән үгеҙҙәре килеп тороп арыҡ, тиҙәктәренә ҡатып йөрөйҙәр шунда. Өҫтәүенә, малсы бик йыш һуҡмыш та ҡырын һалмыш, эшенә лә илке-һалҡы ҡарай, бүләкләү генә түгел, һуңға ҡалмаҫ элек уны эшенән алырға ине!

- Беләм.

- Белгәс һуң, райкомға шулай тип икебеҙ исеменән яуап яҙайыҡ та ҡуяйыҡ, бөттө-китте!

- Аңһат һинә, башың йәш әле, күп нәмәне аңлап, төшөнөп етмәйһең! Беренсенән, һис ҡасан райком ҡарарына ҡаршы сығырға ярамай, быны үҙләштереп өлгөргәнһең, яҡшы беләһең, икенсенән, начальник һылтауын табып, өҫтө-өҫтөнә тикшереү ебәрәсәк, тынламаған, һүҙен йыҡҡан осраҡта елкәгә менеп атланасаҡ.

- Нимә эшләйбеҙ ул саҡта?

- Шуның өсөн кәңәшкә саҡырҙым да инде һине.

Бер килке һүҙһеҙ шымтайышҡандан һуң управляющий яңынан теремекләнде:

- Давай, былай итәбеҙ, телһеҙ-тешһеҙ ике-өс малсының йыл буйына алған артымдарын ошо малсының иҫәбенә яҙабыҙ.

- Был ысын мәғәнәһендә урлыҡ та баһа! Ә тегеләр һуң?

- Әйттем дәһә, тешеккәндәр, өндәшмәҫтәр.

- Улар ҙа бит ғаилә аҫрай.

- Һуң ҡайһылай итергә, башҡаса юлы юҡ!

Һуңғы сиктә райкомдың бойороғон үтәп, шулай эшләнде лә, әммә йыуаштар йыл йомғаҡтары буйынса премиянан яҙҙылар, уның ҡарауы, теге малсы миҙаллы булды. Берәй тантана була ҡалһа, ул хаҡһыҙ рәүештә эләктергән шул ғәҙелһеҙлек билдәһен тағып килә торғайны.

Миңә ҡалһа, ундағы ялтырауыҡ миҙалды мин фиҙаҡәрлек өлгөһө итеп түгел, бурлыҡ, алдыҡ сығанағы итеп ҡабул итә торғайным. Ояҭ төшөнсәһен ситкә ҡуйып, ялағай һатылыуға, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡҡа, туған-тумасалыҡҡа, таныш-тоношлоҡҡа ҡоролған бөгөнгө йәшәйештә, ҡулды ҡул йыуған замана шарттарында, бәғзеләрҙе бирелгән юғары исемдәренә ҡарап ҡына танып булғанда ошо уйымдан әле лә кире ҡайтмағанмын...

# ЯЛАЛЕТДИН

Беҙҙең ауылда Ялалетдин исемле кеше йәшәне. Зимагор тип тә йөрөттөләр уны, бәғзеләр Берәҙәк Ялал, ти ҙә ҡуялар ине. Баш осонда ҡыйығы ла, ғаиләһе лә, тәғәйен төпләнер төйәге лә юҡ ине уның. Һаһыҙ күп кешеләр араһында япа-яңғыҙы көн итте, хас та тамырынан айырылып дала буйлап ел иҫкән тарафҡа, билдәһеҙлеккә маҡсатһыҙ тәгәрәгән ҡамғаҡ. Һөйәлләнгән ике ҡулына балта ла бысҡы, бар байлығы, бар мөлкәте шул. Тирә-яҡтағы ауылдарҙы теүәлләп ҡыҙырып, көнлөктә йөрөгән ялсылай ялланып, оҫталыҡ эштәре менән шөғөлләнеп тамаҡ туйҙырҙы, дөрөҫөрәге, йән аҫраны. Ауылға ҡайтһа ла һеңле тейеш кешеһенең ишек төбөндәге ҡаҡ һөндәрәһендә аҙна самаһы ҡунып йөрөй ҙә, йәүкәләп саҡыра ҡалһалар, йәнә биниһая ваҡытҡа күҙ унынан юғала. Ҡышын да, йәйен дә өҫтөндә йылтырап кергә йышылған фуфайка ла, аяҡтарында ҡобарып ҡатҡан кирза итектәр. Миңә ҡалһа, ул яҡты донъяға тәненә һыҙырып алғаныҙ булып һылашып йәбешкән ҡойто кейемдәрен кейеп тыуған да һаман да үҙгәрешһеҙ-ниһеҙ йөрөп ятҡан һымаҡ, һәр хәлдә, уны айҙар, йылдар буйы үҙгәрмәгән ошо ҡиәфәтендә күреп ҡабул иттем. Ауылға ҡайтҡанында ла кеше менән аралаша һалып барманы, кибеткә махорка, йә шырпы артынан һуғыла, шунан эргәләге урман аҡландарына сығып әйләнә, Аҡтау ҡаяһынан тирә-йүнде күҙәтә лә күләгәләй ҡымғырлап, һеңлеһенең өйө яғына ҡарай йүнәлә. Бәлки, дуҫ-ише, аралашыр яҡыны ла булмағандыр, кем белә.

Бер көн Һаҡмарҙан, балыҡтан ҡайтып килгәндә ул йылға һуҡмағының ҡырында ҡараҫҡылай суҡайып һерәйгән ине. Мине күргәс, теремекләнгәндәй итте лә янына саҡырҙы:

- Эй, малай, кил әле бында!

Янына сүгәләнем.

- Минең кемлекте беләһеңдер?

- Белмәгән ҡайҙа!

- Йә?

- Зимагор Ялал!

- Дөрөҫ әйттең, зимагор, берәҙәк... Ә бит заманында, белә-белһәң, мин бик шәп, үтә шәп кеше инем, тирә-яҡҡа һыймай йөрөлдө, көнитмештең артына тибеп йәшәлде. Мәрхәмәтһеҙлек, фәхшәтлек йәһәтенән яманаты сыҡҡан Йылайыр төрмәһендә надзиратель булып эшләнем. Ғәйепләнеүселәрҙе камераға бикләп тотоуҙан, уларҙы рәнйетеүҙән, түбәнһетеүҙән ҡырағай ләззәт ала, кисерә торғайным. Аҡсаны ла күп тапҡас, иркен көн иттем, тормошомдо күңелле байрамдай, мауыҡтырғыс тамашалай күрҙем, ғаилә ҡороу хаҡында уйлап та ҡараманым. Гел шулай дауам итер һымаҡ ине лә бит, яҙмыш тигәнең бер алдын, бер артын күрһәтә, ҡәһәрең, "тормош ҡуласа, әйләндереп килтереп бер баҫа", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер, күрәһең. Хәҙер ғәйепләнеүсе, йәберләнеүсе, хөкөм ителеүсе сифатында, үҙ донъяма бикләндем. Ғүмерлеккә. Һәр кем ҡасандыр, ҡайҙалыр үҙ ҡулдары менән ҡылған гонаһының тотҡоно ул! Быларҙы нишләп һинә һөйләйемме, эс серемде бушатыр башҡа кеше булмағанға!

Шуны хәтеренә һеңдереп ҡуй, малай, һис ҡасан, һис кемгә насарлыҡ эшләмә, ул һинә, иртәме-һуңмы, бер әйләнеп ҡайта, һис һуҙһеҙ, ҡайта, унан ялтанып, йәшеренеп ҡалыу, ҡотолоу мөмкин түгел! Тағы һинә бер үтенесем дә бар, һин кескәйһең әлегә, көнитмеш ҡатмарлыҡтарын аңлар йәштә түгелһең, шулай ҙа ер йөҙөндә минең булғанлыҡты, йәшәгәнлекте иҫеңә төшөрөргә тырыш, онотҡанда бер булһа ла... - Сандыр кәүҙәле ир ҡалҡты ла һуҡыр кешеләй тәртәнләп, ауыл яғына ҡарай йүнәлде...

Борон, бик борон беҙҙең ауылда Ялалетдин тигән кешенең йәшәүен белеүсе берәйһе бармы икән бөгөн? Икеле. Ә мин иҫкә төшөрәм, онотҡанда бер булһа ла. Бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй, юғалмай ҙа, әхирәтҡә күскән әҙәм балаһын, яҡшы икән - матур һүҙ менән, яман булһа - өндәшмәй ҡалып, кем дә булһа хәтерләргә, иҫкә алырға тейештер бит?..

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

✓ *Был йола беҙҙең Учалы районында ваҡытында киң таралған булған. Беҙҙең яҡта сепрәк ҡыҙ, сепрәк инәй, үкел инәй, үкел атай, морондоҡ инәй, уртаҡ тигән һүҙҙәр ошо йола менән бәйле барлыҡҡа килгән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШӘРӘЙЕК

■ Бынан бер нисә йыл элек кенә еләктәрҙән ҡайнатма яһауҙың бер кире яғын да күрмәй инек. Хәҙер шәкәр организмға насар тәьҫир итә, тигән булып, бар халыҡ еләк-емеште ҡышҡылыҡҡа туңдырыуға күсте. Дөйөм практика табибы Ирина Дворкина туңдырылған еләктәрҙең дә зыяны бар, тигән фекерҙә. Кемдең аллергияһы бар, улар өсөн айырыуса, ти ул. "Аллергия, гәҙәттә, еләккә, ҡурай еләгенә була һәм етештереүсе һеҙ магазинда һатып алған сейәлә уларҙың өлөштәре үҙгеп китмәүенә гарантия бирә алмай. Йәғни, сейә ашайым, тип, янылыш гүмерегеҙ өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусы еләк ҡабыуығыҙ ихтимал", ти Дворкина. Шулай уҡ туңдырылған еләк ашағандан һуң тештәрҙе яҡшылап таҙартырға кәрәк икән. Еләктәрҙә буяусы пигменттар күп, улар теш эмаленә зыян килтерә. "Кем сәләмәтлеге хәленән сығып, кұҙәнәклелек һәм углеводтар түбән булған диета кұҙәтә, уларға ла туңдырылған еләктәр менән һаҡ булырға кәңәш итәм. Был осраҡта үҙегеҙҙе дауалаған табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ".

■ Ике аҙна эсендә йәшәрергә мөмкин, ти геронтолог Москалев. Дөрөҫ туҡланыу, әүҙем тормош алып барыу һөҙөмтәһендә ике аҙна эсендә 5 йәшкә йәшәрергә мөмкин икән. Рәсәй фәндәр академияһы профессоры, Түбәнге Новгород университетының Ҡартайыу биологияһы институты директоры Алексей Москалев был турала 3-сө "Ҡартайыу менән идара итеү" халыҡ-ара конгресында һөйләне. Ғалимдар 43 кешенән торған төркөм йыйып, уларға 2 аҙнаға йәшәү рәүешен үҙгәртергә тәҡдим иткән. Уларға түбән калориялы, әммә барлыҡ элементтар һәм витаминдар булған рацион тәҡдим ителгән. Барыһы ла физик күнекмәләр яһаған, тын алыу гимнастикаһы яһаған. Москалев әйтеүенсә, ҡатнашыусыларҙың сәләмәтлек күрһәткестәре күҙ алдында яҡшырған. "Уртаса алғанда, һәр берененең биологик йәше 5 йәшкә йәшәргән. Быны ҡан күрһәткестәре буйынса билдәләнек", - ти ул. Кеше организмындағы һәр ағза үҙенсә айырым ҡартая, шулай ҙа биологик йәшендә контролдә тоторға була, тигән фекергә килгән ғалимдар. Мәҫәлән, стресҡа бирелмәскә, туҡланыуыңа иғтибар итергә, физик яҡтан әүҙем булырға. Табип әйтеүенсә, былар барыһы организмға ыңғай йоғонто яһай, шуға ла был ҡағиҙәләр бер тапҡыр үткәрелгән акция булмаһын, ә йәшәү рәүешенә әүерелһен.

■ Сәйҙе яратабыҙ инде беҙ. Әммә магазинда һатылған бөтөн сәй ҙә файҙалы түгел. Уларҙың ҡайһы берҙәре буяуҙан торған эсемлек кенә, ти диетолог Михаил Гинзбург. "Файҙаһы тураһында фекер йөрөткәндә, йәшел сәй беренсе урында. Тик күптәр тәмгә өҫтөнлөк бирә һәм был йәһәттән иң тәмлеһе булып ҡара сәй тора. Ҡыҙыл - сәй түгел, ул буяуы булған эсемлек. Аҡ сәй иһә ферментация үтмәгән, йәшел сәйгә оҡшаш. Уны беҙ эсеп бармайбыҙ, әммә ул йәшеле кеүек уҡ, организмға тик файҙа ғына килтерә", - ти эксперт. Белгес билдәләүенсә, файҙаны тап сәй япраҡтарында булған матдәләр бирә. Мәҫәлән, галла кислотаһы шешеүгә ҡаршы ҡулланыла, ҡартайыу процестарын яйлата. "Көнөнә күпме сәй эсергә һуң?" тигән һорауға Гинзбург шулай тип яуаплай: "3-4 сынаяҡ". Кем дә кем насар йоҡлай икән, уларға был да күп.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ХАЛҠЫБЫҘҘА МАТУР ЙОЛАЛАР БАР

**Үткән йылдың көҙөндә, турист маршрутына эләгеп, Астана ҡалаһын барып күреү бәхетенә өлгәшелде. Заманса төҙөлгән йорттар биҙәй ҡаҙаҡтарҙың баш ҡалаһын. Әммә уларға ҡаҙаҡ мәҙәниәте, ҡаҙаҡ рухы һеңдерелә. Үтә күренмәле ете ҡатлы "Нур - Алем" музейының беренсе ҡаты "Милләт павильоны" тип атала һәм ҡаҙаҡ милләтенең тарихы, йолалары тураһында бай белешмә бирә. Шунда бер нәмә иғтибарымды йәлеп итте: ҡаҙаҡ, ҡунағының күҙе төшкән әйбер булһа, оҙатҡанда уға был әйберҙе бүләк итә икән. Был йола башҡортта ла булыуы билдәле. Әммә беҙ уны онотобораҡ ебәргәнбеҙ, сөнки был турала һөйләмәйбеҙ. Кем белә, бәлки, башҡорттан баш алғандыр әле был күренеш? Быныһы минең фекер. Нисек кенә булмаһын, күршеләш йәшәгән халыҡ менән күп йолаларыбыҙ оҡшаш икәненә ошо сәфәрҙә тағы бер тапҡыр инанылды.**

Әйе, халҡыбыҙ фәһем алырлыҡ йолаларға бик бай. Тик уларҙы хәтерҙә яңыртып, дөрөҫ итеп һөйләп, күрһәтеп торорға ғына кәрәк. Минең үҙемдә инде байтаҡтан яһалма (ҡиәмәт тә тиҙәр) инәй-атай, ҡыҙ-ул итеү кеүек йолабыҙҙың маҡсаты, сәбәптәре, үтәлеше ҡыҙыҡһындыра ине. Был ҡыҙыҡһыныу төрлө йолаларыбыҙҙы аяҡҡа баҫтырыу менән әүҙем шөғөлләнеүсе ағинәйҙәребеҙ иғтибарынан да ситтә ҡалманы һәм бына улар Мулдаҡай ауылында ошо матур йола тураһында белгәндәре менән уртаҡлашырға йыйылды. Тәүҙә ауылдың Зөлфиә Әскәт ҡыҙы етәкләгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары - хужалар һүҙ алды. Ғаилә эсендәге туғанлыҡ терминдары, уларҙы ҡулланыу - бер-беренә хөрмәт, йомшаҡ мөнәсәбәт билдәһе икәнлеге осрашыуға килгән уҡыусы балаларға төшөндөрөлдө. Сит ғаиләгә килен булып төшкәс, яңы туғандарына ла өндәшеү өсөн телебеҙҙә булған бик матур ҡулай һүҙҙәр барланды.

Артабан фекер алышыу яһалма туғанлашыуға күсте. Был йола беҙҙең Учалы районында ваҡытында киң таралған булған. Беҙҙең яҡта сепрәк ҡыҙ, сепрәк инәй, үкел инәй, үкел атай, морондоҡ инәй, уртаҡ тигән һүҙҙәр ошо йола менән бәйле барлыҡҡа килгән. Хәҙер был йола кұҙәтелмәй тиерлек, әммә ваҡытында шул йолаға бәйле туғанлашҡан ғаиләләрҙең туғанлыҡ ебен бөгөн дә өҙмәүен бәйән итеүселәр булды.

**Килмәк ауылынан Илмира Йомадил ҡыҙының һөйләгәне:** "Минең инәйемдең (әсәйемдең) сепрәк ҡыҙы булды. Элек ҡунаҡлашыу көслө булды бит. Үҙ-ара йырлап, бейеп, шаярып ҡунаҡ була белде халыҡ. Шундай бер мәжлестә инәйем Зөбәйҙә апайҙы бик оҡшата. Шунан һуң уларҙы саҡырып ала, ҡунаҡ итә. Ағайға таҫтамал, апайға яулыҡ ябып, Зөбәйҙә апайҙы ҡыҙ итә. Беҙҙә бына шулай яһалма ҡыҙҙы "сепрәк ҡыҙ" тип атайҙар. Бүләккә сепрәктән булған әйберҙәр бирешкәнгә шулай аталдымы икән? Бик матур аралашып йәшәнек, йәшәйбеҙ. Бар эштәргә бергә башҡарҙыҡ, бер-беребеҙҙе бер ҡорҙан да ҡалдырманыҡ. Инәйем үлер алдынан да сепрәк ҡыҙын ташламаҫҡа, элеккесә бергә-бергә йәшәргә васыят әйтеп ҡалдырҙы. Васыятҡа әле лә тоғробоҙ. Зөбәйҙә апай менән, ағай менән әле лә бер туғандай йәшәйбеҙ..."

**Балбыҡ ауылынан Зәһинә Рәйес ҡыҙының һөйләгәне:** "Морондоҡ инәй, гәҙәттә, киленгә ҡәйнәһе тарафынан билдәләнә. Сит ергә төшкән киленгә ысынлап та терәк, таяныс, кәңәшсе була улар. Ауылыбыҙҙа морондоҡ инәй, үкел инәй, ҡыйәмәт инәй исемен алыусылар күп булған. Ошо сараға әҙерләнгәндә байтағының тарихын инде 99 йәшен тултырып, имен-аман йәшәп ятыусы Нүрзиҙә әбейем һөйләне. Морондоҡ инәйҙе килендең үҙе һайлағанына ла миҫал бар. Абруйлы, етеш йәшәгәнерәк кешеләрҙе яһалма инәй-атай итергә тырышҡандар. Атай-инәй итергә теләк белдереүсегә лә бар яҡтан һынап ҡына ризалыҡ бирелгән. Сөнки, яһалма булһа ла, халыҡ бик яуаплы ҡараған был вазифаға. Яһалма балаларына ла үҙ балалары кеүек хәләнән килгәнсе ярҙам иткән. Әбейемдән шундай осраҡтарға бик күп миҫалдар яҙып алдым.

Беҙҙә яңы ғына мейестән сыҡҡан икмәктең киҫеп алынған өлөшөн ҡиәмәт икмәк тиҙәр. Йәшереп кенә, ҡултығына ҡыҫтырып, үҙен инәй иткән балаһына килтерә икән. Ҡиәмәт инәй һүҙе бына шунан инде. Яһалмаларҙы атам, инәм тип тә йөрөтәләр беҙҙә. Ауылыбыҙҙа 83 йәшлек Фәриғә апайҙың әле һаман көн дә тиерлек таяғына таянып: "Инәмә китеп барам әле", - тип, 86 йәшен тултырған Рәйсә еңгәгә барғанын осратабыҙ. Әүеш ауылынан Балбыҡҡа килен булып төшкәс, ҡәйнәһе киленә Рәйсә еңгәне морондоҡ инәһе итеп билдәләй. Рәйсә еңгә лә бер нисә йыл

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

**Декабрь, ғинуарҙың тәүге көндәре, гәҙәттә, ҙур сығымдар талап ителгән ваҡыт. Бүләктәр, байрам өҫтәле әҙерләү, оҙайлы байрам каникулдарында балаларҙы төрлө сараларға алып йөрөү өсөн билеттар алыу һәм башҡалар - барыһына ла аҡса түгелә. Ләкин ошо уҡ миҙгелдә, байрам алды ығы-зығыһынан файҙаланып, ярайһы ғына килем алып ҡалырға ла мөмкин. Был яҙмамда үҙемдең, таныштарымдың миҫалын яҙып үтергә булдым.**

Мин үҙем йыллыҡ отпускымдың ике аҙнаһын мотлаҡ декабрҙең һуңғы ике аҙнаһында алам да был көндәрҙе шыршы һатыуға тотонам. Тәүге йылдарҙа һатыусы булараҡ ҡына тора инем, унан эштең айышына төшөнөп алғас, хәҙер үҙем шыршы һатыу нөктәһе асам. Шыршыларҙы мин күмәртә хаҡ менән һатып алам да, ҡала уртаһындағы ике нөктәгә сығарып ҡуйып, хаҡын арттырып һатам. Бер нөктәлә - үҙем, икенсеһендә улым торабыҙ. Эш ауыр түгел, һатып алыусылар һәр ваҡыт күп.

Минең һеңлем балалар ижады үҙәгендә эшләй һәм үҙенең һөнәрен, оҫталығын эшенән тыш та ҡуллана һәм аҡса эшләй. Мәҫәлән, баш ҡалала һәр ваҡыт балалар өсөн ниндәйҙер саралар ойошторола, бары тик мәғлүмәтте ҡарап барырға ғына кәрәк. Унда мотлаҡ төрлө оҫталыҡ дәрестәре үткәрәләр. Һеңлем бер ҡасан да ошондай сараларҙан "коро" ҡалмай, тип әйтәйем. Ойоштороусылар менән алдан хәбәрләшеп, бөтә нескәлектәрен белешә лә, үҙенең төҫлө ептәрен, ҡағыҙ һәм елемен, башҡа кәрәк-яраҡын тотоп, сара уҙған урынға барып тора. Ире уға ҡулайлы ғына итеп өҫтәл дә эшләп биргән, енел генә ултырғыстары ла бар. Атай-әсәйҙәр балаларының күңелен күреү өсөн аҡса йәлләмәй, ә кескәйҙәр һәр ваҡыт ҡул эше менән булырға әҙер тора. Шуға күрә оҫталыҡ дәресендә ҡатнашырға теләүселәр һәр ваҡыт күп. Улар булғас, һеңлемдең эше лә бара, аҡса ла тама.

Дуҫым ғаиләһе менән республика райондарының береһендә йәшәй. Өс балалары үҫеп килә. Шыршы байрамдары етһә, кәләше аҡса эшләп ҡала - маскарад костюмдарын ҡуртымға бирә. Бер тапҡыр кейер өсөн генә маскарад костюмы алыу күпкә ҡыйбатҡа төшә, шуға күрә хәҙер күп кеше ҡуртымға алыуҙы хуп күрә. Бер ауырлығы ла булмаған шөғөлө байрам өҫтәленә ҡушымта булырлыҡ килем килтерә.

Әлеге лә баяғы шул дуҫым үҙе бер тамсы спиртлы эсемлек ҡулланмай. Байрамдарҙа ул "айыҡ водитель" булараҡ эшләй. Ҡунаҡта төшөрөп алғандар, шулай ҙа аҡылдарын юймағандар, эскән килеш руль артына ултырыуҙың ни тиклем хәүефле икәнлеген яҡшы аңлай. Нәҡ ошондай кешеләр дуҫтың хеҙмәте менән ҡуллана ла инде. Алдан һөйләшеп, тәғәйен ваҡытты билдәләйҙәр ҙә, дуҫым уларҙы машиналары менән бергә өйҙәренә тиклем алып барып ҡуя. Тегеләр ҙә хәүефһеҙ генә ҡайтып етә, дуҫ та аҡсалы була.

Хеҙмәттәшемдең хаски тоҡомло эте бар. Ошо ҡыш көндәрендә рәхәтләнеп аҡса эшләй. Был матур, үҙенсәлекле эт менән фотоһүрәт эшләргә теләүселәр ифрат күп икән дә ул, хеҙмәттәшем ошонон менән файҙалана ла. Ял итеү базалары хужалары менән һөйләшеп килешә лә, уның биләмәһендә ял итеүселәргә эте менән фотосессиялар ойоштора. Шулай уҡ туй, тыуған көн һәм башҡа танталар мәлендә фотосессия эшләү өсөн дә хаски тоҡомло эт бик ҙур һорау менән файҙаланыла икән.

Ҡыҫҡаһы, "Аҡса юҡ", тиеп бошонон ултырмайыҡ, уны булдырыу юлдарын эҙләйек. Эҙләгән мотлаҡ таба ул.

**Азамат БУЛАТОВ.**

✓ ***Мулдаҡай ауылында үткән сарабыҙ матур йоланы иҫкә төшөрөп кенә ҡалманы, ихласлыҡ, ябайлыҡ кеүек күркәм сифаттарға эйә булған халыҡ вариҫтары булыуыбыҙға ла бер фәһем булды.***

элек кенә шул Әүеш ауылынан килен булып төшкән була. Бына шулай ауылдаштар, әллә ни йәш айырмаһына ҡарамаҫтан, инәле-ҡыҙлы булып матур ғүмер итәләр..."

**Рәзилә Ибраһимованың һөйләгәндәре:** "Атайым менән инәйемдең морондоҡтары оло ғына йәштәге Мәҙинә ҡартнәй менән Ғатаулла ҡарттай булғандар. Ҡартнәйемдең беҙгә көн дә килеп йөрөүе бөгөнгөләй хәтеремдә. Үҙе бер ҡасан да буш ҡул менән йөрөмәне. Ғаиләләре лә ҙур ғына ине, шуға күрә йыш ҡына икмәк һалған булғандарҙыр. Икмәк бешергән көндә ҡултыҡ аҫтына тығып, йылы ғына ҡыйәмәт икмәге килтерер ҙә: "Әнисә күреп ҡалмаһын, әсәйенә ошаҡлар", - тигән булыр ине. Әнисәһе улы менән килененең өсөнсө ҡыҙы. Ҡартнәй, инәйемдең яһалма инәйе, беҙҙе шул тиклем ҡарашты. Уның изгелектәрен әле һаман һағынып иҫкә алам..."

**Рәсилә Мусина ошоларҙы хәтерләп алды:** "Инәйем морондоҡ инәһен гел кәҙерләп иҫкә алыр булды. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була бит. Бер атайым менән нимәгәлер асыуланышып китәләр ҙә, инәйем, кескәй балаһын алып, морондоҡ инәһенә сығып китә. Барғас, әлбиттә, хәлде һөйләп тормай. Киске тамаҡты ашағас та ҡайтып китмәй, йоҡларға ҡала. Инәһе лә төпсөнөп тормай. Иртән ҡартнәйем һөтөн үткәреп, ҡаймағын тултыра ла, күстәнәстәр төйнәп, йоҡонан торғас та ҡайтырға ашыҡмаған инәйемә: "Әйҙә, ҡыҙым, инде һеҙгә барайыҡ",- ти. Атайым быларҙы йылмайып ҡаршы ала. Бер нәмә лә булмағандай, бергәләп сәй эсәләр. Ҡартнәй ҡайтыр саҡта инәйемә генә: "Ҡыҙым, күрше-күлән керһә, сәйеңде, шәкәреңде, икмәгеңде ҡуй. Ә бына ҡаймаҡты кейәүгә генә ултырт. Ул ауыр эштә йөрөй. Әлегә һыйырығыҙ һауалған бит",- тип әйтеп ҡуя. Морондоҡ инәһенең ярҙамы, аҡыллы кәңәштәре тураһында инәйем һәр саҡ бер йылылыҡ менән иҫкә алыр ине..."

**Нәжибә Латыповаың һөйләгәндәре:** "Атайым менән инәйемде Ишмөхәмәт ағай менән Хәкимә апайҙың туйына саҡырып, уларға морондоҡ инәй итеп билдәләгәйҙәр. Шуның билдәһе итеп атайыма сигелгән таҫтамал, инәйемә ашъяулыҡ бүләк ителәр. Атайым менән инәйем ошо яуаплы бурысты алғас, йәштәрҙе үҙҙәренә саҡырып, бүләккә һарыҡ әйтәләр. Йәштәр, ни хикмәт менәндер, берегеп китә алмайҙар, Хәкимә апай ауылы Мулдаҡайға ҡайтып китә. Атайым менән инәйем байтаҡ ваҡыт йәштәрҙең килешеүенә өмөт итеп йөрөй. Әммә йәштәр ҡабат йәрәшмәй. Һуңынан, бурысты үтәп ҡуяйыҡ тип, кеше артынан булһа ла Хәкимә апайға күлдәклек ебәртәләр. Бурыслы булып ҡалмай, әйтелгәнде үтәргә тырышып йәшәгәндәр бит..."



**Динә Кәримованың һөйләгәндәре:** "Минең атайым менән инәйем бер нисә кешегә үкел инәй-атай булды. Беҙҙә яһалмаларҙы шулай үкел тип йөрөтәләр. Берәүҙәре - Нәсимә апайым менән Ғадинан еҙнә, үҙебеҙҙең ауыл кешеләре. Еҙнәнең "төшөрәп" алғанын белеп ҡалһалар, атайымдар мине йоҡларға уларға ебәрә, йәнәһе лә, бола сығарып ҡуймаһын. Еҙнәм мине күрһә: "Балдыҙым килгән дәһә",- тип шаярта ла тынып ҡына йоҡларға ята. Хәҙер шуны уйлайым: бала ғына булһам да мине эшкә һанаған бит үкел еҙнәм. Ауылға йәш белгестәр Миҙхәт ағай менән Зифа апай килделәр. Миҙхәт ағай атайымды яратып, үкел итергә уйлай. Ҡырмыҫҡалы яҡтарынан килен булып төшкән Зифа апай: "Һин үҙең был яҡтыҡы, атай-әсәйең эргәңдә. Бына минекеләр ситтә, мин уларҙы атай-әсәй итәм", - тип, бүләктәрен биреп үкел итеп ҡуя. Иртән мәктәпкә эшкә киткәндә балаһын индереп ҡалдыра торғайны. Бына шулай бер-беребеҙгә ярҙам итеп йәшәнек. Тағы ла бер үкел ҡыҙы Сажидә апайыма мәһәрен һалып, туйын да үҙҙәре үткәрҙе. Инәй-атайымды үҙ күреп үкел иткән балаларын беҙ бер туғандай күрҙек, бер туғандай аралаштыҡ..."

Мулдаҡай ауылында үткән ошо сарабыҙ халҡыбыҙ тормошонда булған был матур йоланы иҫкә төшөрөп кенә ҡалманы, йолаға ярашлы иңгә алған бурысҡа тоғролоҡ, яуаплылыҡ һоҡландырҙы ла, уйландырҙы ла. Ихласлыҡ, ябайлыҡ кеүек күркәм сифаттарға эйә булған халыҡ вариҫтары булыуыбыҙға ла бер фәһем булды. Тел байлығын тәшкил иткән күпме хазинаны ла барланыҡ. Үҙебеҙҙә булғанды юғалтмайыҡ, йыйайыҡ, яйы тура килгәндә, башҡаларға ла баһалы ғына итеп еткерә беләйек, тип әйтергә теләгән инем яҙмамда.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районының "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе.**

СӘХИФӘНӘН

# ТӘҮ КҮРЕҮҘӘН ХӨКӨМ ИТМӘЙЕК!

**Кешенең тәбиғәте шулай ҡоролған - берәйһен үҙебеҙгә оҡшамаған сүрәттә күрһәк, хатта ишетһәк тә, аҙағын уйлап тормай, шундуҡ хөкөм сығарып ҡуябыҙ: ул фәләнтөгән дә фәсмәтән, шундай һәм бындай. Ошо сифатыбыҙ менән күпме гонаһ алғаныбыҙҙы бер Аллаһ - иң хаҡ Хөкөмдар ғына белә... Ашығыу - шайтандан, тип юҡҡа әйтмәйҙәр...**

Солтан Морат, ябай ғына кейенеп, халҡы нисек тын ала, нисек йәшәй икәнен белергә теләп, төнөн һаҡ начальнигы менән урам ҡыҙырырға ятаҡҡан. Бер мәл ул урам уртаһында аунап ятҡан бер ирҙе күреп ҡалған. Барып тотоп ҡараһа, теге үлгән булып сыға.

- Был кем? Ни эшләп уны берәү ҙә килеп алмаған, ерләмәгән? - тип һорау биргән солтан.

- Эй-й, ул да булдымы кеше, бер йүнһеҙ, әҙәм аҡтығы, зинасы, хәмер ҡоло, кешегә лә шуты юҡ, - тип яуаплай шундағы кешеләр.

- Һуң, ул да Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм өммәтенән түгелме, әйҙәгеҙ, адресын табып, өйөнә алып барайыҡ, - тип ныҡыша солтан.

Бер-ике кеше табып, үлгән кешенең кемлеген белеп, өйөнә алып баралар. Мәйетте индереп һалғас, ҡатыны илап ебәрә: "Эй, Аллаһтың ғалимы (вәли), Аллаһ Үҙе генә һине ғәфү итһен, мин шаһитлыҡ итәм, һин имандыларҙан булдың!" - ти. Солтан Морат аптырап китә: "Нисек инде Аллаһтың вәлийе, уны бит кешеләр хәмер эсеүсе, зинасы, ти. Ул үлгәнгә хатта ҡайғырыусы кеше булманы.

- Минең ирем, ысынлап та, көн һайын хәмер, шарап эшләп һатыусыға барып, унан ҡутарғансы продукцияһын алып, өйгә алып ҡайта һәм бәҙрәфкә түгә ине, - ти ҡатыны. - Йәнә ул көн һайын төндә фәхишә ҡатынға барып, күп итеп аҡса түләп, бөгөнгә төн минеке, таңға тиклем берәүгә лә ишек асма, тип тыйып ҡайта ине. Өйгә ҡайтҡас, әлхәмдүлилләһ, мин бөгөн күпме кешене ҙур гонаһтан ҡотҡарҙым, тип әйтә ине. Кешеләр, билдәле, уның хәмер алып ҡайтҡанын һәм фәхишә менән һөйләшкәнен күреп, уның хаҡында насар һүҙ тараттылар, ләстит сәйнәнеләр. Мин иремә, ҡуй, улайтып йөрөмә, һин үлеп-фәлән китһәң, һине шәриғәтсә йыуып, кәфенләп ерләр кеше лә табылмаҫ, тиһәм, ирем: "Минең өсөн борсолма. Минең йыназамда мосолмандар хужаһы солтан Морат үҙе һәм билдәле ғалимдар ҡатнашасаҡ", - тип әйтте...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, солтан Морат илап ебәрә һәм: "Ысынында, ирең хаҡты әйткән. Мин - солтан Морат. Был кәрҙәште беҙ хәҙер йыуып, кәфенләп, матур итеп мосолманса ерләйәсәкбеҙ", - ти.

Ысынлап та, кешеләрҙе ҙур гонаһтан аралап йөрөгән был ирҙең йыназаһында күп кешеләр - солтан үҙе, ғалимдар, шейхтар һ.б. ҡатнашҡан.

Аллаһтың ҡөҙрәте киң - изгелек ҡылғандар ошо изгелегенең һөҙөмтәһен ҡасан да булһа күрәсәк. Аллаһ ризалығы өсөн эшләнгән эш баһаһыҙ ҡалмай. Ә беҙгә кеше хаҡында аңын-тоңон белмәйенсә, тәү күреүҙән уға баһа биреүҙән һаҡланырға ғына кәрәк...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Шулай итеп, уңышлы үҫеш өсөн һеҙгә проблемалар менән күҙгә-күҙ осрашырға кәрәк. Уның үҫеше тураһында һөйләшер өсөн ниндәйҙер компанияға килһәм, тәү сиратта төп биш проблема тураһында белешәм. Проблемаларға икенсе күҙлектән ҡарап, беҙ уларҙың артында иң ҡеүәтле үҫеш рычагтарын табабыҙ.

Һуңғы ваҡытта барыһы ла тиерлек нейролингвистик программалауға (НЛП) мөкиббән китте. Әйҙәгеҙ, уны ғәмәлдә тикшереп ҡарайыҡ. Бының өсөн һеҙҙең матдәләр алмашыныуын айырым һүҙҙәр ярҙамында программалап ҡарайыҡ. НЛП һеҙгә стандарт булмаған фекерләүегеҙҙе үҫтереп, "Ауыр хәл-тороштан мин ниндәй файҙа ала алам?" йәки "Был һынауҙы үтеп, мин нимәгә өйрәнә алам?" - тигән һорау бирергә ғәҙәтләндерер. Был ҡеүәтле ҡоралды проблемалар менән осрашҡанда һәр саҡ ҡулланырға тырышығыҙ. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәҫ. Әҙерһегеҙме? Башланыҡ. Аяғөҫ баҫығыҙ һәм бармаҡтарығыҙ менән еңеү билдәһен күрһәтеп: "Мин муйындан б..ҡа баттым!" тип, бар тауышҡа ҡысҡырығыҙ. Еңел булып киттеме? Ниндәй проблема килеп тыуһа ла, шулай эшләгеҙ. Хәҙер транспортта йәки кафела ҡапыл шулай тип ҡысҡырып аяғөҫ баҫҡан үҙегеҙгә ситтән ҡарағыҙ һәм үҙегеҙҙең кисерештәрегеҙҙе тойоғоҙ.

## Уңыш арҡаҙаштары

Уңыш юлында беҙҙе бик күп дошмандар көтөп тора. Әммә һеҙ яңғыҙ сәйәхәт итмәйһегеҙ бит. Әгәр аңдың мөһим дүрт торошо (һәр гипотезаны тикшерһәгеҙ, интуициягыҙҙы үҫтерһәгеҙ, балалар самимилығын һаҡлап ҡалһағыҙ һәм менталь броняға төрөнһәгеҙ) менән ҡоралланһағыҙ, уңыш яуларға ярҙам итәсәк арҡаҙаштар менән осрашыуға әҙер буласаҡһығыҙ.

## Беренсе арҡаҙаш: ҡыҙыҡһыныусанлыҡ

Һеҙ көн оҙоно үҙен ҡыҙыҡһындырған бер генә һорау ҙа бирмәгән берәй баланы беләһегеҙме? Проблема шунда, үҫә барған һайын беҙ һорау бирергә онотабыҙ. Беҙҙе бөтөн нәмәгә лә ҡыҫылмаҫҡа һәм һорау бирер алдынан ҡул күтәрергә өйрәтәләр. Һөҙөмтәлә тәбиғи ҡыҙыҡһыныусанлығыбыҙ юҡҡа сыға.

Әгәр тормошоғоҙҙо үҙгәртергә, уны ҡыҙыҡлыраҡ итергә теләһәгеҙ, күберәк ҡыҙыҡһынырға кәрәк. Хатта әләсәйегеҙ, "ҡыҙыҡһыныу хәйерлегә түгел", тиһә лә, уны барыбер яратығыҙ, әммә әкиәттәрен тыңламағыҙ. Көн һайын ауыҙығыҙҙан "ни өсөн?" тигән һорау кәм тигәндә 10 тапҡыр сыҡһын һәм уларға яуап табыу өсөн ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

Мин күп нәмә менән ҡыҙыҡһынам, тип әйтеү генә етмәй. Һеҙгә тикшеренеүҙәр һәм тәжрибәләр үткәрергә кәрәк. Уҡыу, күҙәтеү һәм һығымта яһау ғына етмәй. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ишеткән - онотола, күргән хәтерҙә ҡала, үҙең эшләү аңларға ярҙам итә.

**Пьер МОРАНСИ.**

*✓ Үҙен шәхес тип иҫәпләгән айырым берәү менән һөйләшкәнсе, тотош бер төркөм менән аңлашыуы күпкә еңелерәк.*

*(Жюль Ренар).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 1773-1775 ЙЫЛДАРҘАҒЫ КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ

**Емельян Пугачёв етәкселегендәге 1773-1775 йылдарҙағы крәҫтиәндәр һуғышы (Пугачёвщина, Пугачёв болаһы, Пугачёв ихтилалы) - казактарҙың, крәҫтиәндәрҙең һәм Урал менән Волга буйы халыҡтарының императрица Екатерина II хөкүмәтенә ҡаршы оло масштаблы һуғышҡа әүерелгән ихтилал.**

1772 йылда Яйыҡ ҡаласығында ғәскәрҙең юғары старшиналар ҡатламына һәм хөкүмәт вәкилдәренә ҡаршы казактарҙың ихтилалы башлана. Ихтилал баҫтырыла, әммә казактар баш эймәй, ә яңы сығышҡа сәбәп көтөп тына. Шуға Яйыҡта үҙен Пётр III тип иғлан иткән Дон казагы, ҡасҡын Пугачев килеп сығыуы менән көрәш яңыра. 1773 йылдың 17 (28) сентябрендә Бударин форпосынан башланған Яйыҡ казактарының яңы сығышы бик тиҙ Ырымбур крайын, Уралды, Кама буйын, Башҡортостанды, Көнбайыш Себерҙең бер өлөшөн, Урта Волга буйын ялмап ала. Ихтилал барышында агитация һәм иң мөһим хыялдарҙы тормошҡа ашырыу буйынса вәғәҙәләр һөҙөмтәһендә казактарға башҡорттар, ҡалмыҡтар, ҡаҙаҡтар, сыуаштар, татарҙар, Урал заводтары крәҫтиәндәре ҡушыла. 1773 йылдың сентябренән 1774 йылдың мартына тиклем ихтилалдың беренсе этабы баш күтәреүселәрҙең уңыштары менән билдәләнә. Ихтилалсылар Ырымбурҙы, Яйыҡ ҡаласығын, Өфөнө баҫып ала, күп һанлы ҡаласыҡтарҙы, нығытмаларҙы һәм заводтарҙы яулай.

Хөкүмәт тәжрибәле генерал-аншеф А.И. Бибиковты етәксе итеп тәғәйенләй һәм 1774 йылдың март айында баш күтәреүселәр бөтә урындарҙа ла уңышһыҙлыҡҡа тарый. Әммә Бибиковтың вафатынан һуң, 1774 йылдың апрелендә ихтилал Көньяҡ Урал заводтары өлкәһендә һәм Тарихи Башҡортостанда яңы көс менән ҡабына. Пугачев Урал һәм Кама буйындағы походтарҙан һуң 1774 йылдың июлендә Ҡаҙанды баҫып ала. Ҡаҙан тирәһендә өс көнлөк алыштарҙың уңышһыҙлығынан һуң Пугачев Волганың уң ярына сыға. Екатерина II ихтилалды баҫтырыу маҡсатында генерал-аншеф П.И. Панин етәкселегендәге ҙур көстәрҙе йүнәлтә. Пугачев Түбәнге Волгаға ҡаса, әммә бында уны Дон казактары ярҙамһыҙ ҡалдыра һәм ул Ҡара Яр эргәһендәге һуғышта еңелә.

Баш күтәреүселәрҙең төп армияһының еңелеүенә ҡарамаҫтан, Волга буйындағы крәҫтиән һуғышы һәм Тарихи Башҡортостандағы ихтилал 1774 йылдың аҙағына тиклем дауам итә, ә ҡайһы бер сығыштар хатта 1775 йылдың уртаһына тиклем бара. Пугачев һәм уның көрәштәштәре тикшереүҙәрҙән һәм судтан һуң 1775 йылдың ғинуарында Мәскәүҙә язалана.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**51-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Яуаптар: Горизонталь буйынса:** Юха. Йөҙ. Батыр. Горыныч. Гете. Етегән. Ҡуҙғалаҡ. Торс. Лау. Науруз. Ҡонан. Ҡусты. Дракон. Нәфрәт. Ҡойҡа. Арба. Асыу. Урал. Дана. Ыҙма. Ҡала.

**Вертикаль буйынса:** Ҡәһҡәһә. Гөҙмән. Ҡаҡ. Нанай. Геолог. Ҡаурый. Ҡаф. Аҡбур. Уҡлау. Балдаҡ. Непал. Трос. Ҙур. Че. Тун. Дарыухана. Умарта. Гусар. Наказ. Нужа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**17 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**18 ғинуар "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов), Ш. Шәкүрова инсц.). 12+
**19 ғинуар "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**20 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**21 ғинуар "Ете быуын. Һаҡлаусылар"** спектакль-вербатим. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 ғинуар "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+
**Премьера! "Дейеүкәй"** (С. Лебо). 12+
**20 ғинуар "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 12.00 6+
**"Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 ғинуар "Коза-дереза"** (М. Супонин). 18.00 0+
**19 ғинуар "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 18.00 0+
**20 ғинуар "Етем төлкө"** (О. Штырляева). 14.00 0+
**20-21 ғинуар "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 ғинуар "Һамар һандуғасы"** Х. Әхмәтовтың 110 йыллығына арналған концерт. 6+
**20 ғинуар "В ожидании чуда. Фимбо"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн. 11.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 ғинуар "Ай янында йондоҙ булып балҡый унның моңло күңеле..."** Н. Йомағужинаның хәтер кисәһе. 6+
**20 ғинуар "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 13.00 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17-18 ғинуар "Его Величество Колобок второй"** (А. Кружнов), әкиәт. 10.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 ғинуар "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 12+
**19 ғинуар "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+
**20 ғинуар "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+
**21 ғинуар "Как Петух мир спасал"** (З. Сөләймәнов), Яңы йыл әкиәте. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

*АҢЛАТАБЫҘ*

## ЭШҺЕҘҘӘРГӘ...

**Әгәр бер нисә ай эш таба алмайһығыҙ икән, эшһеҙ статусы, шуның менән бергә пособие һәм һөнәр алмаштырыу йәки квалификация күтәреү өсөн бушлай курстар алырға мөмкинлегегеҙ бар.**

Ғаризаны "Рәсәй эше" порталы аша онлайн бирергә мөмкин. "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында иҫәп яҙмаһы ярҙамында теркәлегеҙ; өҫкө менюҙа "Бөтә сервистар", шунан "Бөтә хеҙмәттәр" тигәнде һайлағыҙ һәм үҙегеҙҙең йәшәгән төбәкте һайлағыҙ; "Ғариза бирергә" тигән төймәгә баҫығыҙ; шәхси мәғлүмәттәрегеҙҙе, һуңғы эш урыны тураһында мәғлүмәт тултырығыҙ, шулай уҡ резюме ҡалдырығыҙ. Әгәр ғариза биреүҙә ауырлыҡтар тыуһа, шәхсән мәшғүллек үҙәгенә мөрәжәғәт итегеҙ. Унда консультанттар ярҙамға килер.

*Туризм үҫешкән саҡта ике яҡ өсөн дә файҙа булырға тейеш. "Дөрөҫ" туристар республикала аҡса ҡалдырырға, йәғни төбәктең ҡаҙнаһын тулыландырырға тейеш.*



БАШҠОРТОСТАНЫМ!

# ҺОҠЛАНҺЫНДАР,

## тик зыян килтермәһендәр

**Йыл башындағы оҙайлы ялдар ваҡытында Мәскәүҙә эшләп килгән "Рәсәй" күргәҙмәһендә Башҡортостандың туристик потенциалы тураһында һөйләнеләр. Аҙна дауамында Мәскәү халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары республикабыҙҙың ял йорттары, туристик базалары, спорт үҙәктәре, тәбиғәте менән танышты. Ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс программа әҙерләгәндәр, "Афарин!" тиергә генә ҡала. Экскурсия үткәреүселәрҙе тыңлап йөрөгәндә үҙемдең Башҡортостан буйлап сәйәхәттәрем тураһында уйланым. Беҙҙең төбәктең туристик потенциалы шул тиклем ҙур, һәр район тураһында бер-нисә көнгә етерлек программа әҙерләргә була.**

Башҡортостан - туризм өсөн булдырылған төбәк, тип әйтһәм дә хата булмаç, моғайын. Бында бейек ҡая һәм тауҙар, ҡуйы урман һәм йәйрәп ятҡан яландар, тәрән күлдәр һәм мул һыулы йылғалар, тарих һаҡлаған мәмерйәләр һәм башҡа тәбиғи объекттар иҫ киткес күп. Һуңғы йылдарҙа был өлкәгә төбәктә иғтибар бермә-бер артты, ләкин эшләйһе эштәр бик күп әле. Туризм үҫешкән саҡта ике яҡ өсөн дә файҙа булырға тейеш. Республикаға килгән туристар өсөн дә, уларҙан төбәккә лә. "Дөрөҫ" туристар республикала аҡса ҡалдырырға, йәғни төбәктең ҡаҙнаһын тулыландырырға тейеш. Ике яҡтан да беҙгә үҫеһе лә үҫеһе әле.

Мәҫәлән, бөтә донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһенә йыл әйләнәһенә меңәрләгән кеше килә. Ләкин унда барған юлда туристар өсөн уңайлыҡтар юҡ тиерлек. Белорет яғынан юл тотҡанда ял итеп туҡтап, ашап-эсеп алыу өсөн һуңғы уңайлы туҡталҡа - Сермән боролошонда. Ә унан һуң әллә күпме ер бараһы, ә кафелар юҡ, улай ғына ла түгел, машинанан сығып, бер аҙ ял итерлек махсус урындар ҙа юҡ тиерлек. Ике яҡҡа ла машина гөжләп торған юлда ситкә сығып ҡына туҡтау үтә лә хәүефле. Мораҡ яғынан барыу бөтөнләй мең бәлә - кафе булмауына түҙерлек булыр ине, әгәр ҙә яҡшы юлдар булһа.

Республикала күпләп төрлө саралар ойоштороla. Миңә айырыуса былтыр матур итеп уҙғарылған "Китап байрам", "Әйҙә, уйнарға", "Башҡорт аты" фестивалдәре ныҡ оҡшаны. Китапҡа, уҡыуға, балаларға быуаттар дауамында башҡорттоң яҡын дуҫы булған атҡа булған иғтибар яҡшы күренеш. Халыҡтың был байрамдарға күпләп йыйылыуы уларҙың актуаллеген һәм үҙ ваҡытында ойошторолоуын асыҡ күрһәтте. Шулай уҡ беҙ ғаиләбеҙ менән Бөрө ҡалаһында уҙғарылып килгән "Бөрө билмәндәре" фестивалене бик теләп йөрөйбөҙ. Күңел дә асаһың, тәмле итеп ашайһың да, баш ҡалаға ла яҡын.

Туризмды үҫтереү өлкәһенә килгәндә, ҡайһы бер районлар иғтибарҙан ситтә ҡала. Мәҫәлән, Бүздәк районы алып ҡарайыҡ. Унда Климов һарайы кеүек архитектура һәйкәле, тау башында урынлашҡан һәм шишмә һыуҙары менән генә тулыланған үҙенсәлекле Мүклекүл, пляж һәм глэмпинг, ял итеү базалары урынлаштырыу өсөн уңайлы урындар күп. Шулай уҡ Бүздәк районының Өфөгә яҡын булыуы ла унда туризмды үҫтереүгә ҙур әһәмиәткә эйә.

Ирәмәл - туристар араһында ҙур популярлыҡ яулаған тау. Шуға күрә унда артылырға теләүселәр һаны йылдан-йыл арта. Миҙгелдең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, тау үҙенә тарта. Мин төрлө яҡлап Ирәмәлгә күтәрелгәнем бар. Силәбе өлкәһендә урынлашҡан Тәлҡ ауылы яғынан тауға артылыуы еңелерәк, ләкин турист өсөн уңайлы инфраструктура юҡ кимәлендә. Һәр хәлдә, 5-6 йыл элек был йөһәттән хәлдәр мөшкөл ине. Белорет яғынан барыуы ауырыраҡ, ләкин эшҡыуарҙар, урындағы хакимиәт, республика етәкселеге сәйәхәт яратыусылар өсөн уңайлыҡтар булдырырға тырыша. Мәҫәлән, оҙаҡламай "Иҙел башы" исемле туристик комплекс төҙөлә башлаясағы тураһында билдәле булды. Уңайлыҡ булған ерҙә туристар күбәйә, тимәк, урындағы халыҡҡа ла килем алып ҡалырға мөмкинлек тыуа.

Гөмүмән алғанда, Башҡортостан туризмды үҫтереү буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Яҡшы күренеш, ләкин иң мөһиме, ул республикабыҙҙың матурлығына зыян килтермәҫкә тейеш. Беҙҙең алда торған тәүбүрыс ошо.

**Ғәшүрә ИМАНБАЕВА.**



ӘЙҘӘГЕҘ...

# МУЗЕЙҘАРҒА ЙӨРӨЙӨК!

**Тормошобоҙҙа һәр ваҡыт ниндәйҙер илһам сығанағы булырға, яңы уй-фекерҙәр, ынтылыштар тыуып торорға тейеш. Быларҙың барыһын да матур музыкала, һынлы сәнғәттә, тәмле аш-һыуҙа, ҙауыҡлы урындарҙа, яҡшы кешеләр менән аралашыуҙа, спортта һәм башҡа өлкәләрҙә табырға була. Күптән түгел үҙем өсөн яңы илһам сығанағын музейҙарҙа астым.**

Беҙҙең республикала музейҙар эшенә ҙур иғтибар бирелә. Уларҙың төрлөлөгөнә, экспонаттарға бай булыуына иҫ китерлек. Тыуған төйәгеңдең тарихын белергә, уның мәҙәниәте менән танышырға теләһәң, күп милләтле халыҡтары тураһында мәғлүмәт кәрәкһә, бөгөнгөһө менән танышырға ниәт итһәң, тура музейҙарға йүнәлергә кәрәк.

Мәҫәлән, 160 йылға яҡын тарихы булған Башҡортостандың Милли музейындағы даими экспозицияһар йәки йыш асылған тематик күргәҙмәләрҙең һәр ҡайһыһы - үҙе бер асыш. Экспонаттар төрлөлөгө, музей фондтарының байлығы, оҫталыҡ дәрәстәре, балалар һәм ололар өсөн тәғәйенләнгән күп төрлө сараларҙың барыһы ла илһам сығанағы булырҙай. Шәхсән үҙем нәҡ Милли музейға сәйәхәттән һуң ҡул эшенә тотондом. "Башҡорт халыҡ этнографияһы" залындағы бай кейемдәр, биҙәүестәр коллекцияларының һәр ҡайһыһы тарихи сығанаҡ булыуҙан тыш, күҙҙең яуын алырлыҡ матурҙар. Музей коллекцияһында ҡуйылған ҡашмауҙы күреп, миндә лә ошондай матурлыҡ булдырырға теләк тыуҙы. Беренсе эшемдә оҙаҡ ҡына эшләнем, ләкин ул процесс миңә шул тиклем оҡшаны һәм был эшмәкәрлегемдә дауам иттем.

Ейәнем иһә музейҙа уҙғарылған "Ағас ҡалаҡ" яһау оҫталыҡ дәресенә эләгеп, үҙенә бик матур ҡалаҡ эшләп алды. Ҡайтҡас, уға һүрәттәр төшөрөп, лак менән буяны. Уға ла был эш күңеленә ятты, хәҙер үҙе өйҙә төрлө әйберҙәр эшләй. Бына бит ул, музейға бер генә барыу ҙа уның тормошона күп үҙгәрештәр индерҙе. Хәҙер музей афишаларын ҡарап ҡына йөрөй.

Баш ҡалабыҙҙа шулай уҡ Милли әҙәбиәт музейы, Хәрби дан музейы, М.Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт сәнғәт музейы, Өфө ҡалаһы музейы, Тарихи мультимедиа паркы, хатта ретро автомобилдәр музейы бар. Дөйөмләштереп әйткәндә, Өфөлә ҡыҙыҡлы экскурсиялар тәҡдим итеүсе 20-нән ашыу, ә республикала иһә меңдән артыҡ төрлө ҙурлыҡтағы музейҙар әүҙем эшләй. Уларҙың ишектәре барыһы өсөн дә асыҡ. Һәр музейҙа беҙ үҙебеҙ өсөн ниндәйҙер яңы мәғлүмәт аласаҡбыҙ, күңелебеҙҙе матурлыҡҡа көйләйәсәкбеҙ, илһам сығанағы табасаҡбыҙ.

Әйҙәгеҙ, музейҙарыбыҙға йөрөйөк, рухи байлыҡ туплайыҡ. Музейҙарға йөрөү, һис шикһеҙ, йәшәйешебеҙгә йәм өҫтәй, уны байыта һәм тулыландыра.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙҘЫҢ ЫҘҒЫШЫ...

## батшаның һуғышы бөтмәҫ

Ил һуғышһыҙ, һуғыш батырһыҙ, батыр яраһыҙ булмаç.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батша тажы ғына баш ауырыуынан ҡотҡармай.

**(Испан халыҡ мәҡәле).**

Үҙен шәхес тип иҫәпләгән айырым берәү менән һөйләшкәнсе, тотош бер төркөм менән аңлашыуы күпкә еңелерәк.

**(Жюль Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кешеләр бәхет эҙләп юлға сыҡҡан. Уларҙың ҡаршыһына әүлиә ҡарт тап булған.**

**- Беҙҙе алда ни көтә? - тип һораған кешеләр әүлиәнән.**

**- Һыу ташҡыны, - тигән әүлиә оҙаҡ уйлап та тормаҫтан.**

**- Улайһа, һыу ташҡынынан нисек ҡотолоу тураһында бер аҡыллы кәңәш бир беҙгә, - тигән кешеләр.**

**- Тәнегеҙҙе хәстәрләүҙән туҡтап, йәнегеҙ тураһында уйлағыҙ, - тигән әүлиә.**

**- Һин беҙгә һыу ташҡынынан нисек ҡотолоу тураһында кәңәш бир! - тип ныҡышҡан кешеләр.**

**- Бөтөн артыҡ нәмәләрегеҙҙе ташлағыҙ ҙа, ҡотолоу юлына еңелсә генә аяҡ баҫығыҙ, - тигән әүлиә һәм юлын артабан дауам иткән.**

**Кешеләр үҙҙәренең артыҡ әйберҙәрен барлай башлаған. "Йорт артыҡ әйбер түгел - унһыҙ бәхетле булып булмай. Йорт йыһаздары ла артыҡ була алмай - уларһыҙ ҡайҙа йоҡлайһың, ҡайҙа ултыраһың? Кейем иң кәрәк әйбер. Аҙыҡ-түлек запаһыҙ ҙа тулы ҡанлы итеп йәшәп булмай", - тип уйлаған кешеләр һәм бөтөн әйберҙәрен дә үҙҙәрендә ҡалдырыуҙы кәрәк тапҡандар.**

**Бына бер саҡ ҡойоп ямғыр яуа, йылғаларҙа һыу таша, кешеләрҙең өйҙәрен һәм ҡаралтыларын һыу баҫа башлаған. Һыу ташҡынынан ҡотолоу сараһын күрергә кәрәк булһа ла, кешеләр ашыҡмаған, уларға тир түгеп тапҡан йорто-ҡаралтыһын, башҡа әйберҙәрен ташлап китеү йәл булған. Бына шулай, үҙенең байлығы тураһында уйлағандар һыу төбөнә киткән, кемдәр әүлиәнең йән тураһындағы һүҙен иҫтә тотҡан, улар еңелсә генә юлға сығып, ҡотолоп ҡалған...**

**...Бәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр Ерҙә кешеләрҙе буласаҡ бәләләр тураһында иҫкәртеү өсөн Хоҙай тарафынан ебәрелә. Бәйғәмбәрҙе тыңламағандар Аллаһы ла тыңламаған һәм улар ҡаты яҙаға тарттырыла. Ә Аллаһың кешеләргә еткерер хәҡиҡәте ошо: "Тәнегеҙ тураһында түгел, йәнегеҙ тураһында хәстәрлек күрегеҙ, сөнки йән ул - Мин, ә Миңә Һөйөүҙән башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Ләкин һеҙ ахмаҡтарса ҡыланып, ул Һөйөүҙе Миңә түгел, тәнегеҙгә ебәрәһегеҙ. Шуға ла Мин һеҙҙең тәнегеҙҙе йәнегеҙгә ситлек ҡормаһын һәм асылығыҙҙы томаламаһын өсөн ошондай һыу ташҡыны менән йыуҙырам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 ғинуар 15 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111183

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.